*Ҡыйыш уҡ, атҡан менән, туры китмәҫ,*
*Көнөлдән яман һүҙҙең ҡуры китмәҫ.*
*Ҡоторған эт һауа ҡарап өргән менән,*
*Асманда торған айҙың нуры китмәҫ.*

*Мифтахетдин АҠМУЛЛА.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

13 - 19 МАРТ (БУРАНАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru 2002 йылдан башлап сыға Һатыуҙа хаҡы ирекле №11 (377)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

### Уҡытыусы - киләсәк илсеһе,

йәки Мәғрифәтселектең өҫтөнлөклө дәүләт идеяһы булыуы тураһында



8-9

### Кем курсалар донъябыҙҙы?

Бөгөн ул - сабый хәлендә.



10-11

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ЮЛАЕВСЫЛАР ҺЫНАТМАЙ:

## өлкәндәрҙә - Континет Кубогы, үҫмерҙәр - Рәсәй чемпионы

Беҙ йәшерәк саҡта гитараға ҡушылып йырланған бард йырҙарының береһенең һүҙҙәре күңелгә һеңеп ҡалған: "Низәр бар икән донъяла? Юҡ, тик ҡыш ҡына...". Шулай ҙа күңелдәребеҙҙә тик ҡыш ҡына түгел бөгөн, ҡыуаныстары ла ҡунаҡлай йыш ҡына. Ҡышҡы спорт уйындарының иң күркәм мәле - хоккей боҙ майҙандарында башланып ҡына торған плей-офф мәҙҙәте етте. Әйе, ошондай уйындарҙа яраҡкан командабыҙ "Салауат Юлаев" ҙур һөйөнөстәр ҙә, күңелдәребеҙгә ваҡытһыҙ төшкән ҡыраузай үкенес тә килтергәне бар. Әммә, нисек кенә булмаһын, юлаевсыларҙың өс йыл рәттән Рәсәй һәм Континенталь хоккей лигаһының регуляр чемпионатында беренсе урынды алыуы көйәрмәндәр күңеленә һары май булып яғыла. Быйылғы регуляр уйындар һөҙөмтәһендә "Салауат Юлаев" командаһы 129 мәрәй менән плей-офҡа лига лидеры сифатында аяҡ баҫты. Лига етәкселеге ошо һөҙөмтәне рәсми рәүештә билдәләү маҡсатында быйыл махсус кубок булдырҙы, һәм ошо "Континент Кубогы" тәүге тапҡыр Башҡортостандың төп хоккей командаһына тапшырылды.

Көйәрмәндәр мөхитендә ҡыуаныс һәм яңы өмөттәр тыуҙырған ошо ваҡиға айҡанлы Башҡортостан Президенты М. Ғ. Рәхимов "Салауат Юлаев" хоккей клубы тренерҙарына һәм уйынсыларына ҡотлау телеграммаһы ебәрҙе. "Хөрмәтле Вячеслав Аркадьевич! "Салауат Юлаев"тың хөрмәтле тренерҙары һәм хоккейсылары! Һеҙҙең барығыҙҙы ла яҡшы ҡаҙаныш - лига тарихында беренсе булып Континент Кубогы яулауығыҙ менән ысын йөрәктән ҡотлайым! Һеҙ өс йыл рәттән Рәсәй һәм Континенталь хоккей лигаһының регуляр чемпионаттарында үҙегеҙҙең иҫ киткес еңеүҙәрегеҙ менән бөтөн республика халҡына оло шатлыҡ алып киләһегеҙ. Спортсыларҙы яҡшы әҙерләгән өсөн "Салауат Юлаев" ХК-ның тренерҙар штабына һәм коллективына рәхмәт белдерәм. Киләсәктә лә үҙегеҙҙең матур традицияларығыҙҙы арттыра барып, тыуған клубығыҙ абруйын юғары тотоуығыҙға ышанам. Һеҙгә ныҡлы һаулыҡ, Башҡортостан һәм бөтә Рәсәй халҡына яңы спорт еңеүҙәре теләйем!" - тип әйтелә телеграммала.

Яңы ғына ҡарлы-боҙло Себер һаҙлыҡтары яғынан, Төмән тарафтарынан тағы ла бер ҡыуаныслы хәбәр килеп етте. Өфөнөң "Салауат Юлаев-1994" үҫмерҙәр командаһы (уның составында 1994 йылғы йәш егеттәребеҙ уйнай) Рәсәй хоккей клубтары командалары араһында шулай уҡ еңеүгә өлгәште. Беренсе урын өсөн алышта баш ҡалабыҙҙың йәш хоккейсылары Мәскәүҙең "Спартак" командаһын 3:1 иҫәбенә отто. Беренсе шайбаны юлаевсы Родион Моратов индерһә, икенсе осор уртаһында мәскәүлеләр иҫәпте тигеҙләүгә өлгәште. Артабан кем икенсе шайбаны индерә, психологик өҫтөнлөк тә шул командаға күсәсәген тренерҙар ҙа, йәш спортсылар ҙа яҡшы аңлай ине. Һәм беҙҙекеләр һынатманы: былтырғы Рәсәй чемпионы, "Киске Өфө" гәзитенә биргән интервьюһы аша уҡыусыларыбыҙға яҡшы таныш егетебеҙ Тимерхан Ғәйнуллин "Спартак" командаһы голкиперы аша шайбаны индерҙе. Өҫөнсө осорҙа ла йәш юлаевсылар сәмләнеп уйнаны, ә Максим Богатыренко индергән шайба һуңғыһы булды. Шулай итеп, "Салауат Юлаев-1994" командаһы икенсе йыл рәттән Рәсәй чемпионы исемен яуланы. Йәш команданың өлкән тренеры Руслан Сөләймәнов, тренер Андрей Василевский (әйткәндәй, уның улы, йәш юлаевсыларҙың ҡапҡа һаҡсыһы Андрей Василевский ошо турнирҙың иң яҡшы голкиперы, тип аталды) хоккей һөйөүселәргә яҡшы таныш: улар ваҡытында Башҡортостан хоккейын үҫтереүгә ҙур өлөш индергән спортсыларҙан һанала.

Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов йәш юлаевсыларҙы һәм уларҙың тренерын да Рәсәй беренселегендә еңеүҙәре менән ҡотланы. "Һеҙҙең еңеүҙәр - киләсәктә ватан спортына бик етди өлөш индереү ул, - тиелә Президент ҡотлауында. - Юлаевсыларҙың йәш быуыны артабан да башҡорт хоккейының матур традицияларын дауам итерәнә, хоккей мәктәбе байрағын юғары ҡулдарҙа тоторона ышанам".

Афарин, юлаевсылар, һеҙҙән яңы еңеүҙәр көтөп ҡалабыҙ!

**Вәли ИҘРИСОВ һөкләнды.**

### ҺИММӘТЛЕ ФЕКЕР!

**"Еңеү өсөн еңелә белергә лә кәрәк. Үҙгәреште ргә ҡаршылашыу урынына үҙгәрештәр ыңғайына бергәләп йөҙөргә өйрәнергә кәрәк. Һыуҙың тәбиғәте лә бит - ағым. Һыу һәр ваҡыт үҙ ағымы менән, бер нигә лә ҡаршылашмай ғына ағыуын белә. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Ерҙә һыуҙан да ҡеүәтлерәк стихия юҡ".**

**Робин ШАРМА.**





✓ *"Киске Өфө"нө семинарҙа ҡатнашыусыларға таратып та биргәйнеләр һәм бер күҙ һалыу менән үк гәзиттең башҡа баҫмаларға оҡшамаған икәнен шәйләргә өлгөргәйнем. Шунан бирле "Киске Өфө"нән айырылғаным юҡ.*



МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

# БӘЙҒӘМБӘРЕБЕҘ СӘХӘБӘЛӘРЕ...

## башҡорт ерендә

**2009 йылда миңә бер төркөм башҡорт мосолмандары менән Истамбулға барыу бәхете тейҙе. Бәхет, тип әйтеүем шунан: Истамбулда Нәҡшбәндиә тәрикәтенең бөйөк ишаны Осман Нури Топбаштың сөхбәттәрендә (дини әңгәмә) булып, уның Ислам тураһында уй-фекерҙәрен, кәңәштәрен тыңланым.**

Осман Нури Топбаш алтын силсәләлә 36-сы булып тора. 30-сыһы - Мәүләнә Хәлид Бағдади, 31-се - Арваси ишан, 32-се - Әхмәт Зиәнутдин булһа, 33-сө булып Зәйнулла ишан килә. Осман Нури Топбаш 1942 йылғы, бөтә донъяға күп һанлы китаптары менән билдәле шәхес. Ул да, Зәйнулла ишан кеүек, ҡуддуси сирруху, Нәҡшбәндиә тәрикәтенең Алтын силсәләһендә 30-сы булып торған Хәлидиә тармағын дауам итеүсе. Уның шул осрашыуҙар мәлендә мейегә һеңеп ҡалған һүҙҙәре күп булды. Шуларҙың береһе: "Мөхәммәт бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәләм) башҡорт халҡын һайлап алған. Иң беренсе 3 сәхәбәһен һеҙҙең ергә-илгә ебәргән. Шуға ла һеҙҙең халыҡ вәкилдәренең беҙҙең менән осрашыуына бик шатбыҙ, беҙ һеҙҙе күптән көтә инек, һеҙҙең өсөн ишектәребеҙ һәр саҡ асыҡ, ҡулыбыҙҙан килгәнсе ярҙам күрһәтәсәкбеҙ", - тигән һүҙҙәре булды. Башҡортостанға килергә теләгә ҙур икәнен дә аңғартты.

Төркиәнән әйләнеп ҡайтҡас, мин иғтибар менән тарихи сығанаҡтарҙы аҡтарып сыҡтым. Археологтар тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, ысынлап та, VII быуатта Башҡортостандың ҡайһы бер төбәктәрендә, мәҫәлән, Стәрлебаш районындағы ҡәберлектәрҙә мәрхүмдәр Ислам ҡанундары буйынса ерләнгән. Тарихсыбыҙ Салауат Таймаҫов тапҡан материалдарҙан күренеүенсә, 630-сы йылда Башҡорт-Болгар ерҙәренә 3 сәхәбә килгән: Абдрахман ибн Зөбәйер, Талха ибн Усман, Зөбәйер ибн Джад. Һуңғыһы Болгар иленә юл тотҡан, ике сәхәбә башҡорт ерендә ҡалған. Иң беренсе булып Исламды ҡабул итеүсе кеше - ул Аяткол Зәит, Ыҡ йылғаһы буйы аҫабаһы.

Шулай итеп, Ислам VII быуатта уҡ башҡорт ырыуҙары араһында тарала башлай. Был фекерҙе юғары мөфтөй Тәлғәт Тажетдин дә раҫланы. Уның әйтеүе буйынса, сәхәбәләр Өфө ҡалаһы тирәһендә ерләнгән. Татар-монгол яуынан һуң, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙең ерҙә Ислам нык ҡына зыян күрә һәм уны ҡабат тергеҙеү, белемле кешеләрҙең бик аҙ ҡалыуы сәбәпле, оҙаҡ ҡына ваҡытҡа һуҙыла. Ислам башҡорт халҡын берләштереп, ойоштороп, бөтә фетнәләрҙе йырып сығырға ярҙам итә. Юҡҡа ғына түгел, башҡорт халҡы үҙенең ихтилалдарында ер һәм азатлыҡ өсөн генә түгел, ә хаҡ Ислам динен һаҡлап ҡалыр өсөн дә көрәшкән. Бөгөнгө көнгә килгәндә, Мөхәммәт бәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәләм) тәүге сәхәбәләрен иҫләп, ишандарыбыҙҙың яҙған хеҙмәттәрен тергеҙеп, был фани донъялағы хамдан айырылып, киләсәк быуындарыбыҙҙы Ислам тәғлиметендә тәрбиәләү беҙҙең өсөн фарыздыр. Тағы ла бер тапҡыр шуны әйтергә тип яҙҙым мин был мәҡәләне.

**Сәғит ИСМӘҒИЛОВ.**

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# ҺӘР ЙӘШТӘГЕЛӘР ҘӘ...

## берҙәй яратҡан баҫма

2005 йылдың декабрендә Өфөгә республика халыҡ театрҙары режиссерҙары семинарына йыйылғайныҡ. Унда күренекле яҙыусы Мәрйәм Бураҡаева сығыш яһаны һәм әле беҙгә бик таныш булмаған "Киске Өфө" тигән гәзит менән дә таныштырып үтте. Тәнәфестә ошо гәзиткә яҙылыуҙы ла ойоштороп ебәрҙеләр. Яңы йылға күстәнәстәр алырға тип ҡалдырған аҡсаны сығарып, гәзиткә яҙылырға тура килде. Сөнки шунда уҡ "Киске Өфө"нө семинарҙа ҡатнашыусыларға таратып та биргәйнеләр һәм бер күҙ һалыу менән үк гәзиттең башҡа баҫмаларға оҡшамаған икәнен шәйләргә өлгөргәйнем. Шунан бирле "Киске Өфө"нән айырылғаным юҡ. Клубҡа ла йыл һайын яҙҙырабыҙ. Ғаиләбеҙ менән яратып уҡыйбыҙ, уҡылған һандарҙы Силәбе өлкәһендә йәшәгән һеңлемә биреп ҡайтарабыҙ. Өлкән улым Фәнүр гәзит менән бик ныҡ дуҫлашып алды. Уның мәҡәләләре "Киске Өфө"лә баҫылып тора.

Гәзиттең рубрикалары күп һәм бик үҙенсәлекле, тематикаһы бай. Уны төрлө йәштәге кешеләр - ололар ҙа, йәштәр ҙә, хатта балалар ҙа яратып уҡый. Һәр йәштәге, һәр һөнәрҙәге кешеләр ҙә берҙәй яратып уҡый ала торған гәзит ижад итеү һәр кемдең ҡулынан килмәй, шул йәһәттән дә "Афарин!" тиергә була "Киске Өфө"ләргә. Ғөмүмән, ул башҡа баҫмаларҙан иң уҡымлы булыуы менән айырылып тора. Киләсәктә лә яратҡан гәзитем "Киске Өфө"нән айырылмай, уның аша республика тормошо, заман һулышы менән хәбәрҙар булып йәшәргә яҙыр, тип ышанам.

**Фәнит ШАҺИЕВ.**
**Учалы районы Һәйтәк ауылы.**




Дыуан районының башҡорт теле уҡытыусылары.

# ХӨРМӘТЛЕ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Белеүегеҙсә, гәзит- журналдарға яҙылыу хәҙер, элекке кеүек, тотош йылға түгел, ә ярты йыллап ҡына башҡарыла. Ләкин икенсе ярты йыллыҡ тураһында ла алдан хәстәрләү гәзиткә инеп бара. Бына әле лә Федераль почта хеҙмәте 2010 йылдың икенсе ярты йыллығына ваҡытынан алда, тәүге ярты йыллыҡ хаҡтары менән гәзитебеҙгә яҙылыу башланыуын иғлан итте. "Киске Өфө"нөң 50665 индекслыһына һеҙ март аҙағына тиклем 306 һум 84 тингә, ә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары 282 һум 78 тингә яҙыла алаһығыҙ, апрелдән хаҡтар бер аҙ күтәреләсәк.**

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһын да дауам итмәксебеҙ.**

Әйҙәгеҙ, ауылдарҙа йәшәүсе ата-әсәйҙәребеҙгә, туғандарыбыҙға, яҡындарыбыҙға, дуҫтарыбыҙға, туған мәктәбебеҙгә, мәсеттәргә "Киске Өфө" гәзитен бүләк итәйек. Алты ай буйы гәзит уҡып кинәнер һәм баҫманың һәр һанын алған һайын һеҙҙе хәтеренә төшөрөр яҡындарығыҙ һәм рәхмәт уҡыр.

**Тағы бер тәҡдим бар...**

Кем тыуған көнө уңайы менән "Киске Өфө" гәзите биттәрендә ҡотланырға теләй? Шулар гәзиткә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәрә, тыуған көнө датаһын хәбәр итә һәм ваҡыты еткәс, гәзит биттәрендә беҙҙең ҡотлауҙы уҡып, бәләкәй генә булһа ла шатлыҡ кисерә.

**Өфөлә йәшәүселәр иһә "Киске Өфө"гә яҙылыуҙың бер нисә ысулын һайлай ала:**

- Үҙегеҙ йәшәгән йорт эргәһендә "Өфө-матбуғат" киоскыһында яҙылыу һеҙгә бик арзанға төшәсәк, унда бер йылға ла яҙылып була.
- Аҙнаһына бер тапҡыр редакциянан килеп алып йөрөй алһағыҙ, гәзитебеҙгә редакцияның үҙендә яҙылыу ҙа уңайлы һәм арзанраҡ: ярты йылға - 225 һум.
- Редакцияла яҙылыуҙың тағы бер төрө - коллектив менән яҙылһағыҙ, редакция машинаһы уны һеҙҙең коллективҡа үҙе килтереп бирәсәк. Тик һәр коллектив кәмендә 15-20 дана гәзит алдырырға тейеш, ул саҡта баҫмабыҙ ярты йылға 186 һум 60 тингә генә төшәсәк.

**Өфөләләргә әйтер тағы бер һүҙ...**

**"Гәзиткә яҙылырға аҡсам юҡ", "Почта бүлексәһенә инергә ваҡыт юҡ", "Подъездыбыҙҙа почта йәшниге юҡ", - тигән ваҡ һылтаныуҙарҙы ситкә ташлайыҡсы әле. Баҫмабыҙ тиражы аша үҙебеҙҙең баш ҡалала барлығыбыҙҙы, ҡеүәтебеҙҙе, берҙәмлекте, татыулыҡты күрһәтәйек, "Беҙ булғанбыҙ, барбыҙ, буласаҡбыҙ!" - тигән күмәк тауышыбыҙҙы ишеттерәйек, гәзиз милләттәштәр!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

# НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев Рәсәй һәм Көнсығыш Европа менән сауҙа буйынса Япония ассоциацияһының Иҡтисад институты етәксеһе Хироси Такахаси менән осрашты. Рәсми осрашыу барышында баш ҡаланың Өфө йылғаһы арьяғын үҫтереүгә инвестициялар йәлеп итеү мөмкинлектәре лә ҡаралды. Автотоннель һәм эстакада күперә төҙөү Өфө йылғаһы арьяғы биләмәһен үҙләштереүҙең мотлаҡ шарты булып тора. Япон экспарттары был проект документацияһы менән танышып, төҙөлөш урынын барып ҡарағандан һуң, тоннель төҙөү өсөн оҙайлы ваҡытҡа арзан кредиттар йәлеп итергә мөмкин, тип билдәләгән.

✓Рәсәйҙә 10-11 тәжрибә-экспериментал ҡасаба төҙөргә ниәтләнәләр. Уларҙа, сит ил технологияларын иҫәпкә алып, аҙ ҡатлы төҙөлөш технологияһы индереләсәк. Эксперименттa илдең бар төбәктәре лә ҡатнашасаҡ. Өлгө рәүешендә уларҙың күптәре Башҡортостанды һайлай. Ҡайһы бер төбәк етәкселәре тәжрибә уртаклашыу өсөн республикаға килеп киткән дә инде.

✓БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай йортонда Башҡортостан Республикаһында бала хоҡуҡтарын яҡлау проблемалары буйынса семинар үткәрелде. Ул Башҡортостан Республикаһында Бала хоҡуҡтары буйынса вәкилдең республиканың муниципаль районадарында һәм ҡала округтарындағы йәмәғәт ярҙамсылары институтын төҙөү сиктәрендә ойошторолдо.

✓Март башында Екатеринбург ҡалаһында "Мәктәптә мини-футбол" Дөйөм Рәсәй проектының 4-се этабы булып үтте. Салауат районы Малояҙ башҡорт гимназияһының ҡыҙҙар командаһы был проекттың 21 марттан Мәскәү өлкәһендә үтәсәк Бөтә Рәсәй финалына эләкте.

✓Нефтекама ҡалаһында башҡорт һәм татар йырҙарын башҡарыусыларҙың "Дуҫлыҡ моңо" халыҡ-ара конкурсы үтә. Ойоштороу комитеты мәҙәни сарала ҡатнашыуға ғаризалар 15 мартҡа тиклем ҡабул итәлә, тип хәбәр итә.

✓Шәйехзада Бабич исемендәге Дәүләт республика йәштәр премияһы буйынса комиссия 1 апрелгә тиклем эштәр ҡабул итә. Белешмәләр өсөн телефондар: (347) 276-45-87, 251-14-75.

АҘНА ШАҢДАУЫ

# ЕҢЕҮ БАЙРАМЫНА КЕМ НИСЕК ӘҘЕРЛӘНӘ,

## йәки Сталин йәшәне, Сталин йәшәй, Сталин йәшәйәсәкме?



**Мәскәү Еңеү байрамын ҡаршыларға әҙерләнә. Мәскәү генәме ни? Бөтә донъя, бар халыҡ геү килә. Ябай байрам түгел бит. Еңеүҙең 65 йыллығы! 1945 йылдың 9 майы беҙҙән алыҫлаша барған һайын, ул көндәрҙе үҙ күҙҙәре менән күреүселәрҙең һаны көндән-көн кәмегән һайын, был байрамды билдәләү олораҡ, мөһабәтерәк, тантаналыраҡ төҫ ала башланы. Оло нәмә алыҫтан күренә, тиҙәр бит.**

Шундай хәбәр ишеттем әле. Имеш, Сталин заманында Еңеү байрамын билдәләмәгән булғандар. Йәнәһе, Иосиф Виссарионович ул көндө байрамға ла һанамаған. Юҡ, йәмәғәт, 9 май байрам булараҡ 1945 йылда уҡ иғлан ителгән булған. Әммә 1947 йылдан алып ул эш көнө һаналған. Һәм бары тик 1965 йылда ғына 9 май байрам һәм ял көнө тип ҡабул ителгән һәм тантаналы рәүештә билдәләнә башлаған. Тағы ла шуны әйтергә кәрәк: Советтар Союзында 9 май көндө бер ниндәй ҙә демонстрация йәки хәрби парад ойошторолмай торғайны. Быны мин дә хәтерләйем. 7 ноябрь, йәғни Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы байрамы көндө мотлаҡ һәр бер ҡалала, ауылда эшсәндәрҙең демонстрацияһы, ә илебеҙҙең баш ҡалаһы Мәскәүҙә Ҡыҙыл майҙанда бынан тыш тағы ла хәрби парад үткәрелә килде. Шул уҡ хәл 1 май - Хеҙмәтсәндәрҙең халыҡ-ара теләктәшлек көнөндә ҡабатланды. Ә Еңеү көнөндә һәйкәлдәргә сәскәләр һалыу менән генә сикләнә торғайнылар. Бары тик юбилей йылдарында ғына, йәғни 1965, 1985 һәм 1990 йылдарҙа Мәскәүҙә хәрби парад булып үтте. Гитлер Германияһын еңгән һәм үҙ халҡын ғына түгел, ә тиҫтәләгән илдәрҙе һәм халыҡтарҙы ҡоллоҡтан, улай ғына ла түгел, милләт һәм дәүләт булараҡ юҡҡа сығыуҙан ҡотолдорған дәүләттең шундай оло көндө байрам итеүҙән баш тартыуы ғәжәп тойола. 1995 йылдан бирле 9 май көнө Мәскәүҙә хәрби парадтар йыл да үткәрелә. Ә һуңғы йылдарҙа хатта хәрби техника, авиация ҡатнашлығында.

Быйыл да хәрби парад үткәрмәксебеҙ. Мәскәү, ана, был байрамға алдан уҡ әҙерләнә, тип берҙе әйттем инде. Ҡабатлап әйтеүем буштан түгел. Быйыл Мәскәүҙең урамдарын һәм майҙандарын Еңеү көнөнә арналған махсус плакаттар менән биҙәмәкселәр икән. Ябай ғына плакаттар түгел. Ундайҙар йыл да эленә. Быйыл улар КПСС Үҙәк Комитеты секретары, СССР Министрҙар Советы Рәйесе, СССР Ҡораллы көстәренең Баш командующийы, Советтар Союзы Маршалы, Советтар Союзы Генералиссимусы, СССР Фәндәр Академияһының почетлы ағзаһы, Социалистик Хеҙмәт Геройы, Советтар Союзы Геройы, "халыҡтар атаһы" һәм "бөйөк юлбашсы" Иосиф Виссарионович Сталиндың Бөйөк Еңеүҙе яулауға индергән өлөшөн сағылдырырға тейеш. Уйлап ҡараһаң, ысынлап та шулай бит был. Мәскәү властары ҡалай дөрөҫ ҡарар ҡабул иткән, әй. Быға тиклем беҙ 64 йыл буйына Сталиндың Еңеүгә индергән өлөшө тураһында уйлап та бирмәгәнбеҙ ҙә баһа. Ә бит ул тос һәм йөкмәткеле. Хатта баһалап бөткөһөҙ, тип әйтергә лә була.

Бөйөк нәмә алыҫтан күренә лә баһа. Быға тиклем күрмәгәнбеҙ шуны. Әйтәйек, Брежнев осоронда Леонид Ильичтың Бөйөк Ватан һуғышындағы роле һәм биләгән урыны айырым һыҙыҡ өҫтөнә алына торғайны. Миллионлаған тираж менән таратылған "Бәләкәй ер" китабы, көнө-төнө яңғыраған "Бәләкәй ер" йыры. Ә Сталин тураһында - ләм-мим. Ә бит полковник Брежневтыҡына ҡарағанда генералиссимус Сталиндың Бөйөк Ватан һуғышындағы уңыштары (һуңғы һүҙҙе тырнаҡ эсенә алып та тормайым) бихисап. Ғөмүмән, бары тик Иосиф Виссарионовичтың бөйөк стратегик пландарын тормошҡа ашырыу йәһәтенән генә совет ғәскәрҙәре 1941 йылда бер-бер артлы Киев, Минск, Харьков, Смоленск, Одесса, Днепропетровск кеүек илебеҙҙең көнбайышындағы эре ҡалаларҙы, Литва, Латвия, Белоруссия, Молдавия, Эстония республикаларын, Рәсәй Федерацияһының һәм Украинаның шаҡтай өлөшөн, миллионлаған совет граждандарын дошман тылында ҡалдырып, сигенеп түгел, ҡасып китергә мәжбүр булды түгелме? Тап Сталиндың хәрби оҫталығы арҡаһында һуғышҡа ингән ун һалдаттың тик береһендә генә винтовка булған түгелме? Ә? Бары тик Советтар Союзы Маршалының алдан күрә белеү һәм хәрби план ҡороу һәләте арҡаһында Ленинград ҡалаһы ике йылдан ашыу блокадала ҡамалып ятты түгелме? Ә Волхов һаҙлыҡтарында ятып ҡалған һәм һаман да күмелмәгән меңәрләгән ҡорбан? Ә һуғыштың тәүге айҙарында уҡ фашист әсиренә эләккән 3,5 миллион совет һалдаты? Ә Иосиф Виссарионовичтың "Бер аҙым да артҡа сигенмәҫкә!" тигән 227-се бойороғо? Ул бит хәрби тактик фекерҙең иң юғары нөктәһе! Александр Македонский менән Наполеон Бонапартың ары торһон! Винтовка тотоп атакаға күтәрелеүселәрҙең арттарына автоматсыларҙан торған заградотрядтарҙы ҡуйыуҙан да бөйөгөрәк план булыуы мөмкинме? Ә атлыларҙы танкыларға ҡаршы ташлау?

Бөгөн Сталинды ҡайһы бер тарихсылар "уңышлы менеджер" тип атай. Шулайҙыр. Ғалимдар белмәй әйтмәйҙәр. Бейек нәмә алыҫтан асығыраҡ күренә, тиҙәр бит.

Мәскәү етәкселеге Сталинға битараф түгелләген беренсе тапҡыр ғына раҫламай инде. Тәүҙә баш ҡалабыҙ метроһының бер станцияһын реставрациялаған ваҡытта "тарихи ғәҙеллек"те тергеҙеү ниәте менән Советтар Союзының Сталин осорондағы Гимнының тап "бөйөк юлбашсы" хаҡында әйтелгән бер һөйләмен яңыртып яҙғайнылар. Хатта уның һәйкәлен тергеҙеү тураһында ла һүҙ сыҡҡайны. Әле бына - плакаттар. Һылтау - әлеге ла баяғы "тарихи ғәҙеллек"те тергеҙеү. Уйлап ҡараһаң, әллә ниндәй еңәйәт тә юҡ һымаҡ. Йәғни, Сталинды бәрәү ҙә еңәйәтә тип иғлан итмәгән дә баһа. Ул һаман да илде "һуҡа менән ҡабул итеп, атом бомбаһы менән ҡалдырған" "һәҙемтәле менеджер" булып ҡала бирә. Хатта уның эшмәкәрлегенә тейешле кимәлдә тулайым баһа бирелгәне лә юҡ. Берәүҙәр уны халыҡты төрлө ысул менән ҡырған тиран һәм диктатор тип ҡарай. Әйткәндәй, ундайҙар әҙселек. Икенселәр өсөн Сталин һаман да бөйөк юлбашсы булып ҡала бирә. Нисек кенә ғәжәп тойолмаһын, ундайҙар һәм битарафтар күберәк. Ә Мәскәү етәкселегенең Бөйөк Еңеү унайы (дөрөҫөрәге, һылтауы) менән ойошторған Сталинды аҡлау акцияһы (икенсерәк әйткәндә, Сталиндың исемен тергеҙеү буйынса реклама компанияһы) был шәхес яҡлыларҙың, "ҡаты ҡуллы етәксе" теләүселәрҙең һанын бермә-бер арттырасаҡ ҡына.

Күптәр өндәшмәүҙе унай күрә. Ысынлап та, уйлап ҡараһаң, өндәшмәй ҡалыу һәр йәһәттән еңелерәк тә баһа. Заманалар үҙгәреп китһә, "ә мин бит бер нәмә лә тип әйтмәнем", тип һылтанырға ла була. Ә улар (Сталин яҡлылар, тимәксемен) өндәшмәй ҡалмайҙар. Юлбашсыларының исемен яҡтыға һөйрәп сығарырға, аҡларға төрлө юлдар эҙләйҙәр һәм табып ҡына торалар.

Мәскәү урамдарында һәм майҙандарында Сталин һүрәтләнгән плакаттарҙы ҡуйыу кемдең башына килгәнен беләһегеҙме? Юрий Михайлович Лужков уйлап тапмаған уны. Был тәҡдим менән Мәскәү етәкселегенә сығыусы кеше - Долгих Владимир Иванович. Әлеге ваҡытта Мәскәү Һуғыш, хеҙмәт, ҡоралды көстәр һәм хоҡуҡ һаҡлау органдары ветерандары советы рәйесе. Ул фронтовик - 1941 йылда уҡ һуғышҡа китә һәм 6-сы гвардия уҡсылар дивизияһының танкыға ҡаршы мылтыҡсылар ротаһының политругы итеп тәғәйенләнә. Ике тапҡыр Социалистик Хеҙмәт Геройы. 1982-1988 йылдарҙа КПСС Үҙәк Комитеты Политбюроһы ағзалығына кандидат. Күрәһең, ул йөрәгендә һаман Сталинға һөйөү һаҡлай. Һаҡлап ҡына ҡалмай, бөгөнгө быуынға ла шул мөхәббәтте тапшырырға ниәтләй. Ә уға берәү ҙә ҡамасаулай алмай. Еңеүселәр хөкөмгә тарттырылмай ҙа баһа.

Минә ҡайһы берәүҙәр, нишләп әйләнәһең дә шул Сталинға ҡаҙалаһың, тиҙәр. Минең уға ҡарата үҙемдең шәхси иҫәбем бар. Мин дә шымып ҡалһам, башҡалар ҙа өндәшмәһә, ғөмүмән, бөтәбеҙ ҙә ауыҙыбыҙҙы ябып торһаҡ, уның былай ҙа күренеп-күренеп ҡалған шәүләһе, ҡабаттан арабыҙға ҡайтып, тәнгө йөҡоларыбыҙҙы осормаҫ, тимә.

Кешенең бар бәләһе уның битарафлығынан, тиҙәр. Унан бигерәк алыҫтан күрә белмәүсәнлектәндер. Бөйөклөктө күрәбеҙ ул. Ә бына бөйөк яуызлыҡты әлегә күреп өйрәнмәгәнбеҙ.

**Таһир ИШКИНИН.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Яҙғы сәсеү алдынан ауыл хужалығы предприятиелары республика бюджетынан 400 млн һумлыҡ яғыулыҡ-майлау материалдары аласаҡ. БР Хөкүмәте Премьер-министры ошо туралағы бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы.

✓Яҙғы ташҡынға ҡаршы республика комиссияһы ултырышында билдәләнеүенсә, Ағиҙел йылғаһы буйындағы Стәрлетамаҡ, Өфө, Бөрө ҡалаларының түбән участкаларында һыу күтәрелеүе көтөлә. Яҙғы ташҡынға ҡаршы саралар өсөн 2 млн 431 мең һум аҡса бүленгән. Уларҙың 300 мең һумы тирәһе ғәҙәттән тыш хәлдәрҙе кисектереүгә тотоналасаҡ.

✓Әхмәтзәки Вәлидиҙең тыуыуына 120 йыл тулыуға арналған конференция Ҡаҙағстандың Алма-Аты ҡалаһында үтте.

✓6 марттан "Авианова" авиакомпанияһы иң түбән тарифлы (250 һумдан алып) Мәскәү-Өфө рейсы асты. "Өфө" Халыҡ-ара аэропортында үткән матбуғат конференцияһы ошо ваҡиғаға арналды. Авиакомпания директоры Владимир Горбунов әйтеүенсә, 27 мартҡа тиклем рейстар "Внуково" аэропортынан башҡарыласаҡ, 28 марттан ул "Шереметьево" аэропортынан оса башлаясаҡ. Рейс аҙнаһына өс тапҡыр шаршамбы, йома һәм йәкшәмбе көндәрендә башҡарыла. Йәйен был йүнәлештәге рейстар һаны артыуы ла ихтимал. Рейстар Airbus-320 (А320) самолеттарында тормошҡа ашырыла. 2003 йылда эшләп сығарылған был самолеттар 180 пассажир урынына иҫәпләнгән. Өҫтәмә аҡса түләп, пассажир үҙенә төрлө уңайлыҡтар талап итә ала.

✓БР Мәғарифты үҫтереү институтында "Йыл уҡытыусыһы - 2010" республика конкурсында ҡатнашыусылар өсөн инструктив -методик семинар үткәрелде. Унда 200-ләп кеше ҡатнашты. Конкурс апрелдең тәүге яртыһында үтәсәк.

✓19-20 мартта Иглиндә Мәғәфүр Хисмәтуллин исемендәге башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусыларҙың республика конкурсы үткәрелә. Конкурс шарттары буйынса ҡатнашыусы Мәғәфүр Хисмәтуллин репертуарынан бер йыр, башҡорт халыҡ йыры һәм үҙе һайлаған бер көй башҡарырға тейеш. Һорауҙар менән Иглин район хакимиәтенең мәҙәниәт бүлегенә (8 34795) 2-14-06 телефоны буйынса мөрәжәғәт итә ала.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БӘНДӘЛӘРҘЕҢ КЕМЕ ЮҠ...

**Башҡортостан Республикаһы буйынса Федераль миграция хеҙмәте идаралығы эске эштәр бүлеге һәм башҡа башҡарма власть органдары менән берлектә "Сит ил кешеһе" тигән операция үткәрә.**

Был сараның төп маҡсаты - сит ил кешеләренең хеҙмәтен законһыҙ ҡулланыусы физик шәхестәрҙе, предприятие етәкселәрен асыҡлау һәм яуапҡа тарттырыу. Уның барышында республика буйынса миграция закондарын боҙған 100 осраҡ теркәлгән, 3 енәйәт эше асылған.

Мәҫәлән, Өфө ҡалаһының Совет районында урынлашҡан шәхси йортта РФ территорияһында теркәлеү үтмәгән, эшкә рөхсәте булмаған 3 Үзбәкстан кешеһе салат етештереү менән шөғөлләнгән. Продукттарҙың күп өлөшө туалетта һаҡланған. Был эшселәрҙе Кореяла тыуған Рәсәй гражданкаһы эш һәм торлаҡ менән тәьмин иткән. Ул шәхси эшҡыуар булараҡ теркәлгән һәм әҙер продукцияны Өфөнөң эре супермаркеттары һәм магазиндарында һатҡан.

Нижегородка микрорайонында йәшәүсе Рәсәй гражданына ҡарата ла енәйәт эше асылған. Ул миграция закондары талаптарын яҡшы белеп, сит ил кешеләре арҡамында аҡса эшләргә ниәтләнгән. Бының өсөн төрлө баҫмалы күп функциялы ҡоролма һатып алып, миграция иҫәбенә ҡуйыу тураһындағы ҡарар бланкылары яһаған. Хеҙмәт өсөн уртаса хаҡ 2 мең һум торған. Әлеге ваҡытта уның 30 яһалма документ эшләп өлгөрөүе тураһында билдәле.

Яңауыл ҡалаһында Таджикстан Республикаһында тыуған кеше дезоморфин наркотик матдәләр етештереү һәм һаҡлау менән шөғөлләнгән, уға ҡарата ла енәйәт эше асылды. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ: сит ил граждандарын эшкә йәлеп иткән саҡта миграция закондарын һанға һуҡмау ҙур суммалағы штраф йәки енәйәт яуаплылығына тарттырыуға килтереүе ихтимал.

**Салауат ХИЛАЛОВ.**

# ИҢ ТАҘА ҺЫУ...

## "Таймаҫ" яҙыулы шешәлә

**Былтыр Мәскәүҙә халыҡ-ара дегустациялау конкурсында 200-ҙән ашыу һыу етештереүсе араһынан Башҡортостандан берҙән-бер "Таймаҫ" эсәр һыуы ғына бөтә күрһәткестәр буйынса "тере һыу" тип табылғайны һәм өсөнсө урын яулап ҡайтҡайны. Яңыраҡ "Таймаҫ" һыуын етештереүселәр Ҡаҙанда үткәрелгән "Таҙа һыу - 2010" 1-се махсуслаштырылған конкурста беренсе урынға лайыҡ булды.**

Бөтә донъя һыу етештереүселәр ойошмаһы мәғлүмәттәре буйынса, 80 процент етештереүсе крандан алынған ябай һыуҙы һатыуҙа сығара. Артезиан скважиналарынан табылған һыу ҙа яҡшы, тигән һүҙ түгел. Скважина менән алынған һыу механик рәүештә таҙартыла, шунан "ОСМА" таҙартыу ҡоролмаһы системаһына бирелә. Былдай таҙартылған һыуҙы өс айҙан артыҡ эсергә ярамай, ул кеше һаулығы өсөн зыянлы, сөнки ул үле һыу иҫәпләнә. Европа илдәрендә былдай таҙартылған һыуҙы иң ярлы ҡатламға һаталар, хатта бушлай бирәләр. Ә беҙҙә, киреһенсә, күпселек халыҡ тап ошондай таҙартыу аша үткән һыуҙы ҡуллана, сөнки уның үле булыуын һәм кеше һаулығына зыянлы булыуын аңлап етмәй.

Көйөргәҙелә етештерелгән "Таймаҫ" һыуы составында фенол бөтөнләй юҡ һәм ул былдай таҙартыуға мохтаж түгел, шуға күрә лә һыуҙың тәбиғи тәме һаҡлана. Был һыу енелсә таҙартыуға ғына дусар ителә һәм уның составынан бары тик механик ҡатнашмалар ғына алып ташлана. Бактерияларҙан таҙартыу өсөн һыу ультрафиолет менән эшкәртелә, агас күмере арҡамында таҙартыла. "Таймаҫ" һыуының составында кеше организмы өсөн кәрәкле булған тоҙҙар, кальций, магний, фтор, кобальт, йод, селен, хром, хлор, көкөрт, тимер, марганец, цинк кеүек макро- һәм микроэлементтар, минералдар бар.

ҺӨЙӨНСӨ!




**"Башҡорт халҡының тарихы" тип аталған ете томлыҡ академик баҫманың беренсе томы әҙерләнеүе тураһында былтыр гәзитебеҙҙә бик ентекле мәғлүмәт баҫылып сыҡҡайны һәм, ниһайәт, баш ҡалабыҙҙың Конгресс-холл бинаһында был китаптың презентацияһы булып уҙҙы.**

# ТАРИХИ БАШҠОРТОСТАН...

## таш быуатынан башлана

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең Премьер-министры урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус Илешев ошондай күркәм тарихи баҫманы әҙерләүгә республика етәкселегенең даими иғтибарын һәм ярҙамын билдәләп, Рәсәй фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты, Башҡортостан фәндәр академияһы ғалимдарының ижади әүҙемлегенә һәм фиҙакәр хеҙмәтенә юғары баһа бирҙе. Ул боронғо Башҡортостандың хәҙерге заман фәне концепцияларына ярашлы төҙөлгән объектив тарихнамәһен яҙыуға Рәсәйҙең танылған ғалимдарын йәлеп итә алыуҙы ла һыҙыҡ өҫтөнә алды.

"Башҡорт халҡының тарихы" баҫмаһының I томында тарихи Башҡортостан территорияһында иң боронғо (таш быуат осоро) дәүерҙәрҙән беҙҙең эраның IV быуатына тиклемге ваҡыт арауығында барған процестар киң сағылыш тапҡан. Академик баҫманың презентацияһында ҡатнашҡан ғалимдар, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре, журналистар алдында баҫманың ғилми етәксеһе, тарих фәндәре докторы Марат Ҡолшәрипов, баҫманың I томының мөхәрририәт коллегияһы ағзалары, Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры, филология фәндәре докторы Фирҙәүес Хисамитдинова һәм институттың археологик тикшеренеүҙәр бүлеге мөдире, тарих фәндәре кандидаты Владимир Овсянников сығыш яһаны. Баҫманың тәүге китабы Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимовтың тәбрикләү һүҙе менән асылып китә. "Күп томлы "Башҡорт халҡының тарихы" баҫмаһының донъя күреүе - Башҡортостан Республикаһы өсөн генә түгел, тотош Рәсәй өсөн әһәмиәтле ваҡиға. "Башҡорт халҡының тарихы" - Евразияның ҙур халыҡтарының береһенең этник тарихы, матди һәм рухи мәҙәниәте тураһында тулы ҡараш булдырыуға йүнәлтелгән фундаменталь комплекслы баҫма. Башҡорт халҡының күп быуатлы тарихын төрлө яҡлап һәм тәрән белеү уның артабанғы яҙмышын һәм XXI быуатта донъяның тиҙ глобалләшеүе шарттарында уның үҫеш ориентирҙарын дөрөҫ билдәләү мөмкинлеген бирә", - ти республикабыҙ етәксеһе.

Яҡын көндәрҙә ошо уникаль баҫма һатыуға ла сығарыласаҡ, һәм ул тыуған төйәгебеҙ тарихы менән ҡыҙыҡһыныусылар өсөн бик ҡиммәтле бүләк булыр, тип уйлайбыҙ.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ һөйөнсөләнә.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ШӘМ ХӘСТӘРЕ ЛӘ...

## мөһим хәстәр

**2014 йылдан Рәсәйҙә беҙ әле ҡулланған ҡыҙҙырма электр лампаһы етештереү туҡтатылып, уның урынына электрҙы һаҡлаусы лампалар барлыҡҡа киләсәк. Электрҙы һаҡлаусы лампаларға терегөмөш парҙары тултырылған, шуға ла экологияға зыян килтермәү өсөн эшлектән сыҡҡан лампаларҙы ябай лампалар кеүек сүп-сар менән бергә ташлау ярамай.**

-Экологик проблеманың масштаблығын күҙ алдына килтереү өсөн ябай ғына иҫәпләү үткәреп ҡарайыҡ, - ти Өфө ҡала округы хакимиәтенең экология һәм тирә-яҡты һаҡлау бүлеге етәксеһе Азат Ҡотләхмәтов. - Өфөлә яҡынса 370 мең фатир, һәр фатирҙа уртаса 8 лампа ҡулланыла, тимәк, уларҙың һаны ҡала буйынса 3 миллион тирәһе килеп сыға. Һәр электр һаҡлаусы лампала 2-7 миллиграмм терегөмөш була. Әгәр ҙә йылына 10 процент лампа эшлектән сыҡҡанда ла килограмм ярым тирәһе терегөмөш йыйыла. Ул тейешенсә утилләштерелмәһә, экологик һәләкәт тыуыуы ихтимал.

Әлегә Өфөлә былдай лампаларҙы йыйыу пункты юҡ, әммә ҡаланың Торлаҡ хужалығы идаралығы был мәсьәлә менән шөғөлләнә башлаған. Киров районында кәрәкле бина табылған, бөгөнгө көндә документтар әҙерләнә. Әгәр ҙә был проектты тормошҡа ашырып булһа, ҡаланың һәр районында ла эшлектән сыҡҡан лампаларҙы ҡабул итеү пункттары барлыҡҡа киләсәк. Ҡала хакимиәтендә был мәсьәлә буйынса башҡа варианттар ҙа ҡарала, мәҫәлән, лампалар йыйыу менән сауҙа селтәрҙәре лә шөғөлләнеүе мөмкин.

Электрҙы һаҡлаусы лампаларҙы утилләштереү өсөн ҡалаға йылына 30 миллион һум аҡса кәрәк буласаҡ. Был эш менән БР-ҙың Тормош хәүефһеҙлеге фәнни-тикшеренеү институты шөғөлләнәсәк. Утилләштереү процесында лампалар ваҡлана һәм 300 градусҡа тиклем йылытыла. Былдай температурала махсус иретмә һәм фильтрҙар ярҙамында терегөмөш парҙарын йыйыу мөмкинлеге тыуа. Йыйылған терегөмөш ҡабаттан ҡулланыу өсөн махсуслашҡан ойошмаларға ебәрелә. Азат Нуриәхмәт улы әйтеүенсә, ҡалала терегөмөш лампаларын утилләштереү эше күптән яйға һалынған, сөнки күп ойошмалар һәм уҡыу йорттары люминесцент йәки көндөҙгө яҡтылыҡ лампаларын 20 йылға яҡын ҡуллана.

Ҡала округы хакимиәте халыҡ өсөн мәғлүмәт ҡағыҙҙары ла әҙерләгән. Тиҙҙән улар бар лифттарға һәм подъезд ишектәре алдындағы иғландар таҡтаһына йәбештереп сығыласаҡ. Унда электрҙы һаҡлаусы лампалар менән нисек ҡулланырға һәм улар яңылыш ярылып киткән осраҡта нимә эшләргә кәрәклеге ентекләп яҙылған.

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Март уртаһынан республиканың аптека селтәрҙәрендә үтә кәрәкле һәм мөһим дарыуҙарға күмәртәләп һәм ваҡлап һатыу өҫтәмәләре кәметеләсәк. БР Хөкүмәте Премьер-министры ошо турала бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы.

✓Өфө дәүләт иҡтисад һәм сервис академияһы базаһында Йәштәр эшҡыуарлығы мәктәбе үҙ эшен башланы. Проект БР Йәштәр сәйәсәте, спорт һәм туризм министрлығы ҡатнашлығында тормошҡа ашырыла. Бында ике аҙна буйы үҙ эшен асырға һәм эшҡыуарлыҡҡа өйрәнергә теләүселәр уҡыясаҡ. Ошондай уҡ мәктәп 18 мартта Өфө менеджмент институтында ла (Өфө ҡалаһы, Вокзал урамы, 39А) асыласаҡ.

✓Ленин районының Затон ҡасабаһы яғына төньяҡтан инеү юлында төҙөлөш эштәре менән бәйле 15 марттан 25 мартка тиклем "Пархоменко урамы - "8-се март" ҡасабаһы" буйынса йөрөүсе 18-се маршрут троллейбус хәрәкәте туҡтатылып тора.

✓Февраль айында Өфө ҡала округы хакимиәтенең "Кайнар пейджер" хеҙмәтенә 125 шылтыратыу булған. Мөрәжәғәт итеүселәр күтәргән иң актуаль тема - торлаҡ йорттарҙы ремонтлау һәм файҙаланыу. Бигерәк тә кешеләрҙе түләү квитанцияларындағы "дөйөм йорт ихтыяждары" ("общедомовые нужды") тигән пункт ҡыҙыҡһындыра. Ҡала етәкселәре был пункт буйынса аңлатыу эштәре алып бара. Ниндәй генә һорау тыуһа ла, "Мэрия" абонентына 2-770-911 телефоны буйынса шылтырата алаһығыҙ.

✓Мәскәүҙә Рәсәй телевидениеһы академияһы советында үткән ултырышта "Башҡортостан" телерадиокомпанияһы директоры Рәмис Дәүләтбаев академия составына ағза итеп ҡабул ителде. Телеакадемия составында Владимир Познер, Елена Малышева, Алим Юсупов, Александр Цекало, Леонид Якубович кеүек күренекле журналистар ағза булып тора. Уға Михаил Швыдкой етәкселек итә.

✓20-21 мартта Башҡортостан Бокс федерацияһы спорт комплексында республика мәктәп-интернаттары, лицейҙары һәм гимназиялары уҡыусылары командалары араһында XII Спартакиада үткәрелә. Ғаризалар Өфө ҡалаһы, Нежинская урамы, 13 адресы буйынса Республика иҡтисад лицейында ҡабул ителә. Телефон: (347)242-98-39.

*✓ Ғәйеплеләрҙе төптәнерәк эҙләргә кәрәк. Берәй түрә, баш китмәле эш боҙһа, шым ғына "икенсе эшкә күсеү сәбәпле" тип, майҙан алып ҡаймаҡҡа һалына.*



*БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ ҺӨЙЛӘШӘМ*

# КЕМ ҺУҢ ҺИН -
## батырымы, бахырымы илдең?



Тирә-яҡҡа күҙ һалһам, башҡорт ерҙәрендә, Башҡортостанда йәшәүсе халҡыма, милләттәштәремә байҡау яһаһам, күңелгә ауыр таш ултырғандай, тамаҡҡа төйөр тығылғандай була. Башҡорт телен һаҡлайыҡ, берләшеп йәшәйек, тип янып-көйөп йөрөгән рухлы тыңдаштәрем менән күберәк аралашырға тырышһам да, бай күңелле уҡытыусыларым менән фекер алышып ҡанатланһам да, янымда киләсәгебеҙҙе ҡайғыртҡан кешеләрҙең һирәк икәнлеген күрәм. Ҡалала был хәлде мең сәбәп менән аңлатырға мөмкин булһа ла, ауылдарҙа яңылыш юлдан атлаусы йәштәрҙе күреп, күңел ҡырыла. Йәштәр яҙмыш һынауҙарына ҡаршы тора белмәйме, әллә тик үҙе тураһында ғына уйлап йәшәйме, аңламайым.

Донъяла бар ҙур мәсьәләләр бәләкәйҙәренең күбәйеүенән барлыҡҡа килә. Телебеҙгә бәйле бәләләрҙең тамыры ла, минеңсә, тәрбиәгә, иманһыҙлыҡҡа барып тоташа. Яҡшы тәрбиә алған бала белемгә, аңға ынтылып, изгелек эшләргә тырышып йәшәйәсәк, халҡы, теле тураһында ла уйланасаҡ. Туған телебеҙгә бәйле проблемалар ана шундай йәштәрҙең булмауы, дөрөҫ йүнәлештә эш алып барыусы ололарҙың аҙлығын күрһәтә лә инде. Үҙеңде генә ҡайғыртыу, әсә теленә битарафлыҡ, вайымһыҙлыҡ булмаһа ине ул. Йәмғиәтебеҙҙә, хатта үҙ милләттәштәребеҙ араһында ла башҡорт телен ҡәҙерләгәндәрҙән көлөүсе кешеләр бар. Ике башҡорт кешеһенең үҙ-ара рус телендә һөйләшеүен йыш осратырға тура килә. Улар, беренсенән, әсә теленең юғалыуына юл ҡуйһа, икенсенән, үҙҙәренең дәрәжәһен дә төшөрә. Башҡорт телемде яратып, уны өйрәнеүемдән көлгән ярлы күңелле тыңдаштәремдең "бахыр" тигән ауыр һүҙҙәрен ишеткәндән һуң, "Кем бахыр һуң әле?" - тигән һорау тыуа. Туған телен хөрмәт итмәгән, үҙенең кемлеген белмәгән, данлы-шанлы тарихын, бөгөнгөһөн һәм киләсәген аяҡ аҫтына һалып тапаған кеше - үҙе бахыр ул. Был донъяға килеп, йәшәү асылын аңламаған, әллә ниҙәр ҡыланып та күңел тыныслығы тапмаған, халҡы тураһында насар фекер тыуҙырып, сәскә атыр иленең киләсәген юйып йөрөгән кешене башҡа төрлө атап та булмайҙыр. Ғәзиз, берҙән-бер, ҡәҙерле туған телен ҡулдарына алып, юғары күтәргән килеш афәткә илтер ағымға ҡаршы атлаған кешене мин батыр тип атар инем.

Мин сикһеҙ шатмын: янымда эштәремде хуплап, кәңәштәре менән һәр яҡлап ярҙам итеп тороусы, күңелемде ҡанатландырыусы дуҫтарым бар. Ғәзиздәремдең минә "батыр" тип өндәшкән саҡтарында, мине күтәреп, үҙҙәренең дә күтәрелеүенә, һоҡландырғыс, өлгөлө батырға әйләнеүенә төшөнәм. Рауил Бикбаевтың шундай шиғыр юлдары иҫкә төшә:

Мөмкинме һуң яңғыҙ ҡалыуҙарың,
Мөмкинме һуң етем булыуың,
Еркәйемдең ете ҡаттарынан
Етегән шишмә булып гел типкәндә,
Етегән йондоҙ булып нур һипкәндә
Ете яҡтан ете быуыным.

Дуҫтарым, әйҙәгеҙ, уйланайыҡ әле, яныбыҙҙағы милләттәштәребеҙгә "батыр" тип өндәшәйек, бер-беребеҙгә терәк булайыҡ, ауыр саҡта ярҙам итәйек. Беҙҙе "бахыр" тип кәмһетеүселәргә лайыҡлы яуап биреү өсөн тарихыбыҙҙы өйрәнәйек, тартынмайынса, туған телебеҙҙә һөйләшәйек.

**Был донъяла бер тапҡыр ғына йәшәйбеҙ. Үҙеңде генә ҡайғыртып, башҡаларҙы йәберләп йәшәүҙән мәғәнә юҡ. Күңелемдә башҡорт улдарына һәм ҡыҙҙарына ошондай юлдар тыуа:**

**Бер бирелгән ғүмер минә, һиңә,
Ҡояш һибә беҙгә нурҙарын.
Ни маҡсатың?
Батырымы һин илдең?
Ҡай тарафҡа аға уйҙарың?
Тормош йәмләнер, әгәр кеше белһә,
Бурыс алып, ергә килгәнен.
Ашығырға кәрәк, аныҡ беләбеҙ бит,
Йәшәү мәңге түгел икәнен.**

**Зилиә ХУНАФИНА.**
**Р. Ғәрипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты уҡыусыһы.**

*ҺОРАУ - ЯУАП*

## МИЛЕКСЕ ҠАРАМАҒЫНДА

**Милкемдә ҙур ғына ер участкаһы бар. Мин уны бүлеп, ике балама бүләк итә аламмы?**

РФ Ер кодексының 11.4-се статьяһына ярашлы, ер биләмәһен бүлгәс, бер нисә ер участкаһы барлыҡҡа килә. Бүлгәндән һуң бер нисә ер участкаһы барлыҡҡа килгәс, әлеге дөйөм биләмә ғәмәлдә булыуҙан туҡтай, ә уның хужаһы был участкаларҙың һәр береһенә ҡарата милекселек хоҡуғы ала. Һөҙөмтәлә милексе был ерҙәр менән нисек теләй, шулай эш итә ала.

## РАҪЛАТЫУ КӘРӘКМӘЙ

**Былтыр ноябрҙә үк юл йөрөү ҡағиҙәһен боҙған өсөн протокол буйынса штраф түләнем. Ҡайҙалыр барып, уны раҫлау кәрәкме? Әллә аҡса түләгән квитанцияны инспекторға күрһәтеү ҙә етәме?**

- БР Эске эштәр министрлығының ЮХХДИ матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, әгәр штраф ваҡытында түләнгән икән, бер ниндәй проблеманың булыуы мөмкин түгел. Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы закон буйынса штраф түләү тураһындағы квитанцияны күрһәтеп тороу кәрәкмәй. Штрафты банкомат аша түләгән хәлдә ЮХХДИ мәғлүмәт базаһына штраф түләү хаҡында информация түләгән ваҡыттан алып тәүлек эсендә барып етә. Был турала ошо сайттан ҡарап белә алаһығыҙ: 02.gibdd.ru

Ә инде ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре ҡылығы менән килешмәүегеҙ хаҡында түбәндәге ышаныс телефонына мөрәжәғәт итергә була: (347) 235-84-04.

## КЕМДЕР ЯРҘАМҒА МОХТАЖ...

**Яңыраҡ фатирым янды. Ул страховкала түгел. Йортһоҙ, бер әйберһеҙ тороп ҡалдым. Ярҙам һорап кемгә мөрәжәғәт итергә?**

Өфө ҡалаһының һәр районында халыҡты социаль хеҙмәтләндереү буйынса комплекслы үҙәк эшләй. Унда ауыр һәм ҡатмарлы тормош хәлендә ҡалған граждандар, шул иҫәптән мөлкәте янған кешеләр мөрәжәғәт итә ала.

Был учреждениеларҙа ашығыс социаль ярҙам бүлексәләре асылды, унда милек төрө йә булмаһа торлаҡтың страховкала булыу-булмауына ҡарамаҫтан, бәләгә тарыған кеше кейем-һалым, аҙыҡ-түлек менән тәьмин ителә. Бынан тыш, ҡала хакимиәтенә мөрәжәғәт иткән хәлдә, үҙәк уларға документтарын яңынан юллап алыуҙа ла матди ярҙам күрһәтә ала.

**Халыҡты социаль хеҙмәтләндереү буйынса комплекслы үҙәк адрестары:**

Дим районы: Центральная урамы, 18, тел. (347) 281-49-69

Калинин районы: Б. Хмельницкий урамы, 53, тел. (347) 263-45-67

Киров районы: Менделеев урамы, 136/2, тел. (347) 256-55-04

Ленин районы: Ғафури урамы, 103, тел. (347) 251-04-35

Октябрь районы: Р. Зорге урамы, тел. (346) 282-55-82; Энтузиастар урамы, 6; Б. Бикбай урамы, 35/1

Орджоникидзе районы: Б. Хмельницкий урамы, 68/1, тел. (347) 263-33-26

Совет районы: Цюрупа урамы, 102, тел. (347) 273-31-47.

*ШАҢДАУ*



# АУЫЛДА ЙӘШӘҺӘМ ДӘ...
## донъя өсөн борсолоу ташламай

**Былтыр уҡытыусыларҙың август кәңәшмәһендә ҡатнашыусылар Баймаҡ районынан Йылайыр районына үткәндә юлдарҙа башҡортса яҙыуҙар юҡлығын абайланымы икән? Юҡтыр, күрәһең. Абайлап, берәйһе беҙҙең төбәк етәкселәренә иҫкәртеү яһаһа, хәл үҙгәрер ине, бәлки. Был беҙҙә башҡорт теленең дәүләт теле булыуы ҡағыҙ киҫәге генә икәнен раҫлай түгелме?**

Яңыраҡ шул уҡ Баймаҡ районының Темәс ауылында булдым. Унда быйыл Зәки Вәлидиҙең тыуыуына 120 йыллыҡты билдәләргә йыйыналар. Темәскә ингән ерҙә "с.Темясово" тигән яҙыу тора, башҡортсаһы юҡ. Шуға күрә, "Заки Валиди! Твоя столица теперь русская деревня", - тип яҙып ҡуйырға тәҡдим итәм. Былай ҙа Темәстә рустар - башҡортса, башҡорттар русса һөйләшә...

Тағы ла бер мәсьәлә борсой. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына делегаттар һайлана башланы. Һис юғы, ошо һайлауҙар мәлендә ғәҙеллек булһын ине. Юғиһә, ҡоролтай эшендә үҙҙәрен күрһәтер өсөн генә йөрөгәндәре лә бар. Беренсе ҡоролтай үткәрелгәндә Иҫке Сибай ауылы халҡының ни тиклем ризаһыҙлыҡ белдергәне мәғлүм. Суверенитет өсөн хәрәкәт башланғас, шунда ҡатнашыусыларҙы "фашистар" тип атаған кеше делегат булып барғайны бит...

Һуңғы ваҡытта депутат А.Назаровҡа һөжүм башланды. Ә бит уны Сибайҙан түгел, Өфөнән кемдеңдер күрһәтмәһе буйынса депутат итеп тәғәйенләнгән, тинеләр. Шунан хәҙер уның илде һатып, халыҡты хурлап йөрөүендә кемде ғәйепләргә һуң?! Ғәйеплеләрҙе төптәнерәк эҙләргә кәрәк. Берәй түрә, баш китмәле эш боҙһа, шым ғына "икенсе эшкә күсеү сәбәпле" тип, майҙан алып ҡаймаҡҡа һалына. Унығы иһә, йылы урында тиҙ генә ҡаймаҡтың ҡуйылығына ҡарап, үҙенә тағы ла ҙур ғына май йомғағы бешеп ала. Кем менән бүлешеп ашайҙар, уныһы халыҡҡа ҡараңғы. Шундай йәшертен эштәр дауам итһә, бер ваҡытта ла коррупция, ағай-энелек бөтмәйәсәк. Бына ошоларҙы уйлап, эс боша, йәмәғәт! Ауылда ятып, донъя өсөн, республика, халҡыбыҙ өсөн көйөнөп ултырғандар бер мин генә түгел. Тик беҙҙең тауышты ишетеүсе генә юҡ.

**Икен ЭТҠОЛОВ.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



## Быуындар ауыртһа

**Күп кеше бил, тубыҡ, быуындар ауыртыуынан яфалана. Ябай ғына ысулдар менән дауалап ҡарайыҡ.**

❖ Бер нисә алоэ япрағын ит турағыстан үткәреп, 50 грамм һутҡа 100 грамм бал, 150 грамм таҙа араҡы ҡушырға һәм ауыртҡан ергә компресс эшләргә. Был төнәтмәне оҙаҡ һаҡлап була.

❖ 200 грамм тоҙ, 100 грамм ҡоро гәрсисте (горчица) шул уҡ күләмдә кәрәсин өҫтәп, болғайһың. Килеп сыҡҡан май менән ятыр алдынан һеңеп бөткәнсе ауыртҡан урынды ышҡыйһың.

❖ Эре генә йылға ҡомон ҡыҙҙырып, оҙонса итеп тегелгән моҡсайҙарға һалаһың да, ауыртҡан урындарға ҡуяһың. Ҡомда төрлө файҙалы минераль матдәләр, металл бар. Йәйгеһен эҫе ҡомға күмелеү ҙә шифалы.

❖ 1 ҡалаҡ әрем сәскәһен 300 грамм ҡайнар һыуҙа төнәтергә һәм ауыртҡан ергә компресс яһарға.

❖ Бәпембәнең япрағы һәм тамырынан алынған һутты шул уҡ күләмдәге кишер һәм шалҡан һутына ҡушып, арҡаны ышҡыйһың, көнөнә 1-2 ҡалаҡ эсәһең. Умыртҡа һөйәге ауыртыуын баҫа.

❖ Тегәнәк тамырын 5-10 минут әкрен утта 0,4 литр һыуҙа ҡайнатҡанда мәтрүшкә, кейәү үләне ҡушаһың. 2-3 сәғәт төнәтәһең. Ас көйөнсә йәки ашағас, 2-3 сәғәттән һуң эсәһең. Һыҙланыуҙарҙан да, яман шештән дә һаҡлай, ярҙамы тейә.

## Бауырҙы таҙартыу

Бер ҡалаҡ үҫемлек майын тел аҫтына һалып, ауыҙығыҙҙы сайҡап, төкөрөгөҙ. 15-20 минуттан ауыҙҙа ҡалған май аҡ төҫкә инә, бер тамсыһын да йотмай, төкөрөгөҙ, сөнки ул бауырҙағы зарарлы матдәләрҙе үҙенә һеңдергән була. Ауыҙығыҙҙы сайҡағыҙ. Был ысулды 1-2 аҙна эшләһәгеҙ, бауыр шлактарҙан, тәнегеҙ төрлө токсиндарҙан таҙарыр.

## Варикоз һәм алма

Уртаса ҙурлыҡтағы антоновка алмаһын 1 литр ҡайнар һыуға һалып, 2 сәғәт төнәтергә лә, иҙгеләп, бутҡа итергә, һөҙөргә һәм иртән ас ҡарынға, кис йоҡо алдынан эсергә. Хәл яҡшырғансы дауам итергә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

***✓ Бөгөн мәктәптәребеҙҙә физкультура уҡытыусылары етешмәгәс, спорт ҡорамалдары, хатта саңғы ла булмағас, юғары ҡаҙаныштар ҡайҙан килһен?***



*АТА-ӘСӘЛӘР ЙЫЙЫЛЫШЫ*

**Февраль айы бар донъяла ҙур спорт менән ҡыҙыҡһыныусылар өсөн оло байрамға әйләнде: Ҡышҡы олимпия уйындары 4 йылға бер генә уҙғарыла бит. Спортҡа битараф булмаған рәсәйлеләр ҙә виртуаль, йәғни телевизор ҡаршыһындағы йомшаҡ диванға ҡунаҡлаған бер хәлдә булһа ла, үҙҙәрен ошо байрамдың хөрмәткә лайыҡ ҡунағы итеп тойорға өмөтләнде. Вазифалы спорт чиновниктары, сәйәсмәндәр, журналистар ғына түгел, Рәсәйҙең иң юғары етәкселәре лә миллионлаған көйәрмәндәренең өмөттәре мотлаҡ аҡланасағына ысын күңелдән ышанғандыр, тип уйлайым. Уңыштар беҙҙә артыҡ көттөрмәҫ кеүек ине: Төньяҡ Америка, Скандинавия илдәренән дә "ҡышҡыраҡ" Рәсәйҙә ҡышҡы спорт төрҙәрен үҫтереү өсөн махсус ҡулайлаштырылған бер тәбиғи мөхит, тип атап була бит!**

# БӘРӘКӘТҺЕҘ СПОРТ...

## хәрәкәтһеҙ донъябыҙ емеше

Ванкувер ҡорған байрам шаулап-гөрләп үтеп тә китте, әммә беҙ үҙебеҙҙе Пушкин әкиәтендәге ярыҡ ялғаш алдында ултырып ҡалған ҡомһоҙ әбей кеүек хис итәбеҙ: Олимпиаданың "алтын балығы" алтындарын Канада, Германия, АҠШ, Норвегия спортсыларына мул өләште, хатта Көньяҡ Корея һәм Ҡытайҙы ла буш итмәне. Ә беҙ, ҡәҙимгесә, урынһыҙ рәүештә күпкә өмөт итеп, аҙына ла хушһынмайса, зар илайбыҙ. Минеңсә, беҙҙең спортсыларыбыҙ өсөн үтә уңышһыҙ һәм күңелһеҙ тамамланған ярыштарҙан ил кимәлендәге трагедия яһауҙан бер фәтеүә лә юҡ. Улайға китһә, еңел автомобилдәребеҙҙең "иномарка"ларҙан күпкә ҡайтыш булыуын, йәиһә компьютерҙарҙы тик сит илдәрҙән индереүебеҙҙе, донъяның башҡа тарафтарында етештерелгән аҙыҡ-түлек менән ризыҡланыуыбыҙҙы һәм башҡа ошондайыраҡ күренештәрҙе иҫкә алһаҡ, башыбыҙҙағы сәстәребеҙҙе күптән йолҡоп бөтөргән булыр инек.

Спорт - тормош сағылышы, һәм ул хәҙер фән, сәнғәт йәиһә әҙәбиәт кеүек үк, йәмғиәттең ижади бер өлкәһенә әйләнде. Ҙур спорт бейеклектәренә күтәрелеү өсөн спортсының тәбиғи һәләттәре махсус рәүештә күп йылдар буйы үҫтерелеүгә мохтаж. Бөгөнгө спорт донъяһы шундай киң, һәм уның һәр айырым өлкәһендә ҙур уңыштарға өлгәшеү өсөн физик, психологик һәм рухи әҙерлек талап ителә. Әйткәндәй, 2010 йылғы Ҡышҡы олимпиаданы уҙғарыу хоҡуғы Ванкуверға бирелгәс, Канада хөкүмәте етәкселегендә спорт менеджерҙары ошо уйындарға әҙерләү өсөн бөтә ил буйынса бер нисә йөҙ иң һәләтле йәш спортсыларҙы һайлап ала. 7-8 йыл дауамында уларҙы әҙерләү процесы заманса спорт технологиялары һәм фәнни тикшеренеүҙәр һөҙөмтәләренә ярашлы алып барыла. Тап ошондай маҡсатлы эш Канада спортсыларының башҡалар һис көтмәгән оло еңеүенә алып килде.

Ғөмүмән, физик яҡтан да, интеллектуаль йәһәттән дә кешенең әле лә асылып бөтмәгән мөмкинлектәре күп. Психологтар раҫлауынса, һәр балаға тыумыштан ниндәй ҙә булһа өлкәлә бик юғары кимәлгә тиклем үҫешеү мөмкинлеге һалынған. Ата-әсәләргә, һуңынан тәрбиәсе һәм уҡытыусыларға, ә спортта тренерҙарға баланың һәләтен ваҡытында асып, уның артабанғы үҫешенә булышлыҡ итә алыу фарыз. Ошо уңайҙан уҙған быуаттың 80-90-сы йылдарында бар донъяны ғәжәпкә ҡалдырған Полгарҙар ғаиләһе иҫкә төшә. Венгрияла йәшәүсе педагог-новаторҙар Ласло һәм Клара Полгарҙар үҙҙәренең Жужа, София һәм Юдит исемле ҡыҙҙарын өйҙәрендә махсус программа буйынса тәрбиәләй, уларҙың интеллектын үҫтереү өсөн төп сара булып шахмат ҡулланыла. Ошо үҫмер ҡыҙҙар шахмат спортында быға саса күрелмәгән уңыштарға өлгәшеп, бер нисә тапҡыр ҡатын-ҡыҙҙар араһында Бөтә донъя олимпиадаһында еңеп сыға, ирҙәр менән уйнағанда ла һыр бирмәй. Шашка буйынса донъя чемпионы, башҡорт ҡыҙы Тамара Танһыҡҡужина ла Ишембай шашкасылары мәктәбендә бала сағынан уҡ сынығыу алған. Бөйөк башҡорт спортсыһы Ғабдрахман Ҡадыровтың мираҫына тоғролоҡ һаҡланғас, беҙҙең спидвей оҫталары донъя чемпиондары исемен йылдың-йылы бер кемгә лә бирмәҫ өсөн бар көсөн һала. Бындай миҫалдарҙы йөҙәрләп, хатта меңәрләп табып була.

Ҡытайҙы бөгөн конькиҙа фигуралы шыуыу буйынса совет мәктәбен ҡабатлай, тиҙәр. Шулаймы, юҡмы, әммә ҡытайлылар был спорт төрөндә донъя кимәлендәге уңыштарға өлгәште. Иң мөһиме, унда һәләтле балалар һәм үҫмерҙәр менән бик системалы һәм даими эш алып барыла, хөкүмәттәре йәштәрҙе спортҡа ылыҡтырыу өсөн аҡсаһын да мул тотона, сәләмәт тормош төҙөү маҡсатында өгөт-нәсихәт эшенә лә иғтибар бүлә. Беҙҙә лә спорт өлкәһендә һуш китерлек суммалар менән эш итәләр, әммә ул аҡса кемдер әҙерләгән спортсыларҙы һатып алыу өсөн тотонола. Спортта ла баҙар ҡанундары өҫтөнлөк алды, әммә бындай мөхиттә рухҡа, ихтыяр көсөнә һәм ватансыллыҡҡа урын ҡалмай башланы. Бөгөн мәктәптәребеҙҙә физкультура уҡытыусылары етешмәгәс, спорт ҡорамалдары, хатта саңғы ла булмағас, юғары ҡаҙаныштар ҡайҙан килһен? Хәҙер оҙон ҡыш буйына уҡыусылары саңғыға бер тапҡыр ҙа баҫмаған мәктәптәр бар, ә балаларын мәктәптән тыш спорт секцияларына йөрөтөү өсөн ата-әсәнән ваҡыт та, аҡса ла мул талап ителә. Күптәрҙең бөгөн бындай мөмкинлектәре юҡ. Әгәр илебеҙҙә халыҡ спорты урынына күҙ буяу өсөн генә тигәндәй уҙғарылған байрам-ярыштар ойоштороу өҫтөнлөк алған икән, юғары профессиональ спортты даими һуғарып тороусы сығанаҡ ҡороуға дусар була.

Олимпиада менән бәйле уйфекерҙәремде ҡәҙимге тормошобоҙҙан алынған бер күҙәтеү менән йөпләр инем. Мәктәп йәшендәге ҡыҙым менән йорттар араһындағы "хоккей тартмаһы"-на кистәрен конькиҙа шыуырға йөрөйбөҙ. Былай ғына шыуыу артыҡ ҡыҙыҡ булмағас, өлкән улымдың хоккей сәкәнен дә үҙем менән алам. Әйткәндәй, ваҡ бала-саға үҙҙәре менән өлкәндәр уйнағанын бик тә ярата икән. Уйнай торғас, малайҙар минән: "Дед, а вы раньше хоккеистом были, да?" - тип, һорашып та алды. Берәүһе: "Их, минең ҡартатайым да ни эшләп шайба һуғырға йөрөмәй икән?" - тип, уфтанып ҡуйҙы. Бер кисте беҙҙең компанияға минән бер аҙға йәшерәк бер ир үҙенең улы менән килеп ҡушылды. Тамам ҡараңғы төшкәс, 45-50 йәштәр самаһындағы ҡатын килеп, беҙҙең уйынды ҡарап торҙо. Ире менән улын киске ашҡа алып ҡайтырға килгән икән был. "Һеҙгә нисә йәш һуң?" -тип һорай ҡуйҙы ул минән. "Илле биш". "Минең ирем генә балалар һымаҡ бер ҡатлы икән, тиһәм, тағы ла берәү бар икән", - тип көлөмһөрәп ҡуйҙы ул.

Ошо ваҡиғаны иҫкә алыуымдың сәбәбе бына нимәлә: беҙҙең урта һәм олораҡ быуын кешеләре хәрәкәтсән һәм әүҙем тормош алып барыуҙан, төрлө спорт уйындарында ҡатнашыуҙан бөтөнләйгә биҙгән түгелме һуң? Ә беҙ, теләйбеҙме, теләмәйбеҙме, улҡыҙҙарыбыҙ, ейән-ейәнсәрҙәребеҙ тап ололарса, йәғни беҙҙеңсә йәшәү өлгөһөн һеңдереп, йә компьютер, йә телевизор алдында хәрәкәтһеҙ ултырыуҙы хуш күрәсәк. Халҡыбыҙ тотошлайы менән ошондай "ултыраҡ" тормошҡа күсә барғас, ҡайҙан килһен инде донъя кимәлендәге спорт ҡаҙаныштары. Боронғоларҙың, хәрәкәттә - бәрәкәт, тигәнен онотмаһаҡ ине, ватандаштар.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ уйланды.**

*ПСИХОЛОГ ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘЙ*

# ИЛАЙ, ТИМӘК...

## иғтибар талап итә

**"Бәләкәй ҡыҙым менән баҙарҙа, магазинда йөрөүе мөмкин түгел. Артыҡ иркәләтеп тә үҫтермәйбеҙ кеүек, һәр һораған әйберен һатып алып та шаштырмайбыҙ. Тик ул магазинға инеү менән тәм-томмы, ҡиммәтле уйынсыҡмы һорап, бар кешенең иғтибарын үҙенә йәлеп итерлек итеп, ҡысҡырып иларға тотона. Сит кешеләр алдында уны әрләүе лә ҡыйын, әммә баланДың ҡылығы өсөн оялып, һәр һораған нәмәһен һатып алырға ярамайҙыр ҙа инде. Ҡайһы саҡта түҙемлегемдең сигенә сығып, уны илата-илата магазиндан өҫтөрәтеп һөйрәп алып сығып китәм. Иң мөһиме шунда: бындай урындарҙа әсәһенең итәгенә йәбешеп илап йөрөгән балаларҙы йыш күрергә була. Был сетерекле хәлдән нисек дөрөҫ сығырға, кәңәш бирһәгеҙ ине.**

**Рәмилә, Өфө ҡалаһы".**

-Бала менән магазинға, баҙарға барырға йыйынһағыҙ, уның менән өйҙә һөйләшеп сығырға кәрәк. Мәҫәлән, "Хәҙер магазинға барасаҡбыҙ, унда беҙ һөт, икмәк, сыр, алма алырбыҙ, әлегә беҙҙең аҡсабыҙ шуларға ғына етә". Балаларҙың хәтере яҡшы була, "Икмәк алырға онотторма әле, ҡыҙым", - тип әйтһәгеҙ, баланың үҙенә ҡарата ышанысы артасаҡ һәм ул, һеҙ онотһағыҙ ҙа, онотмаһағыҙ ҙа, магазинда был турала бер нисә тапҡыр иҫкәртәсәк. Бала менән өйҙә килешеп сығыу күп проблемаларҙан азат итә, ул теләһә нимә һорамаясаҡ, иламаясаҡ та, һатып алдырырға теләгән әйберен алмағанға бер аҙ бошонһа ла, был турала тиҙ онотасаҡ. "Ҡалай үҙеңде магазинда яҡшы тоттоң", - тип маҡтап ҡуйырға ла онотмағыҙ һәм яҡшы тәртип өсөн нимәлер һатып алыу урынына, "Әйҙә, өйгә ҡайтҡас, һин яратҡан бәлеште бешерәйек", - тип тәҡдим итегеҙ.

Бала менән йышыраҡ аралашһағыҙ ине, хөрмәтле әсәйҙәр һәм атайҙар. Бала бәләкәй, әле ул бер нәмә лә аңламай тип уйлау ҙур хата, уның менән ни тиклем күберәк һөйләшһәң, шул тиклем бала үҙегеҙгә нығыраҡ эҫенәсәк, тыңларға ла өйрәнәсәк.

Әгәр ҙә бала урамда, магазинда кола һәм чипсы кеүек организмға зарарлы эсемлектәр һәм аҙыҡтар һорап йонсотһа, уларҙың зыяны тураһында һөйләгәнгә тиклем, балағыҙ менән бергә өй шарттарында берәй төрлө тәжрибә яһап ҡарағыҙ. Мәҫәлән, колаға сәйнәлгән һағыҙ төшөрһәң, ул күбекләнеп, ҡайнап китә. Кола эсһәң, эстә лә ошондай уҡ хәл буласағын, әйтмәһәң дә, бала үҙе аңлаясаҡ. Әгәр ҙә ҡыҙығыҙ йәки улығыҙ бындай аҙыҡтарҙың түмен белмәһә, ул бер ҡасан да уларҙы һорамаясаҡ, шуға ла тәмләтеп ҡарауҙан тыйыла белегеҙ.

Балаға һораған әйберен гел һатып алмау ҙа насар, сөнки беҙ был рәүешле уның үҙенә ҡуйған баһаһын түбәнәйтәбеҙ. Шуға ла уларҙы икенсе нәмәгә, әйтәйек, коланы һут менән алыштырырға тәҡдим итегеҙ. Баланың үтенесен кире ҡағып тороу һөҙөмтәһендә күңелдә йыйылған үпкә тойғоһо агрессияға әйләнеүе һәм: "Гөлдәргә гел алалар, миңә юҡ, шуға ла мин уныҡын боҙам, урлайым, унан үс алам", - тигән уйҙарға ла килтереүе мөмкин. Әгәр баланың үтенесен кире ҡағаһығыҙ икән, бының сәбәбен мотлаҡ аңлатырға кәрәк.

Бала тәрбиәләгәндә атай менән әсәйҙең бер ҡараштa булыуы шарт. Ҡайһы бер ғаиләләрҙә әсәй һорағанды кире ҡаҡһа, атай, киреһенсә, балаһы һораған һәр әйберҙе һатып ала. Был осраҡта бала, әсәйем мине яратмай, тип, уларҙы айырып ҡарай башлаясаҡ. Әсәй баланы нимә өсөндөр әрләй икән, атай баланы яҡлашырға тейеш түгел. Әсәй кеше хаҡлы булмағанда ла, атай кеше шымып тороп, аҙаҡтан, бала юҡта ғына был турала әйтә ала.

Бала ғаиләлә үҙенең кәрәклеген тойһон өсөн нимәнелер һатып алыр алдынан бәләкәй генә ғаилә йыйылышы уҙғарығыҙ. Мәҫәлән, өйгә ниндәй һыуытҡыс алырға, уны ҡайҙа ултыртырға, һ.б. Кәңәшләшеп эшләү күңеллерәк тә, бала ла яуаплылыҡҡа өйрәнә.

Шулай ҙа бала магазинда илай башлаһа, иң тәүҙә уны илауынан туҡтатырға тырышырға кәрәк. Хәйләләшегеҙ һәм ул нимә тиһә лә: "Мин һине ишетмәйем, аңламайым - нимә тиһең?" - тип тик тороғоҙ. Тынысланырға тырышып, күҙ йәштәрен ҡулының һырты менән һөртөп ебәрһә, тимәк, ул һөйләшергә әҙер. Хәҙер балағыҙға ул һораған әйберҙе ни өсөн һатып алырға теләмәүегеҙҙең сәбәбен аңлатһағыҙ ҙа була. Илай башлаған баланы ҡосаҡлау йәки уның менән шым ғына һөйләшә башлау ҙа уны тынысландыра ала. Күҙ йәше иғтибар йәлеп итеүҙең бер сараһы икәнен дә онотмағыҙ. Бала ниндәйҙер әйбер өсөн түгел, иғтибар талап итеп иларға ла мөмкин. Шуға ла һәр ваҡыт уның ыңғайына тороп, кәрәкмәгән нәмәләр һатып алырға бөтөнләй ярамай.

**Йәмилә МОРАТШИНА, психолог.**

**✓ Баймаҡ Советы эшселәре, бер нисә көн буйы, ҡыҙылдарҙың полкы килгәнсе, Ғабдулла Иҙелбаев менән Ғимран Мағазовты туҡмап, мыҫҡыллап, һорау алалар.**



ВӘЛИДИ КӨРӘШТӘШТӘРЕ

# ҒАБДУЛЛА ИҘЕЛБАЕВ



**Ғабдулла Сәфәрғәли улы Иҙелбаев - Башҡортостан автономияһының төүге ғәскәренә етәкселек иткән башҡорт офицерҙарының береһе, ҡаһарман сардар. 1893 йылда Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙенең Бошман-Һыуын-Ҡараҡыпсаҡ улысы (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Күгәрсен районы) Теләүембәт ауылында тыуған.**

Ҡаҙан мәҙрәсәһендә, артабан Ырымбур ҡалаһында 1-се ирҙәр гимназияһында белем ала. 1914 йылда Ҡаҙан университетының медицина факультетына уҡырға инә. Икенсе йылына университеттың юридик факультетына күсә.

Г. Иҙелбаев гимназия йылдарында уҡ халҡының тормошон яҡшыртыу, уның киләсәге тураһында уйҙар менән янып йөрөй. "Еще будучи в гимназии, Идельбаев любил выступать в качестве оратора. И жилка красноречия в нем проснулась, когда он впервые услыхал лекции на юридическом факультете. Он решил посвятить себя той науке, которая, по его мнению, вырвет родной народ из жадных рук всякого рода предпринимателей", - тип яҙа уның һабаҡташы.

Ләкин университетты тамамларға насип булмай. Уны хәрби хеҙмәткә саҡырылар. Прапорщик званиеһы биреп, Көньяҡ-көнсығыш фронтҡа ебәрәләр. Бында Иҙелбаев поручик дәрәжәһенә тиклем үрләй. 1917 йылдың йәйенән поручик Иҙелбаев Симферополь ҡалаһында хеҙмәт итә. Был осорҙа Башҡортостанда автономия өсөн милли хәрәкәт көсәйгәндән-көсәйә бара. Әйткәндәй, милли хәрәкәттең төүге осоронда Ғабдулланың атаһы Сәфәрғәли Иҙелбаев та әүҙем ҡатнаша. 1917 йылдың июнь аҙағында Башҡорт халҡының иттифаҡи бюроһы ағзаһы итеп һайлана.

Башҡортостандан ситтә, хәрби хеҙмәттә йөрөүенә ҡарамаҫтан, 1917 йылдың көҙөндә Башҡорт үҙәк шураһы Ғабдулла Иҙелбаевты Ырымбур губернаһы башҡорттарынан Рәсәйҙең Ойоштороу йыйылышына (Учредительное собрание) депутатлыҡҡа кандидат итеп күрһәтә. Уның кандидатураһы халыҡтың хуплауын таба һәм илдең оло ҡорона депутат итеп һайлана. Ә декабрь айында үткән 3-сө Дөйөм Башҡорт ойоштороу ҡоролтайында Иҙелбаев Башҡортостан автономияһының Кесе ҡоролтайы составына индерелә.

Ғинуар башында Ырымбурҙан телеграмма алыу менән (унда Иҙелбаевтың Ойоштороу йыйылышы һәм Кесе ҡоролтай ағзаһы итеп һайланыуы тураһында хәбәр ителә) Иҙелбаев Симферополдән тыуған яғына юллана. Әммә тимер юлындағы боларыш арҡаһында, Ырымбур ҡалаһына ғинуарҙың 17-18-ҙәрендә генә килеп етә. Килеп төшөү менән Бөрйән-Түңгәүер кантонындағы башҡорт отряды янына китә. Был ваҡытта прапорщик Ғимран Мағазов менән корнет Әмир Ҡарамышев етәкселегендә 400 тирәһе кешенән торған төүге башҡорт отряды ойошторолған була. Отряд Таналык-Баймаҡ заводында (хәҙерге Баймаҡ ҡалаһы) урынлаша. Башҡорт хөкүмәте поручик Иҙелбаевҡа ошо отряд менән командалыҡ итеү бурысын йөкмәтә.

Отряд 3-сө ҡоролтайҙың ҡарарҙарына ярашлы, Бөрйән-Түңгәүер кантонындағы алтын мәғдәнлектәрен Башҡорт хөкүмәте ҡарамағына күсерергә тейеш була. Әммә отрядтың ҡоралы етерлек кимәлдә булмай. Шуға күрә башҡорт офицерҙары, ҡорал мәсьәләһен хәл итеүҙе һорап, Баймаҡ эшселәр Советына мөрәжәғәт итә. Ҡорал өсөн тейешле аҡсаһын да бирәләр. Баймаҡ Советы Орск ҡалаһынан ҡорал һатып алып килергә вәғәҙә бирә. Ләкин 4 февралдә (яңы стиль буйынса 16 февраль) Ырымбур губревкомы Баймаҡ советына Башҡорт хөкүмәтен төрмәгә ябып, башҡорт отрядын юҡ итергә бойора.

Был хаҡта белмәгән Әмир Ҡарамышев отрядтың бер өлөшө менән ҡорал алып килә ятҡан Баймаҡ Советы большевиктарын ҡаршыларға сыға. Әммә тегеләр икенсе юлдан китеп, йәшерен рәүештә Баймаҡҡа ҡайта һәм башҡорттар өсөн тәғәйенләнгән ҡорал менән үҙ эшселәрен ҡоралландыра. Улар 16 февралдең төнөндә (2 март) Баймаҡта бер нәмә белмәй йоҡлап ятҡан башҡорт отрядын килеп баҫа. Башҡорт һалдаттарын ҡыуып таратып, командирҙары Ғабдулла Иҙелбаев, Ғимран Мағазов, прапорщик Усман Йәһүҙин, башҡорт отрядында хеҙмәт иткән биш поляк офицерын һәм дә Башҡорт хөкүмәте ағзаһы Хәбибулла Ғәбитовты ҡулға ала.

Иҙелбаевтың ауылында ҡунған Ҡарамышев, Баймаҡтағы хәл тураһында ишетеп, тирә-яҡ ауылдарҙан ике мең тирәһе башҡортто йыйып, Баймаҡты ҡамауға ала. Большевиктарҙан башҡорт офицерҙарын азат итеүҙе талап итә. Әммә ҡоро ҡул менән баштан-аяҡ ҡоралланған Баймаҡ эшселәренә ҡаршы ҡаршы һуғышҡа инергә баҙнат итмәй. Тиҙҙән Баймаҡҡа ҡыҙыл гвардия полкы килеп етә. Ә башҡорттар Баймаҡтан сигенергә мәжбүр була.

Баймаҡ Советы эшселәре, бер нисә көн буйы, ҡыҙылдарҙың полкы килгәнсе, Ғабдулла Иҙелбаев менән Ғимран Мағазовты туҡмап, мыҫҡыллап, һорау алалар. Ҡыҙылдарҙың полкы башҡорт офицерҙарын, улар менән бергә ике полякты атырға тигән ҡарар сығара. Хәбибулла Ғәбитов офицер булмауы арҡаһында ғына үлем язаһынан ҡотола. Уның хәтерләүенсә, 22 февраль (7 март) көнө, бөгөн һеҙҙе атасаҡтар, тип, Баймаҡ эшселәре Иҙелбаев менән Мағазовтың кейемен һалдырып, уларға таушалып бөткән кейем бирәләр ҙә, атырға алып китәләр. "Одетые в лохмотья, обутые в притащенные со свалки галоши, оставшиеся после грабежа даже без чулков, с голыми ногами, торчащими из дырявых галош, стоят они на снегу. Разрывающая сердце, страшная была эта картина...

Начальник красных отдал команду на молебен. Наши дважды по четыре раза произнесли намаз. Поляки крестились. После молитвы Габдулла Идельбаев и Гимран Магазов стоя на ногах, а поляки на коленях, вновь построились.

Габдулла Идельбаев сказал:

- Нас убиваете, но остается в живых еще два миллиона башкир. Вы не сможете заглушить нашу священную идею, пока не перебьете весь этот двухмиллионный народ. Мы встречаем смерть со спокойной душой.

Затем последовал приказ начальника красных. Так как расстрельщики были пьяны, залпа не получилось, стрельба оказалось беспорядочной. Польские офицеры, не сразу скончавшиеся, шевелились. Габдулла и Гимран, какой-то силой, все еще стояли на ногах. Вот затихли польские офицеры. А наши все стоят. Наконец, сначала Гимран, а за ним Габдулла, медленно склоняясь назад, упали, героически и с открытой грудью встретив славную смерть ", - тип яҙа Х. Ғәбитов.

Баймаҡтағы ҡанлы ваҡиғалар башҡорт халҡында большевиктарға ҡаршы нәфрәт уята. 1918 йылдың июнендә Башҡорт хөкүмәте большевиктарға ҡаршы һуғыш иғлан итә. Ул башҡорт халҡына яҙылған мөрәжәғәтендә: "...Войска наши, которые были нами посланы для охраны интересов и спокойствия башкирского народа в различных кантонах и для укрепления законности и порядков в кантонах, они путем обмана и для измены распустили, уничтожили (разрушили).

Начальников же наших войск, братьев наших Абдуллу Идельбаева и Гимрана Магазова и вместе с ними еще шестнадцать человек сделали своими жертвами и расстреляли. Предательское убийство родного любимого юриста Абдуллы Идельбаева, представляющего собой воплощение бьющей ключем у башкира отваги, силы, энергии, честности, искренности, надругание и издевательство над его телом за то лишь, что до последнего вдоха кричал: "Вам, угнетателям, не уничтожить автономии Башкирии, мы умрем, но народ вам убить не удастся!". И тут же выкрикивания перед плачущим и стонущим народом: ""Вот вам автономия!". Все это еще в феврале наглядно показало, кто такие большевики...".

1918 йылдың йәйендә Бөрйән-Түңгәүер кантоны халҡы, Башҡортостан автономияһы өсөн ҡорбан булған ҡаһарман башҡорт офицерҙарының исемдәрен мәңгеләштереү мәсьәләһен күтәреп сыға. Улар Баймаҡта Иҙелбаев менән Мағазов исемендәге мәктәп төҙөргә ҡарар итә. Бының өсөн иғәнә йыйыу ойошторола. Ә Башҡорт хәрби шураһы 1918 йылдың көҙөндә 2-се Башҡорт кавалерия полкына Ғабдулла Иҙелбаевтың исемен бирә.

**Азат ЯРМУЛЛИН.**

ҺУҒЫШТЫ КҮРАЛМАЙЫМ...

# УН ЕТЕ ЙӘШЛЕК...

## олатайыбыҙ



**Ҡыҙымдың уҡытыусыһы башҡорт әҙәбиәтенән өйгә эш итеп һуғышта йә булмаһа хәрби бәрелештәрҙә ҡатнашҡан, армияла хеҙмәт иткән һалдат исеменә хат рәүешендә инша яҙып килергә ҡушҡан.**

Баланың яҙмаһына күҙ һалам. Ләкин унда әлегә ике генә һүҙ етемһерәп тора: "Һаумы, олатай!" Минең һораулы ҡарашты тойоп, ҡыҙым үҙе минән һорай ҡуйҙы: "Әсәй, кем тип яҙайым икән? Һуғышҡа киткәндә ул бит минең йәштә генә булған. Барыбер олатай буламы?.." Көтөлмәгән был һорауҙан мин дә баҙап ҡалдым. Ысынлап та, әсәйемдең ағаһы Хәйретдин Низам улы Биктимеров Бөйөк Ватан һуғышына ун етеһе тулыр-тулмаҫтан алынған, сөнки, әсәйем һөйләүенсә, уның атаһы, беҙҙең Низам ҡартатай, ни сәбәп менәндер ваҡытында өлкән улы Хәйретдиндең йәшен бер йылға олораҡ итеп яҙҙырған була. Әсәйем был хаҡта әле булһа атаһына һуҡраныбыраҡ һөйләп ала: "Ана шулайтып бала ғына көйө дөрләп торған ут эсенә инде лә китте инде, бахыр..." Һәм шулай була ла: Хәйретдин олатай төүге бәрелештә үк дәһшәтле Курск дуғаһы ялҡынына барып инә һәм шунда һәләк тә була...

Хаттары килеп торҙомо, юҡмы икән, мәгәр "ҡара ҡағыҙ"ын алғандар, ләкин ул һаҡланмаған.

Әсәйемдең әсәһе Сабира зәзәйебеҙ улын юғалтыуҙы бик ауыр кисерә. Үлем хәбәрен алғас, тәҡәт итә алмай, урамға йүгереп сыға. "Ни генә ҡылып ҡарайым, ни хәлдәр итәйем... Балаҡтарымды төрөп, үҙем китәйемме әллә? Аяҡ-ҡулғынаһы сәс-баш булып, ҡайҙарҙа ятып ҡалды икән?.." - тип һамаҡлап илауы хаҡында ла һөйләп алғылай әсәйем. Шул ҡайғыны күтәрә алмай, һарыға һабышып, донъя ҡуя зәзәйебеҙ. Ғәзиз балаһының хат-хәбәрен ул һаҡлаған булғандыр ҙа бит, тик беҙ бик бәләкәй булғанбыҙ - һорашып, һөйләтеп ҡалынмаған, йәл. Хәйретдин олатайҙан ҡалған берҙән-бер иҫтәлек - уның гимнастерка һәм йондоҙло пилотка кейеп төшкән фоторәсеме ине. Әсәйем уны ҙурайттырып эшләтеп, рамлап, өйҙөң түрге стенаһына элеп ҡуйғайны. Рам ситтәрен ап-аҡ сигеүле-селтәрле һөлгө биҙәне. Бәләкәй саҡта мин был фотоға бик йыш күҙ ташламаҫҡа тырыша инем. Ниҙәндер тартына, ҡаушай ине күңел. Әле килеп, шуны аңланым: яратҡан зәзәйемде, уның сикһеҙ ҡайғыһын хәтерләтеп торған бит ул фоторәсем. Бәләкәй булһам да, зәзәйҙе иртә юғалтыу ҡайғыһы күңелгә һеңеп ҡалған булған, тимәк. Шуға күрә лә һуғыш тигән һүҙ минең күҙ алдына ҙур ҡайғы, әсә хәсрәте булып килеп баҫа. Юҡҡа ғынамы ни һуғышты, уның фажиғәһен кәүҙәләндергән һәйкәлдәр араһында әсә ҡайғыһына ла һәйкәл бар. Әлбиттә, улар бөтәһе лә ҡабат һуғыштар булмаһын, тип иҫкәртеп тора, ләкин булмаһын башҡаса ундай һәйкәлдәр ҙә. Әсә ҡайғылары яңырмаһын берүк...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

# Уҡытыусы - йәки Мәғрифәтселектең өҫтөнлөклө

**Һәр дәүләт, һәр йәмғиәт үҙ киләсәген ҡайғыртып йәшәй. Йәшәйеш ҡанундарына ярашлы, оло быуындарҙы йәшерәктәре алмаштырып тора. Беҙ бөгөн ул-ҡыҙҙарыбыҙҙан, ейән-ейәнсәрҙәребеҙҙән хасил буласаҡ яҡын киләсәгебеҙ йәмғиәтенә ҙур өмөттәр бағлайбыҙ. Ысынлап та, һәр яңы быуындың мөмкинлектәре киңәйә бара, тормоштоң һәр өлкәһенә үтеп инә барған яңы технологиялар кеше шәхесен бығаса күрелмәгән интеллектуаль һәм ижади бейеклектәргә күтәрә ала. Бөгөнгө йәштәребеҙҙең бик юғары энергетик потенциалы бар, һәм уның ниндәй йүнәлештәрҙә, ниндәй ғәмәли эштәрҙә асылыуына беҙ, олораҡ быуын, туранан-тура йоғонто яһай алабыҙ. Бына ошо күп быуаттар дауамында тормош ҡанунына әйләнгән быуындар бәйләнешен бөгөн уҡытыусы вазифаһынан башҡа күҙ алдына ла килтереп булмай. Башҡортостан уҡытыусылары съезы алдынан М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты ректоры, педагогия фәндәре докторы, профессор Рәил ӘСӘҘУЛЛИН заман мәғарифы һәм уҡытыусылыҡ тураһындағы уй-фекерҙәре менән уртаҡлашты.**

## Уҡытыусы заман менән бергә атлай

Уҡытыусының бөгөнгө миссияһы ябай түгел: ул белем биреүсе, ҡанун өйрәтеүсе, йәштәрҙе ҡабул ителгән нормаларға ярашлы тәрбиәләүсе ролендә генә ҡала алмай. Уны шәхестең үҫеш осорона хас булған энергетикаһын тыйып, баҫтырып тороусы итеп түгел, ошо йәш һәм ҡеүәтле көстө йәмғиәт һәм йәштәрҙең үҙҙәре өсөн файҙалы һәм һөҙөмтәле ғәмәлдәргә йүнәлтә белеүсе сифатында ҡарау фарыҙ.

Бөгөн уҡытыусы абсолют мәғлүмәт сығанағы ла, берҙәнбер хәҡиҡәт эйәһе лә түгел. Үҙгәреш кисергән йәмғиәттә уҡытыусы үҙе лә үҙгәрмәйенсә ҡала алмай. Ҡасандыр ул грамоталы, киң эрудициялы белем биреүсе булараҡ баһаланһа, бөгөн уҡытыусы өсөн был ғына аҙ. Интернет һәм башҡа технологик ҡаҙаныштар тормошобоҙға киңерәк инә барған һайын, уҡыусылар үҙләштергән дөйөм мәғлүмәт кимәле айырым уҡытыусы белгәндән арта барасаҡ. Уҡытыусының үҫмерҙәрҙе ҡыҙыҡһындыра белеүсе, йәлеп итеүсе, йүнәлеш биреүсе кеше булыуы бөгөн юғарыраҡ баһалана. Бер үк ваҡытта уҡытыусы уҡыусыларының аң һәм мәғлүмәт өлкәһен системалаштырыусы булараҡ эш итә. Уҡыусы аңында туплана барған айырымланған мәғлүмәттәрҙән системалы донъяуи ҡараш, системалы фекер йөрөтөү һәм системалы эш итә белеү формалашыуы мөһим. Ә быға тик уҡытыусы ғына булышлыҡ итә ала. Һәр бала менән айырым эш итә алмаһа ла, ул уҡыусыларының тормошта үҙ йүнәлешен дөрөҫ табырға мөмкинлек аса. Беҙ әлегә тиклем уҡытыусының ошо функцияһына иғтибар биреп еткермәнек, тип уйлайым.

## Бер олоно, бер кесене тыңла

Шекспирҙың "Тормош - сәхнә, ә беҙ шунда уйнаусы артистар", тигәне уҡытыусы эшмәкәрлегенә бик яҡын. Тик уҡытыусы башҡалар өсөн сценарий яҙыусы ла, режиссер ҙа, суфлер будкаһынан ниндәй һүҙәр әйтергә, нимә эшләргә икәнен әйтеп тороусы ла түгел. Уның тормош сәхнәһендәге төп бурысы - уҡыусыларына үҙ тормошоноң сценарийын үҙҙәре яҙа алыу мөмкинлеген булдырыу.

Педагогик системаның ҡайһы баҫҡысын алһаң да, уҡытыусылыҡ асылының бер үк булыуы асыҡлана. Миҫал өсөн юғары педагогия уҡыу йортон алайыҡ. Бер яҡтан, тормош һәм ҙур педагогик эшмәкәрлек тәжрибәһе туплаған оло быуын уҡытыусылары. Улар, башлыса, үҙҙәрен формалаштырған педагогик парадигма сиктәрендә эш итә. Йәш уҡытыусылар яңы заманға хас булған технологияларҙы еңелерәк һәм тиҙерәк үҙләштерә, яңы быуынға яҡыныраҡ тора. Вуздың педагогик коллективына, мәктәптәге кеүек үк, тәжрибәле оло быуын вәкилдәренең ҙур динамикалы, көслө энергетикалы йәштәр менән тығыҙ бәйләнештә эш итә алыуына өлгәшеү фарыҙ.

Йәмғиәт үҫешенең бөгөнгө этабында йәш көстәргә ҙур өмөт бағлана, сөнки заманса эшлеклелек, интеллектуаль, ижади һәм технологик әүҙемлек һәр кешенән, шулай уҡ педагогтарҙан да, ҙур энергетик ынтылышҡа эйә булыуҙы талап итә. Маҡсат бер: сарыфланмаған энергетик потенциалға эйә булған йәштәрҙе тотҡарлап, баҫтырып тотоуҙан азат булып, уларҙың иң яҡшы сифаттарын ғәмәлгә ашырыуға булышлыҡ итеү, тейешле шарттар булдырыу. Шул уҡ ваҡытта элеккенән, халыҡтарҙың тарихи-мәҙәни тәжрибәһенән яңыса фәһем алыу ҙа файҙалы булыр ине. Боронғо Грецияла сирле кешене дауалауҙа ҡулланылған бер ысул беҙҙең заман проблемаларын нисек хәл итеүгә ишара булып торғандай. Табип ауырыуҙы майҙанға алып сыҡҡан. Уның эргәһенән уҙған һәр кем ошо сирҙе нисек дауалап булыуы тураһында үҙ фекер-кәңәшен әйткән. Ахыр сиктә, барыһын да тыңлап бөткәс, табип нисек дауаланырға кәрәклеген сирле кеше менән бергәләп хәл иткән.

Оло быуын вәкилдәре, нисек кенә тәжрибәле булмаһын, ниҙелер мотлаҡ шул рәүешле генә эшләп була, тигән категорик фекерләү ҡалыбынан тайпыла алһын ине. Ниндәй генә мәсьәлә булмаһын, уны хәл итеүҙең төрлө һәм бик уңышлы юлдарын табып була. Уҡытыусы эшмәкәрлегендә лә бер нисә варианттан һайлап алыу мөмкинлеге булыуын педагогик принцип кимәленә күтәреү фарыҙ.

***Боронғо Грецияла сирле кешене дауалауҙа ҡулланылған бер ысул беҙҙең заман проблемаларын нисек хәл итеүгә ишара булып торғандай. Табип ауырыуҙы майҙанға алып сыҡҡан. Уның эргәһенән уҙған һәр кем ошо сирҙе нисек дауалап булыуы тураһында үҙ фекер-кәңәшен әйткән. Ахыр сиктә, барыһын да тыңлап бөткәс, табип нисек дауаланырға кәрәклеген сирле кеше менән бергәләп хәл иткән. Оло быуын вәкилдәре, нисек кенә тәжрибәле булмаһын, ниҙелер мотлаҡ шул рәүешле генә эшләп була, тигән категорик фекерләү ҡалыбынан тайпыла алһын ине. Ниндәй генә мәсьәлә булмаһын, уны хәл итеүҙең төрлө һәм бик уңышлы юлдарын табып була. Уҡытыусы эшмәкәрлегендә лә бер нисә варианттан һайлап алыу мөмкинлеге булыуын педагогик принцип кимәленә күтәреү фарыҙ.***

## Уҡытыусы - иң оҫта дәүләт идеологы

Туранан-тура дәүләт эшен башҡармаған хәлдә лә, дәүләт эшмәкәре кеүек фекер йөрөтөүсе, дөйөм мәнфәғәттәргә ярашлы ғәмәлдәр ҡылыусы ватандаштарыбыҙ бар. Миңә бер нисә йыл элгерәк Иглин районында уҡытыусыларҙың август кәңәшмәһе барышында урындағы эшҡыуар менән танышырға тура килде. Бизнесы әллә ни артыҡ килемле булмаһа ла, ул үҙ аҡсаһына спорт залы төҙөткән, ат спорты менән шөғөлләнеүселәр өсөн аттар һатып алған, үҫмерҙәр өсөн спорт секцияһы асҡан. Мин унан: "Ни өсөн аҡсағыҙҙы спортҡа һалаһығыҙ, был иҡтисади яҡтан һеҙгә файҙа килтермәй бит?" - тип һорайым. Ә ул: "Юҡ, һеҙ дөрөҫ фекерләмәйһегеҙ. Предприятиемдың килемен бик тә файҙалы ҡулланам, тип иҫәпләйем. Берҙән, спорт менән шөғөлләнгән үҫмерҙәр миңә зыян килтермәй, уларҙың өлкән дуҫы булғас, мине хөрмәт итә. Икенсенән, уларҙың тренеры, шул уҡ мәктәптең физкультура уҡытыусыһы аша мин дә уларҙы тәрбиәләүҙә ҡатнашам. Бөгөнгө үҫмерҙәр киләсәктә миңә лә, башҡаларға ла файҙа килтерәсәген онотоорға ярамай", - тине ул. Бына ҡайҙа ул дәүләтсә фекер итеү өлгөһө!

Тирә-йүндәге кешеләрҙең һиңә һәм һинең эшеңә ышаныс һәм хөрмәт менән ҡарауының нисек файҙалы икәнлеге бер эшҡыуарлыҡ өлкәһенә генә ҡағылмай. Уҡытыусы ғүмере буйына киләсәк өсөн эшләй, һәм уның бөгөнгө абруйынан, бөгөнгө мөмкинлектәренән бөтә дәүләт кимәлендә өлгәшеләсәк уңыштар хасил буласаҡ. Ғөмүмән, йәмғиәт аңын кәүҙәләндереүсе, белдереүсе булараҡ, уҡытыусылар дәүләт һәм халыҡ араһында эш итеүсе, уларҙы туранан-тура бәйләп тороусы профессиональ ҡатлам ролен үтәй. Дәүләт уҡытыусыларға үҙ граждандарын тәрбиәләү бурысын йөкмәтә, һәм беҙ бында педагогҡа дәүләт функцияһы тапшырылыуын күрәбеҙ. Дәүләт менән кем генә идара итмәһен, идара итеүсеҙең ниндәй генә системаһы булмаһын, дәүләтселек идеяларын йәш быуындарға, тимәк, йәмғиәт аңына ла уҡытыусы индерә.

Үҙендә йәмғиәт һәм дәүләт аңына хас буған сифаттарҙы туплаған уҡытыусы башҡа иң алдынғы технологик саралар менән дә алмаштырып булмай торған ойоштороусы һәм етештереүсе көскә тиң. Шуны белә тороп та дәүләтебеҙҙә уҡытыусы эшмәкәрлеген дәүләт ҡарамағынан һәм ҡурсалауынан алып ташлап, шәхси педагогик юҫыҡҡа күсерергә теләүсе дәүләт эшмәкәрҙәре аптырата. Мәҫәлән, буласаҡ уҡытыусылар әҙерләү коммерция нигеҙендә генә башҡарыла ҡалһа, был дәүләттең үҙен ошо ил киләсәге өсөн үтә мөһим булған эштән ситләштереүгә тиң. Бөгөн Рәсәйҙең иң бай шәхси милек хужалары ла дәүләт мәнфәғәте хаҡында артыҡ ҡайғыртып бармай, көрсөк шарттарында ла аҡсаһын сит ил банкыларына күсереү яғын самалай. Олигархтарҙың дәүләтсе булырын бик оҙаҡ көтөргә тура киләсәк әле беҙгә. Шәхси педагогия вуздары етәкселәре өсөн килем алыу һәр саҡта ла беренсе планда ҡаласаҡ, һәм уларҙың дәүләт мәнфәғәтләре өсөн көйөп-янып йөрөүен күҙ алдына килтереүе ауыр. Әлбиттә, үҙ ваҡыты еткәс, мәғариф системаһында ла автоном, йәғни тулыһынса үҙ аллы уҡыу йорттары күбәйә барасаҡ. Әммә ҡайһы бер ҡыҙыу баштар иртәгәнән үк уларҙы дәүләттән айырырға әҙер. Бында ашығыслыҡ күрһәтер өсөн нигеҙ юҡ.

Педагогия вузы дәүләт уҡыу йорто булараҡ, буласаҡ уҡытыусыны иң әүәл дәүләт һәм йәмғиәт файҙаһына эшләүсе шәхес итеп әҙерләй. Асылда, уҡытыусынан да тоғрораҡ, уҡытыусынан да фиҙакәрерәк дәүләт һаҡсыһы, дәүләт хеҙмәтсеһе юҡ. Уның бар эшмәкәрлеге төрлө кимәлдәге, әммә дәүләт әһәмиәтендәге эштәрҙе башҡара алыусы граждандар тәрбиәләүгә йүнәлтелгән. Йәмәғәтсе булараҡ та дәүләт идеологияһын һәр кемгә иң әүәл уҡытыусы еткерә. Шул уҡ ваҡытта ҡайһы бер етәкселәр уҡытыусыны һайлау кампаниялары башланғас ҡына иҫенә төшөрә: һәр ғаилә менән бәйләнеш тотҡан педагогтан да оҫтараҡ башҡа агитатор табып булмаясаҡ бит!

## Олигархтарҙың да уҡытыусылары булған…

Шәхси милекселәрҙе күпләп әҙерләү өсөн әллә ниндәй ҡатмарлы механизм талап ителмәй, ә бына уларҙың аңын, йәмғиәт һәм дәүләт алдындағы шәхси яуаплылыҡ тойғоһон, башҡа социаль мөнәсәбәттәрен көйләү еңелдән булмаясаҡ. Беҙ әлегә айырым милексе, йәиһә бер корпоратив төркөм мәнфәғәттәренең башҡа айырым кешеләрҙең һәм төркөмдәрҙең мәнфәғәттәре менән киҫкен ҡаршылыҡҡа килеп, уларҙың ҡырағайҙарса хәл ителә торған осоронда йәшәйбеҙ. Тимәк, бөгөнгө йәмғиәттең һәм дәүләттең төп мәсьәләһе - милекле кешеләрҙе күбәйтеү түгел, ә уларҙың аңында мәнфәғәттәр конфликтын цивилизациялы юлдар менән хәл итеү идеяһының өҫтөнлөк алыуына өлгәшеү. Аңы һәм үҙаңы тик байығыу маҡсаты менән генә томаланған кешеләрҙән торған йәмғиәт һәм дәүләт һис бер үҙгәрешһеҙ ҡалһа, ул туҡтауһыҙ хәүеф тыуҙырған, ҡурҡыу тойғоһо өҫтөнлөк иткән социаль мөхиткә әйләнәсәк.

Бөгөн Үҙәктә нәшер ителгән киң матбуғат сараларында рәсәйлеләр араһынан сығып, олигарх кимәленә күтәрелгән кешеләрҙән үҙенә күрә заман идеалы яһап маташалар. Ә улар оҙаҡ йылдар дауамында тир түгеп, йәиһә аҡыл ҡаҙаныштарына нигеҙләнеп тупламаған бит байлыҡтарын. Көнөн-көнгә, айын-айға саҡ-саҡ ялғап йәшәүсе ватандашыбыҙ менән ниндәй яңы яхта, самолет һатып алайым, ҡайһы футбол клубына хужа булайым, тип йәшәүсе заман байҙары араһында хасил булған социаль упҡын тураһында айыҡ аҡыл менән фекер йөрөтөүселәр һирәк хәҙер. Рәсәй олигархтарының берәүһенең - Владимир Потаниндың үҙе хужа булған байлыҡтарҙы балаларына тү-

***✓ Йәмғиәтте тик матди байлыҡҡа табыныу идеологияһынан арындыра алыуға илебеҙҙең педагогик элитаһы үҙ өлөшөн мотлаҡ индерергә тейеш. Олигархтарҙың да уҡытыусылары булған һәм бар.***

# Киләсәк илсеһе, дәүләт идеяһы булыуы тураһында

гел, ә йәмғиәт файҙаһына мираҫҡа ҡалдырасағы тураһында белдереүе күптәрҙе аптыратҡандыр. Бының ысын сәбәптәрен асыҡлау ҡыйын, әммә Потаниндың ошо теләгенең йәмәғәтселек иғтибарына сығарылыуын барыбер бик урынлы һәм ваҡытлы сигнал рәүешендә ҡабул итеп була. Тимәк, хатта ҡырағай капитализм шарттарында формалашҡан иҡтисади элита вәкилдәре лә киләсәк хаҡында уйланмайынса ҡалмай. Ошо яңы шарттарҙа йәмғиәтте тик матди байлыҡҡа табыныу идеологияһынан арындыра алыуға илебеҙҙең педагогик элитаһы үҙ өлөшөн мотлаҡ индерергә тейеш. Олигархтарҙың да уҡытыусылары булған һәм бар, һәм был осраҡта ла педагогтарҙың йәмғиәттәге абруйы, уларҙың йүнәлтеүсе һүҙе ил киләсәгенә хеҙмәт итеүен онотмаҫҡа кәрәк. Уҡытыусының үҙ тормошондо башҡалар иҫәбенә, уларҙы алдау йәиһә көс ҡулланыу аша ҡороуҙың үҙең һәм йәмғиәт өсөн ни тиклем зыянлы булыуын һәр кемгә лә төшөндөрә алыуы мөһим. Ғөмүмән, белем биреү процеҫын әхлаҡи-рухи тәрбиәнән айырып ҡарап булмай, был уҡытыусы эшмәкәрлегенең төп принцибы булып ҡала.

## Мәғрифәт барыһынан да өҫтөн

Йыш ҡына йәмғиәт, дәүләт ҡоролошоноң, йә булмаһа, айырым кеше тормошоноң ниндәйҙер гармонияға өлгәшә алыу-алмауы хаҡында бәхәс-дискуссиялар булып тора. Изгелеккә, кешеләрсә яҡшы мөнәсәбәттәргә ҡоролған тормош тураһындағы хыял меңәр йылдар буйына йәшәй.

Боронғо әкиәттәрҙә лә кешелек өсөн үтә мөһим булған ошо тема сағылдырылған. Әкиәт геройҙарының тын алышын ғына түгел, изге һәм яуыз көстәр араһында мәңге туҡтамай барған көрәште күрәбеҙ бында. Ысынбарлыҡтағы кеүек үк, ҡайһы саҡта мәкерле, яман заттар өҫкә сыға, әммә изге эштәр ҙә һөҙөмтәһеҙ ҡалмай, халыҡ өсөн көрәшкән батырҙар еңеп сыға. Рәсәй кеүек икһеҙ-сикһеҙ киңлектәрҙе билгән ил яҙмышында беҙ шундай уҡ мотивтарҙы таба алабыҙ. Беҙҙең ошо оло хужалығыбыҙҙа барған яңы процестар бик тиҙ арала ғына иҫ киткес һөҙөмтәләр бирмәйәсәк. Үҙгәрештәр һәр осраҡта ла ҡаршылыҡһыҙ булмай, инерцион хәрәкәттән тиҙләнешкә күсеү өсөн дә ваҡыт һәм көс сарыф итеү талап ителә. Мәғариф үҫешендә лә шул уҡ хәл. Әйтәйек, нисәмә йылдар буйына мәғарифты үҫтереү дәүләт өсөн иң көнүҙәк мәсьәлә, тип иғлан ителеп, был өлкәлә кисектергеһеҙ сараларҙы ғәмәлгә ашырыу хаҡында һүҙ алып барылды. Әммә башлыса был өҫтөнлөк һүҙҙә генә ҡала бирҙе, сөнки дәүләт етәкселәре барыбер иҡтисад өлкәһенән башҡа нәмәне, ул нисек кенә мөһим булмаһын, алға сығара алманы. Тик һуңғы йылдарҙа ғына һынылыш булды, тип уйлайым. Мәғариф өлкәһендә өҫтөнлөклө милли проектты ғәмәлгә ашыра башлау, алдынғы уҡытыусыларға дәүләт гранттарын тапшырыу, ниһайәт, 2010 йылды Уҡытыусы йылы тип иғлан итеү ошо хаҡта һөйләй. Ошо исемле йылды асыуға арналған телмәрендә Президент Дмитрий Медведев бөтә ил буйынса уҙғарыласаҡ сараларҙы уҡытыусы тураһында дәүләт хәстәренең башланғысы ғына булып, артабан ошо юҫыҡта күп нәмәләр эшләнергә тейешлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды. Дәүләттең мәғариф өлкәһендә элегерәк интуитив һәм күп осраҡта декларатив рәүештә генә алып барылған сәйәсәте бөгөн мотлаҡ үтәлергә тейешле ғәмәлдәргә йүнәлтелде. Был бик ҡыуанышлы күренеш: прогрессив йүнәлеш алған заман мәғарифы аң һәм әхлаҡ даирәһе ныҡ үҫешкән шәхестәрҙе ни тиклем күберәк әҙерләһә, киләсәктә ил иҡтисадын аңлы рәүештә алға әйҙәүселәр ҙә шул тиклем арта барасаҡ. Тап шуның өсөн дәүләт үҙенең киләсәген мәғариф торошо менән бәйләй, һәм ошо өлкәләге хәл ителмәгән проблемалар барыбер дәүләт өсөн өҫтөнлөклө булып ҡаласаҡ.

## Мәктәптең урыны - ҡояшлы мөхиттә

Бөгөнгө мәктәпкә һәм уҡытыусыға ҡарата йәмғиәттә тик ыңғай ҡараштар йәшәй, тип әйтеп булмай. Йәш режиссер Валерия Гай Германиканың Үҙәк телевидениенан күрһәтелгән "Мәктәп" исемле сериалы һәр төрлө бәхәстәр һәм шау-шыу тыуҙырҙы. Был фильмды ҡарағас, бөйөк Толстойҙың бер фәлсәфәүи фекере иҫкә төшә: "Кемдер күләүектә бары бысраҡ һыуҙы ғына күрһә, кемдер унда йондоҙҙар сағылышын күрә". Күрәһең, Гай Германиканың мәктәпте демонлаштырыуында уның үҙенең етлекмәгәнлек комплексы сағылалыр, һәм ул үҙен түгел, башҡаларҙы гонаһ эйәһенә әйләндерә. Режиссерҙың мәктәп мөхитенән бары тик бысраҡ эҙләүе, мәғариф



күгендәге йондоҙҙарҙы, айҙы һәм ҡояшты күрмәүенең билдәле сәбәптәре бар. Элегерәк шундайыраҡ бер фильм төшөргән Валерия башҡаса был темаға тотонмаҫҡа вәғәҙә биргәйне, әммә һүҙендә торманы. Был осраҡта, психоаналитиктарса фекер йөрөткәндә, уның күңелен үҙ ғаиләһенә һәм үҙ мәктәбенә ҡарата тоҡанған кире тойғолары бимазалап тороп, хәҙерге мәктәпте бысраҡлыҡ ояһы итеп күрһәтергә ынтылыш бирәлер, моғайын. Эйе, ысынбарлыҡта ла шулай бит: кемдер донъяны изге һәм сауаплы эштәр менән үҙгәртергә тырышһа, бәғзе берәүҙәр ҡара көстәр, демондар тураһында һөйләп, кеше күңеленә шикшөбһә һәм ҡурҡыу һалыуҙан уҙа алмай. Кинәйәләп әйткәндә, оптимист режиссер Дмитрий Астраханға Валерияны "ҡайтанан тәрбиәләү" өсөн шефлыҡҡа алыу бик тә урынлы булыр ине.

Заманыбыҙҙың күренекле философы Хайдеггерҙың кеше ҡылған ғәмәлдәрҙең тәү өлгөләренең мәҙәниәт аша биреләүе хаҡындағы фекере журналистар, сәнғәт һәм мәҙәниәт өлкәһенең башҡа хеҙмәткәрҙәре өсөн бик фәһемле. Киң мәғлүмәт сараларында мәктәпте яманлыҡ һәм яуызлыҡ сығанағы итеп күрһәтеүҙе шул уҡ үҫмерҙәргә иҫ киткес кире йоғонто яһаусы фактор итеп ҡарап була бит. Беҙ был осраҡта кино мәҙәниәтенең үҫешеп, нығынып етмәгән үҫмерҙәр аңына изгелек урынына яуызлыҡ орлоҡтарын сәсеүен күрәбеҙ. Мәктәпте демонлаштырыу уның мәҙәниәт усағы рәүешендәге образын юҡҡа сығара, ә был үҙе бик хәүефле күренеш. Бында Мостай Кәримдең тормошобоҙҙоң яҡты, ҡояшлы яғы менән бер рәттән, ҡараңғыраҡ, күләгәле тарафтары булыуы хаҡындағы фекерен иҫкә алыу урынлы булыр. Нисек кенә булмаһын, мәктәптең йәмғиәтебеҙҙәге урыны йәшәйешебеҙҙең яҡтылыҡ нурҙарына ҡойонған тарафында ҡалыуы тураһында ҡайғыртырға кәрәк беҙгә.

***Бөгөнгө мәктәпкә һәм уҡытыусыға ҡарата йәмғиәттә тик ыңғай ҡараштар йәшәй, тип әйтеп булмай. Йәш режиссер Валерия Гай Германиканың Үҙәк телевидениенан күрһәтелгән "Мәктәп" исемле сериалы һәр төрлө бәхәстәр һәм шау-шыу тыуҙырҙы. Был фильмды ҡарағас, бөйөк Толстойҙың бер фәлсәфәүи фекере иҫкә төшә: "Кемдер күләүектә бары бысраҡ һыуҙы ғына күрһә, кемдер унда йондоҙҙар сағылышын күрә". Күрәһең, Гай Германиканың мәктәпте демонлаштырыуында уның үҙенең етлекмәгәнлек комплексы сағылалыр, һәм ул үҙен түгел, башҡаларҙы гонаһ эйәһенә әйләндерә. Режиссерҙың мәктәп мөхитенән бары тик бысраҡ эҙләүе, мәғариф күгендәге йондоҙҙарҙы, айҙы һәм ҡояшты күрмәүенең билдәле сәбәптәре бар. Элегерәк шундайыраҡ бер фильм төшөргән Валерия башҡаса был темаға тотонмаҫҡа вәғәҙә биргәйне, әммә һүҙендә торманы. Был осраҡта, психоаналитиктарса фекер йөрөткәндә, уның күңелен үҙ ғаиләһенә һәм үҙ мәктәбенә ҡарата тоҡанған кире тойғолары бимазалап тороп, хәҙерге мәктәпте бысраҡлыҡ ояһы итеп күрһәтергә ынтылыш бирәлер, моғайын.***

## Башҡортостанда Уҡытыусы йылы күптән башланды

2010 йыл Рәсәй һәм республикабыҙ кимәлендә ижтимағи-сәйәси һәм мәҙәни ваҡиғаларға бай буласаҡ. Миңә ошо йәһәттән Рәсәйҙә иғлан ителгән Уҡытыусы йылының Башҡортостандағы Республика йылы менән тап килеүе бик фәһемле булып тойола. Ҡасандыр Рәсәй Президенты Борис Ельцин үҙенең тәүге Указы менән уҡытыусының дәүләттәге урынын һәм баһаһын күтәрергә теләһә лә, тиҫтә йылдар дауамында мәктәп һәм педагог проблемалары һүҙҙә генә ҡала бирҙе. Хәлдәр шул тиклем мөшкөлләнде, хатта ҡайһы бер төбәктрҙә иҫкереү-туҙыу сигенә еткән мәктәптәр емерелә башланы. Әйткәнебеҙсә, был өлкәлә Рәсәйҙә боҙ яңыраҡ ҡына ҡуҙғалды.

Башҡортостанда хәл бөтөнләйгә башҡаса тора. Бөгөн республикабыҙҙа рухиәт һәм мәғрифәткә ҡараштың нисек булыуын ауылдарыбыҙҙа күркәм һәм заманса һалынған биналарҙың бер-бер артлы ҡалҡып сығыуынан күреп була: дин йорттары - мәсет һәм сиркәүҙәр, мәҙәниәт һарайҙары һәм, әлбиттә, өр-яңы мәктәптәр менән хаҡлы рәүештә ғорурлана алабыҙ. Ғөмүмән, республикабыҙҙың һуңғы 20 йыллыҡ тарихында мәктәп һәм уҡытыусы проблемалары йылдан йыл көнүҙәк булып, власть органдары иғтибарынан һис ситтә ҡалманы.

Дөрөҫөн әйткәндә, Башҡортостанда Уҡытыусы йылы әллә ҡасандан бирле бара, тиһәк тә һис яңылышмабыҙ. Мәктәп - кешеләр йәшәгән һәр айырым бәләкәй төбәктең үҙәге, ул ата-әсәләр, йәштәр, һәр ғаилә менән тығыҙ бәйләнештә йәшәй. Әгәр республика етәкселеге бер-бер артлы Әсә, Ғаилә, Сәләмәт йәшәү, Йәштәр башланғыстарын яҡлау һәм башҡа шундай ҙур социаль маҡсаттарға йүнәлтелгән исемле йылдар уҙғара икән, был беҙ йәшәгән мөхиттә яңы ынтылыштар тыуҙырып, мәҙәни һәм рухи халәтебеҙҙе камиллаштырыуға хеҙмәт итәсәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Республикабыҙ ҡаҙаныштары тураһында һөйләгәндә беҙ иң әүәл ватандаштарыбыҙ өлгәшкән уңыштарҙы, һаулыҡ һаҡлауҙа, мәғарифта, социаль өлкәләге үҫешебеҙҙе күҙ аллайбыҙ. Быуаттар киҫешкән тарихи мәлдә Башҡортостан мәғарифы алдында беҙҙең йәш граждандарыбыҙҙы заманса тәрбиәләү бурысы ҡуйылғайны. Һәм бөгөн беҙ Башҡортостан йәштәренең аңбелемгә, һөҙөмтәле хеҙмәткә, ижади үҙбилдәләнешкә, рухи тормошҡа ынтылып йәшәүен иң мөһим ҡаҙанышыбыҙ, тип әйтә алабыҙ. Тап шуның өсөн республикабыҙҙың меңәрләгән уҡытыусылары дәүләт иғтибарына, йәмғиәт ихтирамына һәм үҙ уҡыусыларының кеселекле һәм йылы ҡарашына лайыҡ, тип раҫлайбыҙ.**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ яҙып алды.**

# КЕМ ҠУРСАЛАР ДОНЪЯБЫҘҘЫ?

## Бөгөн ул - сабый хәлендә

**Зәйнәб Бейешева исемендәге Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһының башҡорт филологияһы факультеты студенттары менән осраштыҡ. Шуныһы һөйөнөслө: стәрлетамаҡтар хәҙерге ваҡытта көндән-көн кеше күңелендә ҡытлыҡҡа әйләнә барған ғәм, фиҙаҡәрлек төшөнсәһен һаҡлап ҡына ҡалмаған, был йүнәлештә үҙ эшмәкәрлегенә байтаҡ ҡына яңылыҡтар ҙа индергән. Академияның ғилми-методик советында ҡабул ителгән уҡыу йортоноң "Этик кодексы" бының сағыу бер миҫалы. Унда студенттарҙың, уҡытыусыларҙың үҙҙәрен академияла нисек тоторға тейешлектәре, тәртиптәренең этик нормалары яҙылған. Академияға башҡорт халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Бейешеваның исеме бирелеү ҙә эҙһеҙ үтмәгәндер, ижади-ихлас аралашыуҙар йөҙөндә халыҡ яҙыусыһының тынғыһыҙ асылы балҡып киткәндәй булды. Студенттарҙың беҙгә биргән һорауҙарында милләтебеҙ, республикабыҙ яҙмышы өсөн хәстәрлекле борсолоу ята.**

**Академияла Зәйнәб Бейешеваның тормош һәм ижад юлын сағылдырған музейҙың асылыуы ҡала өсөн генә түгел, республикабыҙ, башҡорт әҙәбиәте өсөн дә оло ваҡиғаға торошло. Музей һәр йәһәттән үҙенең эстетик йөҙөн барлыҡҡа килтергән, унда халыҡ яҙыусыһының тормош һәм ижад юлы киң сағылыш тапҡан, әле инде был йәнле мөйөштөң эшен интеллектуаль яҡтан тәрәнәйтеү өҫтөндә эш бара.**

**Был уҡыу йорто элек-электән "Ашҡаҙар" әҙәби-ижад түңәрәге менән дан тота. Унда башҡорт әҙәбиәтенең бик күп танылған әҙиптәре шөғөлләнгән. Түңәрәк эше менән шағирә, филология фәндәре кандидаты Рита Фәтҡуллина етәкселек итә. Әйтергә кәрәк, түңәрәк хәҙерге әҙәби-ижад даирәһендә янып йәшәгән ойошмаларҙың береһе. Унда шөғөлләнгән ижадсыларҙың әҙәби әҫәрҙәренең кимәле шул хаҡта һөйләй. Әле ҡыҙҙарҙың уҡыусы иғтибарына тәҡдим ителгән шиғырҙарына тәрән уйланыу, камиллыҡҡа ынтылыу хас. Ҡайһы бер авторҙар тәүге йыйынтыҡтарын да әҙерләгән икән. Мине, мәҫәлән, Зөлфиә Сәлихованың "Аҡҡош бейеүе" тигән хикәйәһе хайран итте. Мин был әҫәрҙе прозала форма йәһәтенән яңылыҡҡа ынтылыу тип тә атар инем. Зөлфиә бик үҙенсәлекле диалог формалары ҡороп, тотош повесҡа, романға һыйырлыҡ тормош материалын һәм геройҙарҙың кисерешен ошо ҡыҫҡа ғына хикәйәгә һыйҙыра алған. Әҫәрҙең жанрын шартлы рәүештә "Повесҡа хикәйә" йә "Романға хикәйә" тип тә атарға булыр ине.**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

### Готика

Манарала бейей аҡ фәрештә:
Йыйылғандар никах туйына.
Намаҙлыҡҡа баҫҡан һылыуҡайҙың
Иңбашына килеп һыйына.

Манарала бейей аҡ фәрештә:
Изге йәндәр ерҙә һүҙ ала -
Мәғриб менән мәшриб осрашҡанда
Яңы ғүмер - бала ярала.

Манарала бейей....

Сеү! Уяндым! Йәнә өшөп төнөн.
Ҡояшҡайым айҙы һағына.
Фәрештәһеҙ булғас, ҡара ҡайғы
Емтек эҙләп күктә ҡағына.

Юҡҡа сыҡҡан хатта Ғаләм айы:
Ен-пәрейҙәр өҫтә болара.
Әхләк киткән ерҙә ни фәрештә?
Ғәрлегенән һынған манара.

Түңкәрелгән ерҙең аҫты өҫкә...

Өнмө? Төшмө? Ҡасан уянам?
Һаташыуым бөгөн ысынбарлыҡ.
Ҡараңғылыҡ. Ҡасан уянам?

Ҡайҙа бейей хәҙер фәрештәләр?
Ҡайҙа тора ғорур манара?
Йәнә һыуыҡ, йәнә тәнем ҡата...
Ҡотҡарығыҙ! Донъям болара!

Ҡотҡарығыҙ! Күктә емтек эҙләп,
Ҡара көстәр ҡанат ҡағына.
Кешекәйҙәр, үҙ йәндәрен аяп,
Йүгерәләр ҡибла яғына!..

... Өнмө? Төшмө?
Ҡасан уянам?
Аҡылдан яҙам?
...Сеү!..
Аҙан! Аҙан!

### Аксиома

Дуҫтар тигән бик ҙур байлыҡҡа
Насип итһә әйә булырға,
Үҙенә тиң дошман табыуҙы
Тигеҙлә һин бүләк алыуға.

### "Дуҫтар"

Ике ҡарға ултыра
Йылға буйы ташында,
Ләғнәт уҡып бөркөткә:
Ояһы тау башында.

* * *

Тәҙ(е)рәһеҙ балкон. Кер елтәре.
Ялан аяҡ ҡышын сығамын.
Ҡанһыраған ярһыу йөрәгемдең
Һуңғы тамсыларын һығамын.

Биткә һыуыҡ бәрә. Ебәк күлдәк
Тартҡылаша хәлһеҙ тәнемдә.
Ҡеүәтенән яҙған йөрәккәйем,
Ике тамсы ҡалған йәнем дә.

Аҫта йырлап бара иҫерек бәндә,
Ҡолағымда - етем илауы.
Әсе һүҙҙәр ташлап сабып үтте
Һыра эскән һарыҡ ылауы.

Тәҙ(е)рәһеҙ балкон саңды һура.
Бысыраны инде керем дә.
Ә илемдең сиген кемдәр ватҡан:
Беҙ аунайбыҙ зина керендә.

Тәҙерәһеҙ балкон артта ҡалды!
Ебәк күлдәк ҡосто асфальтты...
...Батыршалар ҡанын түккән ергә
Йөрәгемдән тамсы ҡан тамды...

**Динә НИҒМӘТУЛЛИНА.**

### Күңелдәге һуғыш

Әйләнде тағы бер көн уттан көлгә.
Ҡалдырҙы мине көн яуҙа, көрәштә.

Нисәнсегә был һуғышта
Аҡ флагтар күтәрҙем.
Ә һин...
Йәнәһе лә, ҡурмәнең.

Юҡ! Былай эштәр барғас,
Ҡалманы бит хәл түҙер.
Йәшерентән ҡыйыулыкты
Мин иҫбатларға әҙер.

Яландарҙа ятып ҡалдың,
Аңламай ни булғанын.
Күтәлмәгән батырлыктан
Килде минә еңеү, дан.

Рәхмәт һиңә, ышанманың,
Минең күңел көсөнә.
... Еңелгәндәр рәтендә
Керермен тик төшөнә.

**Гөлсәсәк ӘМИРҒӘЛИНА.**

* * *

Күңел - тынлыҡ,
Донъя - бушлыҡ.
Аҡ күлдәктә
Һинең кәләш.
Һиңә - тиндәш,
Минә - көндәш,
Таныш ҡараш,
Күҙеңдә - йәш.
Күңелдәрҙә -
Һүҙһеҙ көрәш.

**Гөлшат СӨЛӘЙМӘНОВА.**

* * *

Ялған еңде... Дөрөҫлөктә,
Һыуҙа йөҙгән ҡалҡыуысты,
Күрмәнеләр, белмәнеләр,
Имеш, улар йөҙмәнеләр.
Ә дөрөҫлөк батамы һуң?
Ялғаны тик ятамы һуң?
Томбойоҡтай сәскә ата,
Ҡалҡыуыс та сума - ҡалҡа.

* * *

"Уян... Ас һин күҙҙәреңде,
Ынтыл яҡтылыҡҡа - тәҙрәгә,
Куҡҡа ҡара, һоноп ҡулдарыңды,
Еңеллекте тойор кәүҙәң дә."

Онотолам, төн төҫтәрен алып,
Йылылығын тойоп кемдендер,
Үҙ ҡиблаһын эҙләп, түҙә алмай
Өҙгөләнгән ... меҫкен күңелдер.
Минә генә ҡыйын түгелдер.

**Әминә АЗАМАТОВА.**

### Кем ҡурсалар?

Берләм юлдан сабый килә,
Күҙен ҡыҫып ҡояш көлә.
Ем-ем итеп ҡар бөртөгө
Йылмая хәйләкәр генә.
Сабый килә тып-тып баҫып,
Заман еле ҡаршы иҫте...
Сөрсөләп ул ҡаты ҡарға,
Тас салҡатан барып төштө.
Тәүге аҙым, тәүге һынау...
Әрнеп-әрнеп сабый илай.
Әсәнең йылы ҡосағы,
Татлы һүҙе уны арбай.
Йоҡлап китте ҡосағында,
Ҡурсалаусы эргәһендә...
Кем ҡурсалар донъябыҙҙы?
Бөгөн ул - сабый хәлендә.

**Гүзәл ҒӨБӘЙҘУЛЛИНА.**



*✓ Хат яҙып, уны әхирәте Мәрйәм аша Надирға тапшырҙы. Аңлашырбыҙ. Һөйгәнем килер, тип өмөтләнде. Әлбиттә, хаттың сүп һауытында аҙашыуы ла, әхирәтенең һөйгәненә кейәүгә сығасағы ла уға билдәһеҙ ине.*



# Аҡҡош бейеүе

**(Хикәйә)**

Ҡала үҙенә хас булған шомло ағымда урғыла. Ишетмәй, аңламай. Кемдер кемделер көтә, кемгәләр кемдер ашыға. Тик ниңәлер береһе лә янындағы кешеләрҙе күрмәй. Үҙ-үҙенә бикләнгән күнел өсөн яңылыш әйтелгән һүҙ яҙаларҙың иң ҡатыһына, ғәфү ителмәгән үпкә яраларҙың иң ауырына әйләнә. Кеше ғүмере - аҫыл ҡая түгел, ә упҡын өҫтөндәге күпер. Һаҡһыҙ аҙым, уҡтай атылып сыҡҡан һүҙ ошо упҡынға осорорлоҡ.

Фәнзил йүгерә-атлай ашыға. Нисек өтәләнһә лә, һәр аҙымы уны артҡа һөйрәгәндәй. Ошоно аңлаған һайын, йәне атылып сығырҙай. Әгәр өлгөрмәһә? Күрмәһә? Уйлауы ла ҡурҡыныс. Тәнде лә, йәнде лә ут солғап алған. Башына ла кеймәгән, түштәрен ысҡындырған егет ҡышҡы һалҡын елгә ҡаршы атлай. Битараф ҡаланың ғына унда эше юҡ.

Бер мәлгә генә туҡтап, тирә-йүнгә күҙ һалсы, кеше. Ҡала бөгөн шундай матур. Тылсымлы көскә эйә йомшаҡ ҡар бөртөктәре елдә бәүелә-бәүелә ергә төшә. Әйтерһең, меңәрләгән күбәләктәр машиналарға, ағастар өҫтөнә, кешеләргә ҡуна. Ә Фәнзил ҡар бөртөктәре хәрәкәтендә үҙенең Зәлиәһен генә күрә. Бына ул ап-аҡ күлдәктә елпенеп-елпенеп бейей. Уның матурлығы, гүзәллеге егеттең һушын ала.

Шул саҡ кеҫәлә телефон шылтыраны.

* * *

- Мәрйәм апай, аңлағыҙ, Зәлиәлә талант. Уның урыны - сәхнәлә. Ул бейегәндә...

- Фаягөл, мин һине үҙ ҡыҙымдай яҡын күрәм. Ләкин белмәгән эшкә ҡыҫылма. Зәлиәгә уҡырға кәрәк. Бейеү һөнәрме ни ул?

- Мәрйәм апай!

- Юҡ, ҡыҙҙар, башымды ҡатырмағыҙ!

- Әсәй!

- Эй, ҡыҙым, мин һин уҡыһын, тип, ике эштә эшләнем, бар теләгеңде үтәнем. Ә һин? - Был һүҙҙәрен әйтеп бөтмәй, Мәрйәм апай икенсе бүлмәгә инеп китте.

Зәлиә ни эшләргә белмәй, хәле бөтөп, диванға ултырҙы.

- Ни эшләп шым тораһың? Һүҙ һинең турала бара бит, Зәлиә, - тине Фаягөл йәне әсеп.

- Ни эшләргә һуң миңә? Урталайға ярылырғамы ни? Әсәйем мине бер үҙе аяҡҡа баҫтырҙы. Икенсе яҡтан - хыялым. Төшөмдә лә, өнөмдә лә сәхнә тип кенә янам. Тик мин үҙем тураһында ғына уйлай аламмы?!

- Беләһеңме, әхирәт, һин үҙең теләмәйһең! Теләгең булһа, һин күптән минең менән Өфөлә булыр инең.

Фаягөл ишекте шапылдатып ябып сығып китте.

Ә атаһы уны аңлар ине... Ул, бәләкәй генә сабыйын алдына ултыртып, сәхнәлә аҡҡош булып талпынған ҡыҙ тураһында һөйләргә ятты. Кескәй генә, теремек бала булғаны өсөн атаһы уны турғай тип йөрөттө. Әгәр ул иҫән булһа, моғайын, ҡыҙының сәхнәгә ынтылыуын хуплар ине.

* * *

- Һөйөклөм, бәлки, шулай яҡшыраҡтыр. Әсәй кеше насар кәңәш бирмәҫ. Минең менән медуниверситетҡа керерһең.

- Фәнзил! Исмаһам, һин йәнгә теймә. Былай ҙа шуның өсөн әсәй менән дә, Фаягөл менән дә боҙолоштоҡ.

- Тураһын әйткәндә, миңә лә ул бейеүҙәрең оҡшамай. Егеттәр менән ҡосаҡлашып, сәхнә тапау эшме ни ул? Һиңә шул бейеү нимә бирә? Әйт әле?

* * *

- Зәлиә, сәләм!

- Артур? Сәләм, хәлдәр нисек?

- Ниңә кисә килмәнең? Беҙ яңы бейеү өйрәнәбеҙ.

- Ысынмы?

- Иртәгә яңы никах һарайы асыуға бағышланған концертта бейейбеҙ. Бөгөн сәғәт өстә репетицияға кил, йәме.

- Иртәгә? Мин бит өлгөрмәйем.

- Зәлиә, һин бит бик оҫтаһың. Сәхнәлә сәскә өҫтөндәге күбәләк кеүек талпынып ҡына йөрөйһөң.

- Мин һеҙгә ҡамасауланым, ахры, - бейеүселәр Фәнзилде абайламай ҙа ҡалған.

- Сәләм, - Зәлиә егетенә ихлас йылмайҙы. Ләкин Фәнзил ҡыҙға иғтибар ҙа итмәй, Артурҙы күҙәтә.

- Фәнзил, мин Артур булам, - тип танышырға ҡулын һуҙҙы егет. - Зәлиәнең һинең хаҡта һөйләгәне бар.

Фәнзилдең асыуы нығыраҡ ҡабарҙы:

- Нимә һөйләне инде? Һөйләшегеҙ-һөйләш, мин бит һеҙгә ҡамасауланым.

- Фәнзил!

- Мин бөтәһен дә аңланым.

Артур көтөлмәгән хәлгә уңайһыҙланып китте:

- Зәлиә, ғәфү ит, ниндәйҙер аңлашылмаусанлыҡ сыҡты. Мин ашығам. Онотма, иртәгә сәғәт өстә.

- Ярай, һау бул, - тип кенә әйтә алды Зәлиә. Дуҫтары алдында Фәнзилдең үҙен шулай тотоуы оҡшамай ине уға. Әлбиттә, егете электән тупаҫыраҡ булды. Фәнзил тәбиғәте менән Зәлиәнең атаһына тартҡан - моғайын, шуға ла ул ҡыҙға ҡәҙерлеләр.

Һәр бер нәмәнең үҙ самаһы була. Һуңғы арала Фәнзил үтә ныҡ ҡыҙғана башланы. Бына әле лә:

- Иртәгә ҡайҙа саҡыра ул һине? - тип һораны.

- Уф, репетицияға, ре-пе-ти-ци-я!

- Һуңланың - репетиция, килмәнең - репетиция. Нимә булһа ла, шуға һылтанаһың. Артур менән биш минут ҡосаҡлашып бейеү өсөн ашҡынаһың бит!

- Нимә?

- Зәлиә, һин мине яратаһыңмы? Яратһаң, репетицияларың башҡа булмай. Һөйләштекме?

- Фәнзил!

- Йә - эйе, йә - юҡ.

Ҡыҙҙың күҙҙәренән нур ҡасты. Тыуғандан алып кеше һайлау алдында тора. Һәр ҡарар еңел бирелмәй.

- Ҡорбан?! Ә ни өсөн? Һин кем миңә ул тиклем? Мин ирекле, ишеттеңме? Нимәләр оҡшамай икән - юлымдан кит.

- Аңлашылды. Һау бул.

Егет менән ҡыҙҙың юлдары айырылды. Аяныс. Дөрөҫмө был, түгелме? Ваҡыт ҡына күрһәтер. Уның хөкөмө ҡаты. "Иң мөһиме - үҙ-үҙеңде алдамау", - тип тынысланды Зәлиә.

* * *

Күңел дауаһы уны өйҙә көткән. Ҡайтып инһә, әсәһе өләсәһе менән сәй эсеп ултыра.

- Ҡәрсәй, - тип шундуҡ әбейҙе ҡосаҡлап алды Зәлиә.

Фәниә инәйҙең оҙаҡ ҡына килгәне юҡ ине. Дөрөҫөн әйткәндә, бейем менән килендең мөнәсәбәттәре электән ҡатмарлы булды.

- Йә, ҡыҙым, хәлең нисек? Уҡыуыңды тик "биш"кә тамамлағанһың икән, ҡотлайым, афарин!

- Рәхмәт.

- Ә ниңә улай моңһоуһың?

- Әллә ниңә күңелем төштө. Мин бөгөн әхирәтемде лә, дуҫымды ла юғалттым, ахры. Фаягөл менән уҡыуҙы бергә дауам итербеҙ, тигәйнек тә, - Зәлиә туҡтап ҡалды ла әсәһенә ҡарап алды.

- Эй, бейем, тағы шул бейеүҙәре менән баш ҡатыра инде. Исмаһам, һин аңлатып ҡара әле, бейеү һөнәрме ни ул?

- Килен, балаға ирек бир. Уның бит үҙ маҡсаттары булырға тейеш. Бейергә теләйһең икән - ынтыл, ҡыҙым.

- Ә әсәй?

Мәрйәм апай ҡыҙына етди ҡараны ла:

- Ярай, барып ҡара, кире әйләнеп ҡайтһаң, һүҙ бир, бейеүеңде ташлайһың.

- Ярай.

Әсәй нимәгәләр асыуланып сығып китте.

- Ҡыҙым, - тине ҡартәсәһе, - бына атайыңдың көндәлеге. Тик һин уның тураһында әсәйеңә өндәшмә, йәме. Был беҙҙең сер булһын.

* * *

- Ҡыҙҙар, һеҙҙең үтенесте үтәнем.

Фаягөл шатлығынан бәләкәй генә матур апайҙы ҡосаҡлап алды.

- Зәлиә, ошо адрес буйынса барырһың. Ул апайҙа гелән шулай студенттар йәшәп китә. Һиңә лә мөйөш табылыр. Ярай, мин китәйем, эштәрем күп әле...

Ҡыҙҙарҙың шатлығының сиге юҡ. Фаягөл тағы ла әхирәтен ҡосаҡлап алды:

- Зәлиә, Зәлиә, хәҙер беҙ бергә уҡыясаҡбыҙ!

* * *

- Ә-ә, балам, һинең исемең Зәлиәләр, - фатир хужабикәһе ҡыҙҙы йылы ҡаршыланы. - Әйҙә, үт. Кейемдәреңде һал. Ә мин ашһыуҙы ҡарай торайым.

Ҡатындың хәрәкәттәре аҡҡош йөҙөүен хәтерләтә. Әйтерһең, бейей-бейей йөрөй. Ҡыҙ таныш түгел апайға һоҡланып ҡараны. Итәғәтле булыуы, матур тауышы, осҡон кеүек нурлы, шул уҡ ваҡытта моңһоу күҙҙәре, ҡыйғас ҡаштары - барыһы ла уның артист булыуына ишаралай кеүек.

Сәй эскәндә таныштылар. Суфыя апай, ысынлап та, бик ихлас кеше булып сыҡты. Тора-бара Зәлиә лә Өфөгә өйрәнде. Һағындырған саҡтарҙа ҡулына атаһының көндәлеген алыр булды. Яҙмалары аша Зәлиәгә бөтөнләй икенсе, әле уға таныш булмаған атай асылды. Шуныһы ғәжәп: көндәлектә атаһы тасуирлаған ҡыҙҙы Зәлиә ҡайҙалыр күргәне бар һымаҡ. Ҡыҙыҡ. Әммә ул әсәһе түгел, быны Зәлиә яҡшы аңлай.

* * *

- Кит әле, тағы ла шул тупаҫың өсөн ҡайғыраһыңмы? Баш ҡалала, сәхнәләһең. Йәнең теләгәнен эләктер.

- Фаягөл, мин бит уны яратам, - күңеле тулған Зәлиә илап ебәрҙе.

Шул ваҡыт күрше бүлмәнән килеп сыҡҡан Суфыя апай, ҡыҙҙың йәшле күҙҙәрен күреп, борсоуға төштө. Зәлиәгә күңелен өйкәгән нәмәләрҙе һөйләп биреүҙән башҡа сара ҡалманы.

- Көнләшеү, тимәк, - тине уфтанып апай. - Беләһегеҙме, мин сәхнәне ни өсөн ташланым?..

* * *

Көҙгө ямғыр яуа. Бар тәбиғәт моңһоуланып ҡалғандай. Әйтерһең, яҙ ҙа, йәй ҙә бөтөнләй булмаған. Ә шулай ҙа был һағышлы миҙгелдең үҙ матурлығы бар. Ана, тротуарҙа көҙгө кеүек йымылдап бәләкәй-бәләкәй утрауҙар - күләүектәр ята. Ҡулсатыр аҫтына ҡара толомдарын йәшергән ҡыҙ ошо утрауҙарҙы ҡоралайҙай һикереп үтә. Тек-тек килгән итектәр тауышы сихри моң тыуҙыра. Ошо моң уны тағы ла ашыҡтыра, ашҡындыра кеүек.

Бына ул бүлмәгә атылып килеп инә.

- Суфыя, ҡайҙа йөрөйһөң һин? - тип ҡаршы ала уны талапсан да, асыулы ла тауыш.

- Мин репетицияла инем. Надир, ниңә миңә улай ябырылаһың?

- Мин һуңлауҙарыңдан арыным. Етмәһә, төрлө ғәйбәттәр йәнде үртәй.

- Тыңлама.

- Суфыя, минең өсөн тәүҙә партия, комсомол эше, ҡалғаны - икенсе планда. Һинең бейеүең дә. Мин буласаҡ ҡатынымдың абруйымды төшөрөүен теләмәҫ инем.

Суфыя, бер ни аңламайынса, Надирҙы моңһоу ҡараштары менән оҙатып ҡалды.

* * *

Был тормошта һәр кешегә һынау бирелә. Уны еңә алыуың-алмауың киләсәгеңде билдәләй ҙә инде. Суфыя ике ут араһында ҡалды. Бизмәндең бер яғында - мөхәббәте, икенсе яғында - баласаҡ хыялы сәнғәт. Суфыя оҙаҡ ваҡыт өҙгөләнде. Һуңғы һөйләшеү уларҙың мөнәсәбәттәренә нөктә ҡуйҙы.

- Таптың һөнәр? Һин бит Ғаяз менән сәхнәлә уралыу өсөн бейеүгә ашҡынаһың!?

- Һөйөклөм, нимә һөйләйһең һин? Беҙ бит хеҙмәттәштәр. Ни өсөн һин мине бөтөнләй аңламайһың? Бейеү - минең хыялым. Бейеү - минең яҙмышым.

- Ул яҙмыш һиңә һәм һинең Ғаязыңа кәрәк!

- Улайһа, Надир, һәр кемдең үҙ юлы.

- Ярай. Минең түҙемлектең дә самаһы бар бит. Тик һин мине башҡа бер ҡасан да күрмәйәсәкһең.

Суфыя китте. Надир күпме үкенмәһен, ҡыҙҙы ҡайтарырға нисек тырышмаһын, барыһы ла файҙаһыҙ ине. Тормош ожмахы тамуҡҡа, ғазапҡа әйләнде. Саф мөхәббәтте ҡаралау тиҙ шул. Көнләшеү, ҡыҙғаныу, ғорурлыҡ, минминлек хөкөмө ҡаты.

* * *

Суфыя бар ваҡытын бейеүгә бағышланы. Таланты менән сәхнәне, тамашасылар күңелен яуланы. Һәр бейеүендә онотолорға, дөрөҫөрәге, Надирҙы онотоорға теләне. Ә егет бейеүсенең һәр хәрәкәтен тамаша залынан күҙәтте. Хатта арауыҡ аша ҡараштар осрашты кеүек. Тик ғорурлығы Надирҙы Суфыя эргәһенә ебәрмәне.

Ә ҡыҙ, ысынлап та, йөҙәрләгән тамашасыһы араһында һөйгәненең ҡараштарын таныны. Аҡҡош осошо кеүек хәрәкәттәрендә тик уға ғына ынтылды кеүек. Ә бит мөхәббәтте һаҡлау өсөн ул тәүге аҙымды яһағайны. Хат яҙып, уны әхирәте Мәрйәм аша Надирға тапшырҙы. Аңлашырбыҙ. Һөйгәнем килер, тип өмөтләнде. Әлбиттә, хаттың сүп һауытында аҙашыуы ла, әхирәтенең һөйгәненә кейәүгә сығасағы ла уға билдәһеҙ ине. Надирҙың килеүен көтөп өҙөлгән өмөт... Әсәлек хаҡына Ғаязға тормошҡа сығыу... Балаһыҙлыҡ арҡаһында тарҡалған ғаилә... Яңғыҙлығы өсөн ғәйепле тип иҫәпләнгән сәхнәнән баш тартҡан ҡатын... Яҙмыштың уға яҙған хөкөмө...

* * *

Суфыя апай хәтирәләре өҙөлдө. Зәлиәнең күҙҙәре тулы йәш. Эйе, ул атаһы көндәлегендә тасуирланған аҡҡошто таныны. Йәнләнгән образға ҡарата ҡыҙ күңелендә сәйер тойғо уянды: бер яҡтан, нәфрәт. Суфыя апай әсәһенең ғүмерлек көндәше булған, икенсе яҡтан - ихтирам, сөнки ҡыҙға атаһын, уның хистәрен аңлау килде. "Эй, ғүмер, яҙмыш, уңыш. Ниңә һеҙ мине улай ыҙалайһығыҙ? Мәрйәм - тормош юлымдағы фәрештәм. Һәр саҡ ҡурсалап, ярҙам итергә әҙер торҙо. Ә мөхәббәтем? Был өҙгөләнеүҙәрем булмаһа, йәшәүе, бәлки, ҡыҙыҡ та булмаҫ ине. Күңелемдә һыҙланыу. Үҙемә урын таба алмайым. Их, Суфыя. Нисек көнләштем мин һине. Был гонаһтыр. Мин бит һине хатта итәгеңә ҡунған күбәләктән дә ҡыҙғана инем", - тип яҙғайны атаһы. Был ҡатмарлы хәлдә бер кешене генә ғәйепләп буламы һуң?

Суфыя күңелендә лә һаман уҙғандарҙың тауышы яңғырай:

- Мәрйәм, һин... һин бит... иң яҡын әхирәтем инең...

- Мин Надирҙы бала саҡтан яраттым, Суфыя.

- Мин дә уны бик яраттым бит.

- Һин бит уға бейеүең менән хыянат иттең. Өфө, тип ашҡындың. Хистәрең ысын булһа, һеҙҙең мөхәббәт улай еңел еңелмәҫ ине... Надирҙың изге хәтере хаҡына ғәфү ит, Суфыя...

... Ҡыйыуһыҙ ғына әйтелгән һүҙҙәр ҡатынды уйҙарынан арындырҙы:

- Суфыя апай, мин Надир менән Мәрйәмдең ҡыҙы бит...

Суфыя апай күҙҙәренән субырлап йәш аҡҡан ҡыҙға ғәжәпләнеп ҡарап торҙо ла уны ҡосағына алды. Йыраҡ йылдар аша һөйгәненең йылыһын алып ҡайтты уның балаһы. Йәшлеген хәтерләтте.

- Ҡыҙым, Зәлиә, беҙҙең хаталарҙы ҡабатламағыҙ. Мөхәббәтегеҙҙе һаҡлағыҙ...

Зәлиә телефонға үрелде.

**Зөлфиә СӘЛИХОВА.**

✓ *Рәсәйҙә ярлылар һаны арта. Былтыр был һан халыҡтың 17,4 процентын, йәки 25 миллион кеше тәшкил иткән. Уларҙың 59,4 проценты - эшләп йөрөүсе граждандар.*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# БЕНЗИНҒА...
## тағы ла хаҡтар арта

■ Росстат мәғлүмәттәре буйынса, һуңғы биш ай эсендә Рәсәйҙә бензинға хаҡтар күтәрелә, мартта ла бензинға хаҡ артыуы көтөлә. Эксперттар әйтеүенсә, был яҙын нефть продукттарын күмәртәләп һатыу хаҡтары артыуы менән бәйле. Бензинға хаҡтар артыуы 22 Рәсәй субъекты үҙәгендә теркәлгән, Ҡурғанда хатта бер аҙна эсендә 3,6 процентҡа күтәрелгән. Һигеҙ төбәктә, киреһенсә, ягыулыҡҡа хаҡтар төшкән.

■ Рәсми статистика мәғлүмәттәренә ярашлы, 1 мартҡа бер литр бензиндың уртаса хаҡы - 21 һум 12 тин, шул иҫәптән А-76, Аи-80 - 18 һум 86 тин, Аи-92-93 - 21 һум 49 тин, Аи-95 - 23 һум 39 тин, дизель яғыулығы 18 һум 85 тин тәшкил иткән. Нефть продукттарына хаҡтар йыл башынан күтәрелгәйне, шуға ла эксперттар фекеренсә, март айында ла бензинға хаҡ артасаҡ. Аналитиктар быны ваҡытлыса хәл, тип тынысландыра, йәнәһе, яҙғы сәсеү алдынан ягыулыҡҡа хаҡтар артыуы ғәҙәти хәл. Хаҡтар күтәрелеүенә нефть продукттарына экспорт һалымы түбәнәйеүе, эске баҙарҙа нефтҡә хаҡ артыуы ла йоғонто яһай. "Финмаркет" белдереүенсә, Аи-95 һәм Аи-92 маркалы бензинға һорау ҙур булыу сәбәпле, мартта был маркалар тағы ла ҡиммәтләнәсәк.

■ Роспотребнадзор етәксеһе, РФ баш дәүләт санитар табибы Геннадий Онищенко белдереүенсә, Рәсәйҙә киҙеү менән сирләүселәр һаны яйлап кәмей бара. Әлеге ваҡытта һыуыҡ тейеүҙән булған ауырыуҙар структураһында сусҡа киҙеүе 1,1 процент тәшкил итә. Һуңғы ике аҙнала Б киҙеүе менән ауырыусылар артыуы күҙәтелһә лә, илдең баш санитар табибы быны яҙ миҙгеле өсөн нормаль күренеш тип иҫәпләй, тип белдерә "Интерфакс".

■ РФ Хөкүмәте 2011-2012 йылдарҙа хеҙмәт хаҡының минималь күләмен (МРОТ) күтәрә алмаясаҡ. Бөгөн рәсәйлеләрҙең минималь эш хаҡы 2007 йылдың йәшәү минимумына тигеҙ, тимәк, ул тағы ла бер нисә йыл ошо кимәлдә ҡаласаҡ. Бөгөнгө көндә хеҙмәт хаҡының минималь күләме - 4330 һум булһа, уртаса йәшәү минимумы ил буйынса уртаса 5198 һум тәшкил итә. Минфин иҫәпләүҙәре буйынса, ил етәкселегенә уртаса эш хаҡын 2008 йылдың йәшәү минимумы кимәленә күтәреү өсөн генә лә байтаҡ сығымдар кәрәк буласаҡ. Мәсәлән, бының өсөн федераль бюджет хеҙмәткәрҙәренә өҫтәмә рәүештә 7 миллиард, ә төбәк бюджеттарын тигеҙләү өсөн 71 миллиард талап ителә. Шуға ла 2011-2012 йылдарҙа минималь хеҙмәт хаҡын яңынан индексациялау мәсьәләһе бынылғы йылдың финанс йомғаҡтары һәм хеҙмәт баҙары торошона ҡарап хәл ителәсәк. Әлегә Рәсәйҙә ярлылар һаны арта. Былтыр был һан халыҡтың 17,4 процентын, йәки 25 миллион кеше тәшкил иткән. Уларҙың 59,4 проценты - эшләп йөрөүсе граждандар. Шул уҡ ваҡытта илдең иң бай кешеләренең килеме ябай эшселәрҙекенә ҡарағанда 16 тапҡырға ҙурыраҡ.

■ Рәсәй интернет-пираттары эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә популяр фильмдар яҡынса 1 млн доллар аҡсаны юғалта. "Индустрия кино" тапшырыуы иҫәпләүе буйынса, мәсәлән, былтыр йәй прокатта барған "Боҙлоҡ осоро: динозаврҙар эраһы" йәнһүрәте интернет селтәренән 408 000 тапҡыр алып ҡаралған. Кинотеатрҙарҙа ошо уҡ фильмды 8,5 млн кеше ҡараған, пираттар арҡаһында йәнһүрәт 4,6 процент тамашасыһын юғалтҡан.

*СӘЛӘМӘТ БУЛ!*

**Кешенең алкоголгә, никотинға тиҙ өйрәнеүе күптән билдәле. Бәхтиһән, тәмле-татлы аҙыҡҡа шулай уҡ күнегеп китергә мөмкин икән. Етмәһә, тәмле тамаҡтар тиҙерәк ҡартая, имеш...**

# ТӘМ-ТОМДО...
## туйғас ҡына аша

Принстон университеты ғалимдары ҡомаҡтарҙа тәжрибә үткәреп ҡараған. Йәнлектәрҙе улар ике төркөмгә бүлгән. Беренсе төркөмгә тик татлы аҙыҡтар биргәндәр, икенсе төркөм ҡомаҡтар ғәҙәти рацион менән туҡланған. Бер нисә йыл эсендә тәүге төркөмдәге ҡомаҡтар шәкәр наркомандарына әүерелгән! Бер аҙ тәм-том бирмәй тотҡандан һуң, ҡомаҡтар шәкәрҙе тағы ла күберәк ашай башлаған.

Иң ҡыҙығы шунда: тәмлетамаҡ ҡомаҡтарға аҙ ғына күләмдә наркотик биргәндә, уларҙа ябай ҡомаҡтарға ҡарағанда тиҙерәк наркотиктарға ылығыу барлыҡҡа килгән. Йәғни, шәкәр уларҙың баш мейеһен наркотик препараттар ҡабул итеүгә әҙерләгән.

Бынан һуң ғалимдар шундай фекергә килгән: был процестар ҡәнәғәтлек тойғолары уятыусы гормон - дофамин менән бәйле. Уның миҡдары саҡ ҡына кәмеү менән ҡомаҡтарҙа бахмурға оҡшаш "сир" башлана. Шәкәр, алкоголь һәм күп наркотиктар кеүек үк, мейегә дофамин рецепторҙары аша тәьҫир итә. Ҡомаҡ менән кеше араһында ниндәй уртаҡлыҡ бар, тиһегеҙме? Ҡасандыр ҡомаҡтарҙа үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, алкоголгә, кокаинға, морфинға бәйле булыу моделдәре кешенекенән бер нәмәһе менән дә айырылмай.

Шәкәр иртә йыйырсыҡтар барлыҡҡа килеүенә булышлыҡ итә. Күп йылдар тире ҡартайыуы мәсьәләләрен тикшереүсе Chanel лабораторияһы ғалимдары ошондай фекергә килгән. Лаборатор тикшеренеүҙәр барышында асыҡланыуынса, организмға эләккән шәкәр кристалдары коллаген туҡымаларға ултырып, тиренең һығылмалығын юҡҡа сығара. Һөҙөмтәлә коллагендар саҡ ҡына көсәргәнештән дә һынып, был урында йыйырсыҡтар барлыҡҡа килтерә.

Әммә Canel компанияһының пресс-атташеһы Мари-Элен Лэр быға аныҡлып индереп, шәкәрләнгән туҡымалар кире үҙ хәленә ҡайта ала, тип белдерә. Етмәһә, тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, был процесс татлы аҙыҡ яратмаған кешеләрҙә лә булыуы ихтимал. Шулай ҙа шәкәрҙе артыҡ ҡулланыу иртә йыйырсыҡтар барлыҡҡа килеүенә булышлыҡ итә.

"Шәкәрҙе артыҡ ҡулланыу, әлбиттә, зарарлы. Әммә унан тулыһынса баш тартыу тағы ла зарарлыраҡ, - тип иҫкәртә табип-диетолог, медицина фәндәре докторы Михаил Гинзбург. - Шәкәр - мейене туҡландырыусы эксклюзив аҙыҡ булып тора. Тәм-том тынысландыра, уйҙарҙы тәртипкә килтерә, кәйефте күтәрә".

Иң мөһиме - татлы ашамлыҡтарҙы ас ҡарынға ашамау. Юғиһә, ҡанда шәкәр күләме ҡапыл артып, ҡапыл кире кәмей һәм функциональ гипогликемия барлыҡҡа килә, йәғни тағы ла берәй татлы аҙыҡ ашағы килә башлай, аппетит күтәрелә. Бынан артыҡ килограмдар йыйыуығыҙ бар, үт ҡыуығына ла зарар килтерәһегеҙ. Шуға ла десертты иң аҙаҡ ашау яҡшы.

*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*

# МАТУРЛЫҠ ВИТАМИНДАРЫ



**Рәсәй Фәндәр академияһының Туҡланыу институты мәғлүмәттәренә ярашлы, рәсәйлеләргә йышыраҡ С, В2, В6, А, Е витаминдары, фолий кислотаһы, бета-каротин, макро- һәм микроэлементтар (кальций, тимер, йод, фтор, цинк, селен һ.б) етешмәй. Бигерәк тә организм яҙын витаминдарға ҡытлыҡ кисерә башлай, шуға ла һалҡын тейҙереп ауырыусылар күбәйә. Витаминдар етешмәүен ябай күҙ менән дә күрергә мөмкин: ҡоро тире, ваҡ йыйырсыҡтар, һыныусан сәстәр... Тимәк, хатта сәләмәт рационды ла төрлө витаминдар менән тулыландырыу мөһим.**

Дөрөҫөн әйткәндә, беҙ авитаминоз тип йөрөткән сир ысынында бик ауыр патологик торош. Бынан быуат ярым ваҡыт элек тап авитаминоз һөҙөмтәһендә матростар араһында цинга сире барлыҡҡа килгән һәм үлем менән тамамланған. Бөгөнгө аҙыҡ-түлек мул заманда кеше организмы витаминдар менән тулыланып тора һәм авитаминоз диагнозы бик һирәк осраҡта ғына ҡуйыла. Әгәр ҙә ҡулланған аҙығыбыҙ витаминдарға бай булмаһа, беҙ үҙебеҙҙе насар тоя башлайбыҙ, төрлө сирҙәргә бирешеп барабыҙ. Был авитаминоздың еңелсә формаһы - гиповитаминоз тип атала. Витаминдарҙан тыш, организмға тимер, йод һәм селен кеүек микроэлементтар ҙа етешмәй.

Сәстәр ҡоро һәм тиҙ һыныусанға әйләнһә, тимәк, организмда А, D, Е витаминдары насар үҙләштерелә. Аҡһыл йөҙ, ғәҙәттә, анемия тураһында һөйләй. Аҙ ҡанлылыҡ организмға тимер етешмәгәндә барлыҡҡа килә. Тире аҡһыл, етмәһә, күгелйем төҫкә инһә, ҡан тамырҙары муртыҡ һәм С, Е витаминдары етмәй. Терһәктең тиреһе ҡоро булһа, А һәм В төркөмө витаминдары насар үҙләштерелә. Теш эмале менән проблемалар барлыҡҡа килеүе тештәр һәм һөйәктәр өсөн мөһим булған кальций һәм D витамины ҡытлығы тураһында белдерә. Тырнаҡтар һыныусан булһа, бәлки, организмға кремний етмәйҙер. Даими хәлһеҙлек тойоу, күңел төшөнкөлөгө, тиҙ ярһып барыу ҙа витаминдар ҡабул итеп алыу кәрәклеге тураһында һөйләй.

Быныдай осраҡтарҙа ниндәй генә ҡиммәтле кремдар һайлаһағыҙ ҙа файҙаһы булмаясаҡ, сөнки тире ҡуҙәнәгенә туҡландырыусы матдәләр ҡан аша ғына эләгә ала. Шуныһы ҡыҙыҡ, әгәр ҙә организмға берәй витамин етешмәй икән, ул файҙалы матдәләрҙе иң тәүҙә йәшәү өсөн мөһим булған ағзаларға: йөрәккә, бауырға илтә. Сәләмәтлек һәм матурлыҡ өсөн кәрәкле компоненттарҙы тире иң һуңынан ала. Шуға ла, һатыуҙа булған витамин-минераль комплекстарға ҡарағанда, нутрикосметика саралары яҡшыраҡ һөҙөмтә бирә, ти белгестәр. Беренсенән, уларҙың составында флавоноидтар, аминокислоталар, фитоэстрогендар, коллаген һәм эластин синтезын барлыҡҡа килтереүсе саралар бар. Икенсенән, нутрикосметика составындағы файҙалы матдәләр тура тирегә тәьҫир итерлек итеп төҙөлгән. Коэнзим Q10, йөшел сәй экстракты, гәрәбә кислотаһы, керамидтар, метионин, гуаран, изофлавондар нутрикосметикала иң күп ҡулланылған компоненттар иҫәпләнә. Улар тиренең иртә ҡартайыуына юл ҡуймай, тире һәм сәс матурлығын оҙағыраҡ һаҡларға ярҙам итә, токсиндарҙы сығара, ҡан әйләнешен яҡшырта.

Кешелек тарихында иң тәүге нутрикосметика сараһы йәки биологик әүҙем өҫтәмә (БАД) XX быуатта барлыҡҡа килә. Әммә составындағы ксантоксантин эске ағзаларға насар тәьҫир итеүе асыҡланғас, күп илдәрҙә был препарат тыялар. Һуңғараҡ биохимик Лайнус Полинг С витамины йәшәүҙе оҙайта, микробтарҙы үлтерә, йөрәк сирҙәрен иҫкәртә, тигән асыш яһағас, бар халыҡ дарыуханаларға "тылсымлы" витамин һатып алырға йүгерә. Үткән быуаттың аҙағында "Гербалайф" һәм ананас нигеҙендәге майҙы яндырыусы препараттар ҙур һорау менән файҙалана. Тикшереүселәр фекеренсә, киләсәктә ресвератролом - яңы "йәшлек эликсиры" модаға инәсәк. Ул күп крем составтарына ингән, тиҙҙән таблеткалар ҙа һатыуға сығыуы көтөлә.

Бөгөн һатыуҙа булған нутрикосметика саралары витаминлы (фармацевтик) һәм аҙыҡ өҫтәмәһе препараттарына бүленә. Тәүгеләрендә витамин һәм минералдар күләме витамин дефицитын дауалау өсөн тәғәйенләнгән, икенселәре профилактика өсөн генә ҡулланыла ала. Теге йәки был препарат теркәлеү үткәнме, юҡмы икәнен Роспотребнадзорҙың сайтында (www.rospotrebnadzor.ru) асыҡларға мөмкин.

Матурлыҡ витаминдарын 18 йәштән ҡуллана башларға ярай, тиһәләр ҙә, женьшень йәки фитоэстрогенлы өҫтәмәләрҙе 30 йәштән һуң ғына ҡабул итергә мөмкин. А витамины йәки бета-каротин өҫтәмәләрен ҡышҡы ваҡытта эсеү яҡшыраҡ, сөнки улар УФ-нурҙарына һиҙгерлекте арттыра. Йәйгеһен был витаминдар ҡулланыу тирелә пигмент таптар барлыҡҡа килтерә. Нутрикосметика тәьҫирен башҡа витамин комплекстары менән көсәйтергә маташмағыҙ, был осраҡта дозаны арттырыу ҡурҡынысы янай. Һис юғында, белгестәр менән кәңәшләшеү ҡамасауламаҫ. Аҙыҡ өҫтәмәләрен йыл әйләнеһенә ҡабул итергә ярамай, ғәҙәттә, уларҙы аныҡ билдәләнгән курстар менән эсәләр. Витамин комплекстарын да, нутрикосметика сараларын да ашаған саҡта йәки ашағандан һуң ҡабул итергә, ас ҡарында улар тулыһынса үҙләштерелмәй.

**Яҡшы сәләмәтлек өсөн артыҡ күп нәмә лә кәрәкмәй. Йышыраҡ саф һауала йөрөргә, дөрөҫ туҡланырға, күберәк хәрәкәтләнергә һәм, әлбиттә, насар ғәҙәттәрҙән йыраҡ торорға тырышығыҙ. Алкоголь ҡабул иткән кешеләрҙең организмынан С һәм В витаминдары төркөмө спирт менән йыуылып сыға, ә был витаминдар нервы системаһы эшмәкәрлегенә, организмдың сирҙәргә ҡаршы тороусанлығына тура-тура йоғонто яһай. Йәғни, һау-сәләмәт булыуҙың бер ауырлығы ла юҡ, барыһы ла үҙегеҙҙең ҡулығыҙҙа.**

✓ *Ауылдарҙа, бигерәк тә башҡорт ауылдарында, ҡунаҡтар ҙа эскеһеҙ үтә башланы. Тултырма, ҡаҙы, бишбармаҡ артынан ҡоротлап һурпа бирәләр, тәмле сәй менән һыйлайҙар.*



МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ



# ШАЙТАН ХӘЙЛӘЛӘРЕ



## Күренмәгән дошмандарҙан абай бул

**Шайтан Аллаһтың ихлас ҡолдарына зыян килтерә алмай:**

Ҡөрьәндең "Әл-Хижр" сүрәһенең 39-40-сы аяттарында: **"Иблис әйтте: "Раббым, мине тура юлдан яҙҙырғаныңа күрә, мин дә Ер йөҙөндәгеләргә гонаһтарын ләззәтле һәм гүзәл ғәмәл итеп күрһәтермен һәм юлдан яҙҙырырмын. Тоғро ҡолдарыңдан ҡалған барсаһын да",** - тип әйтелгән.

Шулай итеп, Аллаһы Тәғәлә шайтанға кешеләр өҫтөнән власть биргән. Ләкин шайтандың власы үҙ динен һүҙҙә генә раҫлаған динһеҙҙәр һәм икейөҙлөләргә генә ҡағыла. Сөнки улар Аллаһы Тәғәләне һәм Аллаһ ярҙамын аңлы рәүештә кире ҡағып, шайтан ярҙамын бер һүҙһеҙ ҡабул итеп, шайтан артынан китеү менән ҡәнәғәтләнгән кешеләр. Шуны һәр саҡ хәтерҙә тотоу кәрәк: Аллаһы Тәғәләгә ынтылғандар ғына еңеүгә өлгәшә.

Ә хәҙер Аллаһы Тәғәлә Илсеһе Мөхәммәт бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) аша кешелеккә төшөрөлгән бөйөк мөғжизә - Изге Ҡөрьән һүҙҙәренә ҡолаҡ һалайыҡ: "Иҫәп-хисап бөткәндән һуң (иманлылар - йәннәттәргә, гонаһлылар йәһәннәмдәргә урынлаштырылғас) шайтан әйтер: "Һис шикһеҙ, Аллаһ һеҙгә вәғәҙә иткәнде еренә еткерҙе. Мин дә һеҙгә вәғәҙә иттем, әммә һеҙҙе алданым. Һеҙгә ярҙам итерлек көс миндә юҡ. Мин бары тик һеҙҙе Аллаһҡа ышанмаҫҡа өндәнем. Хәҙер мине түгел, үҙегеҙҙе ғәйепләгеҙ. Мин һеҙҙе ҡотҡара алмайым, һеҙ ҙә мине ҡотҡара алмаҫһығыҙ. Һеҙҙең мине Аллаһҡа тиңләүегеҙҙән мин ваз кисәм", - тип әйтер. Шик юҡ, залимдар өсөн әрнеүле яҙалар бар", - тип яҙылған "Ибраһим" сүрәһенең 22-се аятында.

### Шайтандың асыҡтан-асыҡ һөйләүе...

Муаз бин Джабаль Ибн Ғәббәстән ошоларҙы ишетеүен һөйләй: "Бер көндө беҙ Аллаһ илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) менән ансарҙарҙың береһенең өйөндә йыйылыштыҡ... Аллаһ илсеһе сәхәбәләре менән сөхбәт (әңгәмә) уҙғарып ултыра ине. Шул ваҡыт урамдан тауыш ишетелде:

- Өй хужалары!.. Өйҙә кем бар?.. Миңә инергә рөхсәт бирәһегеҙме? Минең һеҙгә йомошом бар ине...

Бөтәһе лә Бәйғәмбәргә ҡараны. Был әңгәмәлә иң төп кеше булғанға күрә, рөхсәтте ул ғына бирә ала ине.

Аллаһ илсеһе:

- Был кемдең тауышы икәнен беләһегеҙме? - тип һораны.

Беҙ бөтәбеҙ ҙә:

- Аллаһы Тәғәлә һәм Уның бәйғәмбәре яҡшы беләләр, - тип яуап бирҙек.

Бәйғәмбәр:

- Был ҡәһәр һуҡҡан Иблис - Шайтан. Әйҙә Аллаһы Тәғәләнең ҡарғышы уның өҫтөндә булһын...

Кем килгәнен белгәс, Ғүмәр:

- Эй, Аллаһ илсеһе! Миңә уны үлтерергә рөхсәт ит! - тип ҡысҡырып ебәргән.

Әммә Аллаһ илсеһе уға рөхсәт бирмәгән:

- Туҡта, Ғүмәр! Уның үлеме билдәле бер көнгә тиклем кисектереп торолғанын белмәйһеңме ни? - тигән. - Уға ишекте асығыҙ, инһен әйҙә... Уға бында килергә әмер ителгән. Уның әйткәндәрен аңларға тырышығыҙ. Иғтибар менән тыңлағыҙ...

* * *

Артабан риүәйәтсе былай тип һөйләй:

"Уға ишекте астылар. Ул өйгә инде һәм беҙҙең алдыбыҙға килеп баҫты. Был ҡылый күҙле, һаҡалһыҙ, эйәгендә тик ат ҡойроғондағы кеүек алты йәки һигеҙ бөртөк кенә һаҡалы эленеп торған, күҙҙәре шар асылған һәм өҫкә ҡараған, филдеке кеүек шул тиклем ҙур башлы, һыйырҙыҡы кеүек һалпайып төшкән муйынлы ҡарт булып сыҡты.

Ул өйҙә йыйылыусыларҙы сәләмләне:

- Сәләм һиңә, о Мөхәммәт; сәләм һеҙгә, эй, мосолман өммәте!

Аллаһ илсеһе уға шулай яуап бирҙе:

- Сәләм Аллаһҡа бирелә, ә һин ҡәһәрле... Һин эш буйынса килгән, тип ишеттем, йомошоңдо һөйләп ебәр?

Шайтан былай тип башланы:

- Мин бында үҙ иркем менән килмәнем, мине мәжбүр итеп ебәрҙеләр.

Аллаһ илсеһе унан:

- Мәжбүр итеп, тигәнде нисек аңларға? - тип һораны.

Шайтан былай тине:

- Миңә Һинең бөйөк Раббыңдан фәрештә килде һәм былай тине: "Бөйөк Аллаһы Тәғәлә бойора: "Мөхәммәткә барып, уға нисек Әҙәм балаларын ҡыҙыҡтырыуың һәм алдауың тураһында һөйлә. Тик күндәм һәм тыңлаусан бул. Һуңынан уның бөтә һорауҙарына ла дөрөҫ яуап бирерһең. Бөйөк Аллаһы Тәғәлә иҫкәртте: "Әгәр һөйләгәндәреңә бер генә лә ялған һүҙ өҫтәһәң, алдаһаң, һине көлгә әйләндерәм һәм ел менән борҡотам. Дошмандарың алдында һине мәсхәрәгә ҡалдырам".

Бына шулай, ошо бойоroҡты тыңлап, о, Мөхәммәт, мин һиңә килдем. Нимә теләйһең, шуны һора. Әгәр ҙә һинең һорауҙарыңа ялған яуаптар бирһәм, дошмандарым мине мәсхәрә итәсәк. Ысынында, миңә дошмандарымдың көлөүенән дә яманыраҡ нәмә юҡ".

**(Дауамы бар).**

ШАҢДАУ



# ЭСКЕ БЕҘГӘ ЙӨҘ ТҮГЕЛ - иманыбыҙға ҡайтайыҡ!

**Әхмәр Үтәбайҙың "Мин эсеүемде ташланым" тигән мәҡәләһе мине генә түгел, бик күп айыҡ кешеләрҙе уйға һалғандыр. Йәл, эскелек менән мауыҡҡан кешенең генә уны уҡырға, һабаҡ алырға түҙемлеге етмәгәндер.**

Араҡы менән һатыу пландарын үтәгән мәлдәр, магазин кәштәләренең араҡынан һығылып торған, мискә-мискә шарап, һыра һатылған саҡтар бар ине бит. Эскелек шул саҡтарҙа уҡ сәскә атҡан да, һуңғы осорҙа йәшәүсе беҙ уның емешен тиргәнбеҙҙер инде. Туй үткәрһәң - ҡоҙаларыңды, ҡунаҡ саҡырһаң - ҡунаҡтарыңды "аяҡтан йыҡҡансы" һыйларға кәрәк, тигәндәй. Табының төрлө һыйниғмәттән һығылып торһа ла, ниндәй генә бүләктәр бирһәң дә, араҡың юҡ йәки самалы икән, был хәлдең ҡунаҡтарыңа оҡшамауы, хатта "һаран" мөһөрөнә дусар булыуың да ихтимал.

Егеттәр әрмегә китә, атай-әсәй оҙатыу өсөн мәжлес йыя, бала иҫән-һау әрменән ҡайта - тағы эске. Йәштәр үҙҙәренсә, ололар үҙҙәренсә һалдатты "ҡунаҡ" итә. Һәр байрам шулай уҡ эске мәжлесе менән ҡаршы алына. Тыуған көн кисәләре, бәпәй йыуыуҙар - ай-һай, байрамдар күп шул. Туй, ҡунаҡ үтеүе "шунса араҡы китте, ҡунаҡтарҙы ҡолатҡансы һыйланыҡ", тип баһалана.

Балаларына терәк-таяныс, ҡалҡан булыр, кәңәш бирер саҡтарында күпме аҫыл ирҙәребеҙ хәмер һаҙлығына батып, юҡҡа сыҡты. Урамдарҙа иҫерек инәйҙәр, ҡатындар осрай башланы, ауыл клубтарында эскән-тартҡан ҡыҙҙарҙы күреү ғәҙәти күренешкә әйләнде. "Эскесенең үҙенән алда ҡатыны ҡартая" тигәндәрен беләм. Эскелек арҡаһында күпме ғаилә тарҡалды, күпме бала етем ҡалды, күпме ғүмерҙәр ҡыйылды, енәйәттәр ҡылынды...

Мәктәп эскәмйәһенән, юҡ, сәңгелдәктән, тиһәк тә хата булмаҫ, эскелекте, эске мәжлестәрен күреп үҫкән балалар ни эшләргә тейеш һуң? "Ояһында ни күрһә, оҫҡанында шул булыр" тип тапҡыр әйтелгән мәҡәл йәшәй халҡымда. Атайҙар: "Беҙҙе эскегә һуғыш өйрәтте, нарком нормаһын эсеп өйрәндек", - тип аҡланды. Ә балалары... Ошо аҡланыуҙы аңланылармы икән? Юҡтыр, минеңсә.

Һуңғы йылдарҙа, әлбиттә, тормош күҙгә күренеп ыңғай яҡҡа үҙгәрә, эскелек тә артҡа сигенә башланы. Ҡарап һоҡланырлыҡ йәштәребеҙ бар, Хөкүмәтебеҙ ҙә йәштәрҙе, балаларҙы, әсәләрҙе хәстәрләй, улар өсөн төрлө программалар, закон проекттары ҡабул итә. Йәштәр дингә ынтыла, ә ҡайҙа дин - шунда иман, шунда тәртип. Көрсөк тә көрсөк, тиһәләр ҙә, гүзәл Башҡортостаныбыҙҙа йәшәү өсөн мөмкинлектәр етерлек, тик һаулығың, теләгең, ынтылыш-маҡсатың ғына булһын. СССР ваҡытын бик маҡтаһаҡ та, ул заманда күп нәмә бер ҡалыпҡа һалынған кеүек ине. Хәҙер кеше уйлана, эҙләнә, әйтер һүҙен әйтә ала, тип уйлайым. Ауылдарҙа, бигерәк тә башҡорт ауылдарында, ҡунаҡтар ҙа эскеһеҙ үтә башланы. Тултырма, ҡаҙы, бишбармаҡ артынан ҡоротлап һурпа бирәләр, тәмле сәй менән һыйлайҙар. Элек "бисмиллаһ" тип әйтергә лә ояла һалар, хәҙер ихласлап динде өйрәнәләр, мәсеттәр төҙөлә. Йәштәр яңы тормошҡа, яңыса йәшәргә ынтыла. Барыбер ҙә беҙҙең Башҡортостанға тиңләшкән бер ил дә юҡтыр. Рәхәтләнеп башҡорт телендә сыҡҡан баҫмаларҙы уҡыйбыҙ, кинәнеп БСТ тапшырыуын ҡарайбыҙ, күңелебеҙ булғансы "Юлдаш"ты тыңлайбыҙ. Ошоларҙың ҡәҙерен беләйек, үҙебеҙҙе һаҡлайыҡ, иманлыларҙан өлгө алып йәшәйек әле, милләттәштәрем!

**Зарифа АБЫҘБАЕВА.**
**Бөрйән районы.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Бәхет артынан ҡыуһаң - ул ҡаса, бүлешһәң - һиңә ҡайта

Беҙ һүҙ ҡөҙрәтен баһалай белергә тейешбеҙ. Ҡайһы саҡта һүҙҙәр беҙ бирә алған бөйөк бүләк булып тора. Бүтәндәрҙең ҡабатланмаҫ һәләтенә ихлас күңел менән баҡ һәм үҙеңдең һоҡланыуыңды белдер. Кәрәк була икән, ярҙам күрһәт. Уларға элекке ҡаҙаныштары, ҡыуаныстары һәм уңыштары тураһында йыш ҡына хәтеренә төшөр. Бүтәндәрҙең абруйын баһалай һәм ҡабул итә бел. Яҡындарыңа мөмкин тиклем: "Мин һине яратам", - тип, үҙеңдең һөйөүеңде белдереп тор.

Киң күңелле бул, ғәфү итә бел. Улай ғына ла түгел, кәрәк саҡта "Ғәфү ит мине", - тип әйтергә өйрәнеү ҙә мөһим. Кем - хаҡ, кем ғәйепле булыуына ҡарамаҫтан, был һүҙҙәр һине шул мәлдә уратып алған кешеләр өсөн бәхет өләшеүсе нур булып тора ала.

Изгелек күрһәт. Бәхет урамда китеп барған таныш булмаған кешегә йәки яҡындарыңа ҡарата йүнәлтелгән йылмайыу аша тапшырыла. Был, бәлки, шул ваҡытта ауырып ятҡан, йәки яңғыҙы ҡалған, йәки ауыр мәлдәр кисергән дуҫыңа телефон шылтыратыуы булыуы ихтимал. Кемдеңдер эсендәген тышҡа сығарып һалғыһы килә икән, бер ниндәй ҙә кәңәш бирмәйенсә, иғтибар менән тыңла. Өй эштәрендә ярҙамлаш, ҡушҡанды башҡар йәки башҡа төрлө ярҙам тәҡдим ит.

Һинең бәхет ҡоҙоғонан һоҫоп алынған аҡса йәки мөлкәт бүләк булып тора аламы? Әгәр ҙә улар ысын күңелдән бирелә икән, әлбиттә, була ала. Үҙебеҙ эйә булған әйберҙе быға мохтаж булғандар менән ихлас бүлешкәндә, беҙ бәхетебеҙҙе тағы ла арттыра алабыҙ. Беҙ аңлы рәүештә уртаҡлашырға, бүтәндәр ҡайғы һәм ауырлыҡ кисергәндә ярҙам итергә тейешбеҙ, әммә уны яҡшы булып күренер йәки махсус һалым льготаларына эйә булыр өсөн эшләргә ярамай.

Ысын күңелдән бирелгән бүләк үҙебеҙҙә булған бәхетте бүтәндәр менән бүлешеү теләгенән тыш, башҡа төрлө ниәттәрҙе үҙ эсенә ала алмай. Үҙебеҙҙә эске бәхет сығанағын күрмәйбеҙ икән, беҙ тормош мәғәнәһен һәм үҙебеҙгә ҡарата ихтирам тойғоһон юғалтабыҙ. Беҙ бәхеткә лайыҡ булырға йәки уны һатып алырға тырышып, был бушлыҡты тултырырға ынтылабыҙ, әммә шул уҡ ваҡытта үҙ-үҙебеҙҙе алдауға бирелеүебеҙ ҙә ихтимал. Үҙ-үҙеңде ҡорбан итеү һәм һәр ваҡыт үҙеңдекенә ҡарағанда бүтәндәр ихтыяжын алға ҡуйырға ынтылыу ҙа бүләк итә белмәү кеүек зыян килтерә ала. Беҙ һәр ваҡыт тойғо үлсәме һәм матди хәлебеҙгә ҡарап, сама билдәләй алабыҙ.

Бәхете тулы булмаған кеше тиҙ хаталана ала. Күберәк матди байлыҡ туплауға ынтылыу бары тик ваҡытлыса һәм ялған ҡәнәғәтлек тойғоһо бирә ала. Күңел тыныслығына һәм бәхеткә өлгәшеү парадоксы түбәндәгенән ғибәрәт: беҙ эҙләгәндәр үҙебеҙҙә ята, әммә уны бүтәндәргә бүләк иткәндә генә үҙебеҙгә ҡарата иң көслө тойғолар кисерә алабыҙ.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**



## 15 МАРТА ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Обручальное кольцо". Сериал
16.20 "Спальный район", 80-я серия. Мелодраматический сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.20 "Давай поженимся!"
19.10 "След". Сериал
20.00 "Жди меня"
21.00 Время
21.30 "Семь жен одного холостяка", 4-я серия. Сериал
22.30 "Сергей Юрский. Командовать парадом буду я!" Док. фильм
23.30 "Школа". Сериал
00.00 "Ночные новости"
00.10 "Познер"
01.10 "Гении и злодеи"
01.40, 03.05 "Полусвет"
03.00 Новости
03.50 "Акула"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Леший. Продолжение истории". Мелодрама
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Леший. Продолжение истории". Мелодрама. Продолжение
13.40 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Два билета на дневной сеанс". Детектив
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.15 "Вести-Башкортостан"
17.35 "Ефросинья", 19-я серия. Сериал
18.30 "Дворик", 10-я серия. Сериал
19.00 "Слово женщине", 40-я серия. Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "След Саламандры", 9-я серия. Сериал
22.00 "Смерть Вазир-Мухтара", 1-я и 2-я серии. Историческая драма
23.50 "Вести+"
00.10 "Городок"
01.05 "Честный детектив"
01.45 "Сигнал". Триллер
03.45 "Комната смеха"
04.40 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

06.10 "Таксистка". Сериал
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Кулинарный поединок"
09.30 "Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Мур есть Мур!-3". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Гончие". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00, 23.15 "Сегодня"
19.30 "Глухарь. Продолжение". Сериал, 1-я часть
21.30 "Гончие-2". "До первой крови", 1-я и 2-я части. Остросюжетный сериал
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.15 "Роковой день"
01.50 "Персики"
03.50 "Озеро призраков"
05.50 "Сильвестр и Твитти: загадочные истории". Мультфильм

### БСТ

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00**
14.00 "Хорошее настроение"
15.00 Новости (на русск. яз.)
15.15 Художественный фильм
17.20 "Виктория"
18.05 "Любимые мелодии"
18.40 "Родословная малой Родины"
19.00 Новости (на башк. яз.)
19.30 "Сельский час"
20.05 "Полезные новости"
20.15 "Сэнгелдэк"
20.30 "Тепло Аксаковского дома"
21.00 "Деловой форум"
21.30 Новости (на русск.яз.)
22.00 "Спортивный интерес"
22.30 Новости (на башк. яз.)
23.00 Художественный фильм. По окончании: погода

## 16 МАРТА ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Обручальное кольцо". Сериал
16.20 "Спальный район", 81-я серия. Мелодраматический сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.20 "Давай поженимся!"
19.10 "След". Сериал
20.00 "Пусть говорят"
21.00 Время
21.30 "Семь жен одного холостяка", 5-я серия. Сериал
22.30 "Хребет России"
23.30 "Школа". Сериал
00.00 "Ночные новости"
00.20 "На ночь глядя"
01.00, 03.05 "Холодная гора". Мелодрама
03.00 Новости
04.00 "Неизведанный Китай"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "Срочно в номер-2"
11.00, 14.00, 17.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал
12.45 "Территория красоты". Сериал
13.40, 04.40 "Вести. Дежурная часть"
14.30, 17.15 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вызов". Сериал
15.45 "Суд идет"
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.35 "Ефросинья", 20-я серия. Сериал
18.30 "Дворик", 11-я серия
19.00 "Слово женщине", 41-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "След Саламандры", 10-я серия
22.00 "Смерть Вазир-Мухтара", 3-я и 4-я серии
23.50 "Вести+"
00.10 "С любимыми не расставайтесь". Мелодрама
01.40 "Горячая десятка"
02.55 "Люди в деревьях-2"
03.45 "Джордж Уоллас"

### НТВ

06.10 "Таксистка". Сериал
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Квартирный вопрос"
09.30 "Чистосердечное признание"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Мур есть Мур!-3". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Гончие". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.30 "Глухарь. Продолжение". Сериал
20.40 "Гончие-2". "До первой крови", 3-я и 4-я части. Сериал
22.40 "Лекарство против страха". Детектив
00.30 Футбол. Лига чемпионов. "Севилья" (Испания) - ЦСКА (Россия). Прямая трансляция
02.40 "Лига чемпионов УЕФА. Обзор"
02.55 "Безумные соседи". Комедия
04.25 "Дракула 3000". Фильм ужасов
05.50 "Сильвестр и Твитти: загадочные истории". Мультсериал

### БСТ

07.00 "Салям"
09.00 Новости (на башк. яз.)
09.25 "Полезные новости"
09.35 "Виктория"
10.25 "Хазина". А. Усманова
11.00 Новости (на русск. яз.)
11.15 Фильм-детям
13.00 Новости (на башк. яз.)
13.15 "Музыкальная шкатулка"
13.35 "На своей земле"
14.00 "Хорошее настроение"
15.00 Новости (на русск.яз.)
15.15 "Автограф". А. Утябай
16.00 "Родные напевы"
17.00 Мультфильм
17.10 "Виктория"
17.55 "Спортивный меридиан"
18.20 "Любимые мелодии"
18.40 "Родословная малой Родины"
19.00 Новости (на башк. яз.)
19.30 "Курултай"
20.10 "Сэнгелдэк"
20.25 "В центре внимания"
20.45 "Дорогой перемен". Госсобранию-Курултаю РБ - 15 лет
21.30 Новости (на русск.яз.)
22.00 "Уфимское "Времечко"
22.30 Новости (на башк. яз.)
23.05 "Криминальный спектр"
00.50 Художественный фильм. По окончании: погода

## 17 МАРТА СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Обручальное кольцо". Сериал
16.20 "Спальный район", 82-я серия
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Давай поженимся!"
19.10 "След". Сериал
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Семь жен одного холостяка", 6-я серия
22.30 "Среда обитания. Почему все так дорого". Док. фильм
23.30 "Школа"
00.00 Ночные новости
00.20 "На ночь глядя"
01.00, 03.05 "8 миля"
03.00 Новости
03.10 "Взлет и падение Хайди Фляйсс"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05, 04.00 "Человек без маски. Георг Отс"
10.00 "Срочно в номер-2"
11.00, 14.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал
12.45 "Территория красоты"
13.40 "Вести. Дежурная часть"
14.30, 17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вызов". Сериал
15.45 "Суд идет"
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.35 "Ефросинья", 21-я серия
18.30 "Дворик", 12-я серия
19.00 "Слово женщине", 42-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "След Саламандры", 11-я серия
22.00 "Смерть Вазир-Мухтара", 5-я и 6-я серии
23.50 "Вести+"
00.10 "Начало"
02.05 "Люди в деревьях-2"
03.00 "Джордж Уоллас"

### НТВ

06.10 "Таксистка"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Дачный ответ"
09.30 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Мур есть Мур!-3". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30, 18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Кодекс чести". Сериал
19.30 "Глухарь. Продолжение". Сериал
21.30 "Гончие-2". "Охота на невидимку", 1-я и 2-я части. Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Поздний разговор"
00.20 "Главная дорога"
00.55 "Везет как утопленнику". Комедия
03.00 "Помощник сатаны"
04.35 "Запретная зона"
05.50 "Сильвестр и Твитти: загадочные истории"

### БСТ

07.00 "Салям"
09.00 Новости (на башк. яз.)
09.30 "Виктория"
10.30 "Действующие лица"
11.00 Новости (на русск. яз.)
11.15 Фильм-детям
12.45 Мультфильм
13.00 Новости (на башк. яз.)
13.15 "Музыка на канале"
13.35 "Крестьянский двор"
14.00 "Хорошее настроение"
15.00 Новости (на русск. яз.)
15.15 Художественный фильм
17.05 "Виктория"
17.55 "Сэнгелдэк"
18.10 Новости (на башк. яз.)
18.35 "Родословная малой Родины"
18.55 Хоккей
21.30 Новости (на русск. яз.)
22.00 "Тай-тулак"
22.30 Новости (на башк. яз.)
23.00 "Историческая среда"
23.35 "Хрустальный соловей-2010"
00.20 Художественный фильм. По окончании: погода

## 18 МАРТА ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 "Новости"
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости
15.20 "Обручальное кольцо". Сериал
16.20 "Спальный район", 83-я серия
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Давай поженимся!"
19.10 "След". Сериал
20.00 "Пусть говорят"
21.00 Время
21.30 "Семь жен одного холостяка", 7-я серия. Сериал
22.30 "Человек и закон"
23.30 "Школа"
00.00 Ночные новости
00.20 "Судите сами"
01.10, 03.05 "Двухсотлетний человек"
03.00 Новости
03.40 "Неизведанный Китай"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "Срочно в номер-2"
11.00, 14.00, 17.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 Тайны следствия". Сериал
12.45 "Территория красоты"
13.40 "Вести. Дежурная часть"
14.30, 17.15 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вызов". Сериал
15.45 "Суд идет"
16.30 "Кулагин и партнеры"
17.35 "Ефросинья", 22-я серия. Сериал
18.30 "Дворик", 13-я серия
19.00 "Слово женщине", 43-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "След Саламандры", 12-я, закл. серия
22.00 "Смерть Вазир-Мухтара", 7-я и 8-я серии
23.50 "Вести+"
00.10 "Хороший немец". Драма
02.20 "Люди в деревьях-2"
03.15 "Джордж Уоллас"
04.10 "На краю гибели. Правда о подвиге космонавта Леонова"

### НТВ

06.10 "Таксистка"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Следствие вели..."
09.30 "Первая кровь"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Мур есть Мур!-3". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30, 18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Кодекс чести". Сериал
19.30 "Глухарь. Продолжение". Сериал
21.30 "Гончие-2". "Охота на невидимку", 3-я и 4-я части
23.10 "След в океане". Детектив
00.50 Футбол. Лига Европы. "Вольфсбург" (Германия)- "Рубин" (Россия) . Прямая трансляция
03.05 "Лига Европы УЕФА. Обзор"
03.20 "Шесть". Фантастический боевик
05.00 "Особо опасен!"

### БСТ

07.00 "Салям"
09.00 Новости (на башк. яз.)
09.25 "Полезные новости"
09.35 "Виктория"
10.30 "Тай-тулак"
11.00 Новости (на русск. яз.)
11.15 Фильм-детям
12.45 Мультфильм
13.00 Новости (на башк. яз.)
13.15 "Музыка на канале"
13.30 "Историческая среда"
14.00 "Хорошее настроение"
15.00 Новости (на русск. яз.)
15.15 Художественный фильм
17.00 "Виктория"
17.45 Мультфильм
17.55 "Сэнгелдэк"
18.10 Новости (на башк. яз.)
18.35 "Родословная малой Родины"
18.55 Хоккей
21.30 Новости (на русск. яз.)
22.00 "Действующие лица"
22.30 Новости (на башк. яз.)
23.00 "На страже закона"
23.30 Художественный фильм. По окончании: погода

## 19 МАРТА ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 "Новости"
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости
15.20 "Обручальное кольцо", 193-я серия
16.20 "Спальный район", 84-я серия
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.20 "Поле чудес"
19.20 "След". Сериал
20.00 "Пусть говорят"
21.00 Время
21.30 "Семь жен одного холостяка", 8-я серия. Сериал
22.30 "Лезвия славы". Комедия
00.10 "Гарик Сукачев. 5:0 в мою пользу"
02.20 "Капоте"
04.20 "Неизведанный Китай"
05.20 "Детективы"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Мусульмане"
09.15 "Мой серебряный шар"
10.10 "Срочно в номер-2"
11.00, 14.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия"
12.45 "Территория красоты"
13.40 "Вести. Дежурная часть"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вызов"
15.45 "Суд идет"
16.30 "Кулагин и партнеры"
17.00 "Вести"
17.15 "Вести-Башкортостан"
17.35 "Ефросинья", 23-я серия
18.30 "Дворик", 14-я серия
19.00 "Слово женщине", 44-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Юрмала". Фестиваль юмористических программ
22.40 "Смерть Вазир-Мухтара", 9-я и 10-я, закл. серии
00.35 "13 месяцев Егора Гайдара"
01.20 "Симона". Фантастика
03.45 "Люди в деревьях-2"
04.40 "Джордж Уоллас"

### НТВ

06.10 "Таксистка"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "И снова здравствуйте!"
09.30 "Особо опасен!"
10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Мур есть Мур!-3". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Кодекс чести". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.30 "Глухарь. Продолжение". Сериал
20.30 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
20.55 "НТВишники. Попса: зачем мы это слушаем?"
21.55 "Таблетка от старости"
22.55 "Женский взгляд"
23.45 "Суперстар" представляет". "Валерий Леонтьев. Книга судьбы"
02.10 "Слежка". Детектив
03.40 "Особо опасен!"
04.10 "Ограбление века"
05.40 "Сильвестр и Твитти: загадочные истории"

### БСТ

07.00 "Салям"
09.00 Новости (на башк. яз.)
09.30 "Виктория"
10.30 "Телекомпас"
11.00 Новости (на русск. яз.)
11.15 Фильм-детям
13.00 Новости (на башк. яз.)
13.15 "Музыка на канале"
13.30 "Судьбы радужные нити"
14.00 "Хорошее настроение"
15.00 Новости (на русск. яз.)
15.15 Художественный фильм
17.10 "Виктория"
18.00 "Йома"
18.20 "Народные мелодии"
18.40 "Родословная малой Родины"
19.00 "Новости" (на башк. яз)
19.30 "Точка зрения"
20.05 "Полезные новости"
20.15 "Сэнгелдэк"
20.30 "По волнам моей памяти". Якуп Кулмый
21.00 "Райхан"
21.30 Новости (на русск. яз.)
22.00 "Уфимское "Времечко"
22.30 Новости (на башк. яз.)
23.05 "Криминальный спектр"
23.25 Художественный фильм. По окончании: погода

## 20 МАРТА СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.50, 06.10 "Наши соседи"
06.00 Новости
07.30 "Играй, гармонь любимая!"
08.10 Дисней клуб: "Чип и Дейл спешат на помощь", "Черный плащ"
09.00 "Умницы и умники"
09.40 "Слово пастыря"
10.00, 12.00 Новости
10.10 "Непутевые заметки"
10.30 "Смак"
11.10 "Моя родословная"
12.10 "Сергей Юрский. Командовать парадом буду я!"
13.10 "Республика ШКИД". Трагикомедия
15.00 "Люди в черном". Фантастика
16.50 "Надежда Бабкина. Живу, как сердце подсказало... Док. фильм
17.50 "Кто хочет стать миллионером?"
18.50 "Предлагаемые обстоятельства". Детективный сериал
21.00 "Время"
21.15 "Жестокие игры"
22.30 "Прожекторперисхилтон"
23.10 "Фантастическая четверка: вторжение серебряного серфера". Приключения
00.50 "Остаться в живых". Сериал
01.40 "Фанат"
03.50 "Второй пропущенный звонок"

### РОССИЯ 1

05.40 "Однажды двадцать лет спустя". Лирическая комедия
07.10 "Вся Россия"
07.25 "Диалоги о животных"
08.00, 11.00 "Вести"
08.10, 11.10 "Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.45 "Субботник"
09.25 "Звезда Бориса Штоколова"
10.10 "Неустрашимый. Подводная война Петра Грищенко". К Дню моряка-подводника
11.20 "Качество жизни"
11.35 "Дела и люди"
11.45 "Рецепты здоровья"
12.05 "Формула совершенства"
12.15 "Телохранитель". Сериал (в перерыве - 14.00 "Вести")
14.20 "Вести-Башкортостан"
16.10 "Кто хочет стать Максимом Галкиным"
17.05 "Ты и я"
18.05 "Субботний вечер"
20.00 "Вести в субботу"
20.40 "Метель". Мелодрама
00.20 "Роковое число 23". Триллер
02.20 "Смерти вопреки". Боевик
04.15 "Звезда Бориса Штоколова"

### НТВ

06.00 "Класс". Сериал
07.30 "Сказки Баженова"
08.00, 10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ". Лотерея
08.50 "Без рецепта"
09.25 "Смотр"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.25 "Особо опасен!"
14.05 "В поисках Франции"
15.05 "Своя игра"
16.20 "Адвокат". "Любовь до гроба". Детективный сериал
17.25 "Очная ставка"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.25 "Профессия - репортер"
19.55 "Программа максимум"
21.00 "Русские сенсации"
21.50 "Ты не поверишь!"
22.40 "Легенды видео". "Идеальное убийство". Детектив
00.45 "Новый свет". Приключения
03.25 "Вечное сияние чистого разума". Фантастика
05.10 "Особо опасен!"
05.40 "Сильвестр и Твитти: загадочные истории". Мультсериал

### БСТ

08.00 Новости (на русск. яз.)
08.05 "Доброе утро!"
08.40 Погода
08.45 Мультфильм
10.10 "Советы садоводам"
10.30 "Волшебный курай"
11.00 "Хрустальный соловей-2010"
11.45 Впервые на экране ТВ. А. Атнабаев. "Суд матери". Спектакль Сибайского башкирского государственного драматического театра им. А. Мубарякова
13.30 "Оперный сезон"
14.00 Новости (на башк. яз.)
14.20 "Сулпылар"
14.40 "Дарю песню"
15.40 Мультсериал
16.05 "Салют Победы"
16.50 "Позитив"
17.15 "В кругу друзей". В. Каримов
18.40 "Вестник Газпромтрансгаз Уфа"
19.00 Новости (на башк. яз.)
19.20 "Дарю песню"
20.20 "Сэнгелдэк"
20.40 "Тропинки жизни"
21.30 Новости (на русск. яз.)
22.00 "На сон грядущий"
22.40 Художественный фильм. По окончании: погода

## 21 МАРТА ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Аты-баты, шли солдаты..." Военная драма
07.50 "Армейский магазин"
08.20 "Дисней-клуб": "Кряк-бригада", "Клуб Микки-Мауса"
09.10 "Здоровье"
10.00 Новости
10.20 "Пока все дома"
11.10 "Счастье есть!"
12.00 Новости
12.10 "Фазенда"
12.50 "Севастопольские рассказы. "Крымские каникулы Екатерины Великой"
13.40 "Виктор Павлов. Судьба меня хранить устала"
14.30 "Городской пейзаж". Мелодрама
16.00 "Четыре мифа о здоровом образе жизни". Док. фильм17.00 "Песни на двоих. Лев Лещенко и Вячеслав Добрынин". Концерт
18.50 "КВН". Высшая лига
21.00 Воскресное "Время"
22.00 "Мульт личности"
22.30 Футбол. Чемпионат России. II тур. "Зенит" - "Спартак". Прямая трансляция (в перерыве - Новости)
00.30 "Дежавю". Триллер
02.50 "Крутой и цыпочки". Комедия

### РОССИЯ 1

05.30 "Земля Санникова". Приключения
07.20 "Смехопанорама Евгения Петросяна"
07.50 "Сам себе режиссер"
08.35 "Утренняя почта"
09.10 "Приключения Запятой и Точки"
09.30 "Сказка о царе Салтане". Сказка
11.00, 14.00 "Вести"
11.10, 14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан. События недели"
11.50 "Городок"
12.20 "Черчилль". Детективный сериал
14.30 "Вести. Дежурная часть"
15.00 "Честный детектив"
15.30 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт
17.25 "Танцы со звездами". Сезон-2010"
20.00 "Вести недели"
21.05 "В Париж!" Драма
23.40 "Специальный корреспондент"
00.40 "Жатва". Фильм ужасов
02.50 "Крутящий момент". Боевик

### НТВ

06.05 "Класс". Сериал
07.30 "Дикий мир"
08.00, 10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
08.15 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.20 QUATTRORUOTE
10.50 "Спасатели"
11.25 "Первая кровь"
12.00 "Дачный ответ"
13.20 "Особо опасен!"
14.05 "Алтарь победы"
15.05 "Своя игра"
16.20 "Адвокат". "Вновь открывшиеся обстоятельства". Детективный сериал
17.20 "И снова здравствуйте!"
18.20 "Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа" с Кириллом Поздняковым"
19.55 "Чистосердечное признание"
20.25 "Грязная работа". "Дело хирурга". Сериал
00.00 "Авиаторы"
00.35 "Футбольная ночь"
01.05 "Сириана". Детектив
03.25 "Я - Сэм". Драма
05.30 "Сильвестр и Твитти: загадочные истории"

### БСТ

08.00 Новости (на русск. яз.)
08.10 "Для вас, ветераны!"
08.40 Погода
08.45 Мультфильм
10.00 "Прогулки под водой". Док. фильм
10.30 "Бабушкин сундучок"
11.00 "Тэмле"
11.30 "Сулпылар"
11.50 "Семер"
12.05 "Байтус"
12.25 "Артылыш"
13.00 "Байык". Республиканский конкурс любителей башкирского танца
13.50 "Дарю песню"
14.50 "Книжный дом"
15.10 Мультсериал
15.35 "Салям". Воскресный выпуск
15.55 "Дорога к храму"
16.20 "Крылья"
16.55 Гала-концерт победителей зонального конкурса исполнителей башкирской песни на приз им. З. Махмутова
17.55 "Автограф". Г. Сват
18.30 "Дарю песню!"
19.30 "Уральский самородок"
20.30 "Мир глазами звезд"
21.10 "Урал Лото 6 из 40"
21.30 "Ватан". События недели
22.40 Погода
22.45 "Вечер.сом"
23.25 Художественный фильм. По окончании: погода





"Башҡорт энциклопедияһы" ғилми нәшриәте "Башҡорт энциклопедияһы"ның (рус телендә) 1,2,3,4-се томдарын; "Салауат Юлаев" энциклопедияһын; "Башҡорт теленең орфографик һүҙлеге"н һәм башҡа китаптар һата. Адрес: Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 55. Телефондар: 250-00-56; 250-03-92.

✓ *Профессиональ тәржемәселәр тексты шыма тәржемә итеү менән генә сикләнмәй, әҫәрҙең стилен айырым бер дәүергә тап килтерә, башҡорт телендә әҫәрҙәге ил мөхитен һүрәтләүгә ирешә.*



*АҒЫ ЛА БАР, ҠАРАҺЫ ЛА…*

# ТЕЛДЕ САМАЛЫ БЕЛГӘС...

## тәржемәгә тешең үтмәҫ



**Февраль аҙағында Башҡорт дәүләт академия драма театрының Бәләкәй залында көтөлгән ваҡиға - билдәле Голливуд актеры, режиссеры Вуди Аллендың пьесаһы буйынса ҡуйылған "Хәйерле иртә, Энид!" исемле спектакль премьераһы булып үткәйне. Йәш режиссер Нәркәс Искәндәрованың Башҡортостандың төп театрында ҡуйған спектакле унын уйсан режиссер булыуы, тышҡы эффекттарҙы маҡсат итеп ҡуймай, кеше психологияһына тәрән сумырға тырышыуын иҫбатланы. Бик үҙенсәлекле актерҙар командаһы XX быуат урталарындағы ярлы Америка ғаиләһенең хыялдарын һәм ысынбарлығын асып бирҙе.**

Сәйәсәт эшенә сумып, байтаҡ ваҡыт яңы ролдәрҙә күренмәгән Эльвира Юнысова, төп героиня Энид ролен башҡарып, үҙенең тәрән драматик актриса икәнлеген тағы ла бер тапҡыр иҫбат итте. Ҡасандыр комик булырға хыялланған театр агенты ролен башҡарған Хәмит Яруллин егеттәрсә етеҙлеге менән һоҡландырҙы. Алмас Әмиров (Энидтың ире Макс), Айһылыу Йомағолова, Фирҙәүес Ғиззәтуллина (Бетти) был ыҡсым спектаклдең (унда ни бары алты герой) бер ҡараһаң - көлкөлө, бер ҡараһаң, ҡыҙғаныс сюжетын бер тынала ҡараттырҙы. Театрҙың йәш актерҙары иһә Энидтың улдары, шуҡ үҫмер Стив (Артур Кәбиров) һәм үҙ хыял донъяһына сумған, кешеләрҙән тартынған егет Пол (Урал Әминев) шулай уҡ ролдәрен бик оҫта башҡарҙы.

Башҡорт театрҙарында сит ил авторҙарының әҫәрҙәрен сәхнәләштереү милли драматургиябыҙҙың үҫешенә аяҡ сала, тип иҫәпләүселәр бар. Әлбиттә, башҡорт драматургияһын үҫтереүгә көс һалырға кәрәклеге бәхәсһеҙ, әммә сит ил авторҙары әҫәрҙәрен яҡлап, бер мөһим мәсьәлә күтәреп сығырға кәрәктер.

Беҙ бәләкәй саҡтан уҡ сит ил яҙыусыларының әҫәрҙәрен рус телендә уҡыйбыҙ, йәғни бөтөн донъя мәҙәниәтен рус теле аша үҙләштерәбеҙ. Донъяның иң аҫыл китаптарын, фильмдарын туған телебеҙҙә түгел, ә, асылда, ят тел аша ҡабул итергә мәжбүрбеҙ. Шул арҡала йәш быуында башҡорт теле - икенсел, көнкүреш аралашыу теле, ә рус теле - беҙгә донъя мәҙәниәтен алып килеүсе тел, тигән фекер урынлаша килә. Рус теле өҫтөнөрәк, тип ҡабул ителә. Бына ошо зарарлы фекер менән көрәшер өсөн кәрәк тә инде донъя әҫәрҙәренең башҡорт теленә сифатлы тәржемәләре. Бала саҡтан уҡ классик әҙәбиәтте башҡорт телендә уҡып, сит ил киноһын, сәхнә әҫәрҙәрен башҡорт телендә күреп үҫһә бала, туған теленә ҡарата кәмһетеүле, битараф ҡараш та тыумаҫ ине. Киләсәктә башҡорттарҙың үҙ-ара саф, бай, һутлы туған телдә аралашыуын теләйбеҙ икән, тамашасыны ла төрлө яҡтан тәрбиәләргә, әҙерләргә кәрәк.

Был йәһәттән "Хәйерле иртә, Энид!" пьесаһының башҡортсаға тәржемәһе, әлбиттә, тамашасыны хозурландырырлыҡ кимәлдә түгел. Хатта ҡолаҡты ярырлыҡ һүҙбәйләнештәр осрай: "Өнөңдө тыҡ!", "һөҙөмтәләр яһалды" ("һығымталар яһалды" урынына). Фокус күрһәтеүсе егет "хәрәкәт эшләү" урынына "ишара эшләй". Ҡайһы бер һүҙҙәрҙе бөтөнләй тәржемә итергә кәрәк тип тапмағандар: костер, пончик, мәҫәлән. Америка мөхитен сағылдырыу маҡсатында ҡайһы бер һүҙҙәрҙең инглиз телендә ҡалдырылыуы аңлашыла. Әммә рус теленең Америкаға ниндәй ҡыҫылышы бар? Костёр урынына - усаҡ, пончик урынына - ҡабартма тип әйтеп булмаймы?

Үкенескә ҡаршы, был күренеш тик ошо спектаклдең генә бәләһе түгел. Тәржемәгә йыш ҡына был өлкәлә тәжрибәләре булмаған, хатта ҡайһы саҡ башҡорт телен самалы белгән кешеләр тотона. Үҙ көстәренә артыҡ ышаналармы, тәржемә - ул еңел эш, тигән фекер йөрөтәләрме, билдәһеҙ. Тәржемәсе һөнәре бушҡа ғына уйлап сығарылмаған бит. Профессиональ тәржемәселәр тексты шыма тәржемә итеү менән генә сикләнмәй, әҫәрҙең стилен айырым бер дәүергә тап килтерә, башҡорт телендә әҫәрҙәге ил мөхитен һүрәтләүгә ирешә, ул илдә ҡулланылған үҙенсәлекле һүҙҙәрҙе саф башҡорт һүҙҙәре аша бирергә тырыша. Әлбиттә, быының өсөн рус телен "һыу һымаҡ эсеү" генә түгел, сит телдәрҙе лә һәйбәт белеү кәрәк. Башҡортостанда бындай белгестәр бармы? Әлбиттә, бар. Мәскәү Әҙәбиәт институтында тәржемәселеккә уҡыған белгестәребеҙ, тәржемә эше менән байтаҡ йылдар шөғөлләнгән яҙыусыларыбыҙ бар. Академия театрыбыҙ, әлбиттә, сит ил әҫәрҙәрен тәржемә итеүгә осраҡлы кешеләрҙе түгел, ә профессиональ тәржемәселәрҙе йәлеп итергә тейеш, сөнки уның бурысы - тамаша ҡылыу ғына түгел, ә тотош милләтебеҙҙең мәҙәни кимәлен үҫтереү, иҫ киткес бай башҡорт теле өсөн ғорурлыҡ уятыу ҙа.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт дәүләт академия драма театрының йылдан-йыл байый барған репертуары төрлө йәштәге, төрлө зауыҡлы тамашасының күңеленә ятырлыҡ. "Хәйерле иртә, Энид!" спектаклен дә ҡалабыҙҙың мәҙәни тормошонда бер ваҡиға, тип атарға була. Тик уның тәржемәһен өр-яңынан редакциялау зарур. Шул осраҡта ғына уны театрҙың шикһеҙ уңышы, тип әйтергә мөмкин буласаҡ. Ә Нәркәс Искәндәрова иһә киләсәктә лә беҙҙе яңынан-яңы спектаклдәре менән ҡыуандырыр, тип, уңыштар теләп ҡалайыҡ!**

**Таңсулпан БУРАҠАЕВА.**

*КОТЛАЙБЫҘ!*

Мәләүез ҡалаһында йәшәүсе киленем **Гөлшат Ишмөхәмәт ҡыҙы** һәм ҡустым **Сөләймән Ғиниәт улы СОБХАНҒОЛОВ**тарҙы 55 йәшлек юбилейҙары менән ҡайнар ҡотлайым!

Именлектә, һаулыҡта бер-берегеҙгә терәк-таяныс булып оҙон- оҙаҡ тиң йәшәргә насип булһын. Балаларығыҙ ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеп, уңыштары менән һеҙҙе ҡыуандырһын. Хеҙмәтегеҙ емешен татып, бәхетле ғүмер кисерегеҙ. Туғандарығыҙ, дуҫиштәрегеҙ араһында абруйлы булып, киләсәктә лә тормошоғоҙ гөрләп тороуын теләйем.

Юлдар оҙон, йылдар тыныс булһын,
Ҡояш һипһен һәр саҡ йылыһын.
Аҡ бәхеттең, шатлыҡ-ҡыуаныстың
Бирһен Хоҙай иң-иң ҙурыһын!

***Барлыҡ туғандарығыҙ исеменән, Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылынан апайығыҙ Миңлегөл.***

* * *

Баймаҡ районы Муллаҡай ауылында йәшәүсе **Нуретдин Ғәйнетдин улы ӘХМӘТҠУЖИН**ды 50 йәшлек юбилейы уңайынан ҡайнар ҡотлайбыҙ.

Ҡәҙерле ағайыбыҙ, ҡустыбыҙ! Йөрәгебеҙҙең иң түренән сыҡҡан иң изге, матур теләктәребеҙҙе ҡабул итеп ал. Күңелең шулай һәр саҡ киң, атыр таңдарың аяҙ, килер көндәрең көләс булһын. Оҙон ғүмер, тән сихәтлеге, ныҡлы һаулыҡ бирһен Хоҙай, күңелеңдәге йән йылыңдың нуры һүнмәһен, һүрелмәһен, тирә-яғыңдағыларға аҡ нур булып яғылһын, беҙгә терәк булып, балаларыңа кәрәк булып тағы ла бик күп йылдар йомғағын һүтергә насип итһен. Һис ҡасан ауырыу-һыҙланыу белмә, күңелең һәр саҡ бөтөн, кәйефең күтәренке булһын.

***Иң изге теләктәр менән Әхмәтҡужиндар, Байғужиндар, Ғайсиндар.***

* * *

Баймаҡ районының Сыңғыҙ ауылында тыуып үҫеп, әле Өфөлә йәшәүсе хеҙмәт ветераны, Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған китапханасыһы **ХӘМИТОВА (Түләкова) Ғилминур Бәхтейәр ҡыҙын** 75 йәшлек юбилейы менән ихлас күңелдән ҡайнар ҡотлайбыҙ. Һин һәр ваҡыт беҙгә сабырлыҡ, изгелек, бөхтәлек өлгөһө булып ҡалдың, әсәй, ҡарсәй, өләсәй, ҡәҙерле туғаныбыҙ!



***Баймаҡ районында, Өфө ҡалаһында йәшәүсе балалары, ейән-ейәнсәрҙәре, барлыҡ туғандары исеменән, улы Ратмир, ейәнсәре Гөлназ Хәмитовтар.***

*ИҒЛАН*

## Иҫке компьютерҙарҙы ҡайҙа ҡуйырға белмәйһегеҙме?

Башҡортостан Республикаһының "Тәбиғәт" дәүләт унитар предприятиеһы электрон ҡалдыҡтарҙы - эштән сыҡҡан компьютерҙарҙы, оргтехниканы ҡабул итеү һәм утилләшереү буйынса эш башланы. Махсус лицензияға нигеҙләнеп тапшырылған техникаға кәрәкле документтар бирелә.

Ҡулланыуға яраҡһыҙ йәки модификацияһы иҫкергән монитор, принтер, процессор, копир, сканер кеүек техника Өфө ҡалаһы, Степан Кувыкин урамы, 102 адресы буйынса ҡабул ителә.

Предприятие хеҙмәткәрҙәре яңы заманса технологияларға нигеҙләнеп ҡабул ителгән техниканы утилләштерә, файҙалы эшкә яраҡлы өлөштәрен артабан производствоға ебәрә.

**Белешмә өсөн телефондар: (347) 248-26-78, 248-26-83, 252-03-88, факс: (347) 252-06-19.**

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

## Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**18 мартта** Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Сәйҙә Ильясованың Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығына бағышланған **"Йөрәгемде асып ирек бирәм моңдарға…"** исемле концерты уҙа.

**20 мартта** Республика йылына бағышлап **"Каруанһарай"** фольклор-эстрада төркөмө "Данлы юлдан атлай ғорур Башҡортостан!" программаһы тәҡдим итә. Художество етәксеһе - Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Мәхмүт Нәҙершин.

## Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

Кем ул беҙҙең өсөн **Әхмәтзәки Вәлиди Туған**? Күренекле төрөк тарихсыһымы, йә иһә тыуған ереңең азатлығы өсөн көрәшеүсе ил уҙаманымы? Үҙенән һуң тәрән эҙ ҡалдырған был бөйөк шәхес хаҡындағы спектаклдең премьераһы **19, 20, 31 мартта** була. Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Нәжиб Асанбаевтың Әхмәтзәки Вәлиди Туған тураһындағы трилогияһы нигеҙендә ҡуйыласаҡ спектаклдең режиссеры - Айрат Абушахманов, рәссамы - Таң Еникеев, композиторы - Илшат Яхин.



## Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**16 мартта** 19.00 сәғәттә М.Кәримдең **"Йәйәүле Мәхмүт"** спектакле.

**17 мартта** 10.00 сәғәттә С.Суринаның **"Сыйырсыҡ тәсбихе"** әкиәте.

**17 мартта** 19.00 сәғәттә Т.Миңнуллиндың **"Диләфрүзгә дүрт кейәү"** тамашаһы.

✓ Киләсәктә модель һөнәрен үҙләштереп, донъя яулайым, тип, сит илдәргә китә башлаған ҡыҙҙарҙы аяуһыҙ модель бизнесынан нисек ҡурсаларбыҙ икән һуң?



Аһ-Аһ!

# БАШҠОРТ ГҮЗӘЛЕ БӘЙГЕҺЕ...

## кейемдәр күрһәтеү сараһына әйләнде

**Яңыраҡ баш ҡала "Һылыуҡай - 2010" Республика телевизион гүзәллек бәйгеһенең гала-концерты үтте. 1992 йылда уҡ башланғыс алған, республика тормошонда күркәм, көтөп алынған сара булған "Һылыуҡай" конкурсы быйыл бөтөнләй икенсе юҫыҡта үткәрелде, йәғни ул бәйге рухында түгел, ә кейемдәр демонстрациялау юҫығында ғына үтте. Әлбиттә, һәр конкурсты маҡтау өсөн дә, яманлау өсөн дә сәбәп табырға мөмкин. Ә бына тамашасылар һәм жюри ағзалары башҡорт ҡыҙҙарының гүзәллек бәйгеһен ниндәйерәк итеп күрергә теләй икән? Һүҙ - уларға:**



Гран-при яулаусы Сибай ҡыҙы Айгөл Айытҡолова.
(Юлай Кәримов фотоһы.)

**Розалиә СОЛТАНГӘРӘЕВА, жюри ағзаһы:** Борон-борондан һәр ырыуҙың ҡыйыулығы менән дан алған батыры менән бер рәттән, һылыулығы менән тирә-йүнде хайран иткән матур ҡыҙы ла булған. Тик ырыуҙа матурҙы һәм батырҙы тик йөҙ-ҡиәфәте һәм тышҡы билдәләренә генә ҡарап һайламағандар. Һылыулыҡ - ул күп өлөштәрҙән торған милли ҡаҙаныш. Тәбиғәттән бирелгән һылыулыҡ, эске донъя матурлығы, үҙеңде тота белеү, милләтеңә хеҙмәт итеү, дөйөм кешелек ҡиммәттәренә ниндәйҙер өлөш индерә белеү һәм башҡаларҙан тыуа матурлыҡ һәм батырлыҡ төшөнсәләре. Шуға ла башҡорт халҡының ҡатын-ҡыҙ матурлығы тураһындағы милли идеалын еткереүсе образдар - Шәүрәбеҙ ҙә, Ғилмиязабыҙ ҙа, Сәлимә лә, Таңдыса ла, Һомай ҙа, Нәркәс һәм бик күп һылыуҙарыбыҙ һылыулыҡтан тыш, аҡыл һәм башҡа көс-ғәйрәткә эйә булған. Ә бөгөн был бәйгенең иң мөһим шарты булып тышҡы матурлыҡ һәм буй-һын тора. Икенсенән, бәйгелә бөтөнләй ярыш мәле булманы. Халыҡ бейеүендә тыпырлатыу, матур, һомғол итеп өйөрөлөү, ҡулдар менән матур хәрәкәттәр эшләй белеү юҡ икән, башҡорт милли бейеүе юҡ, тигән һүҙ. Йәки заманса бейеүҙә бөтәһе лә бергә бейегәс, кемделер айырып алыуы ҡыйын булды. Башҡорт һылыуына арналған майҙан башҡорт милләтенә, башҡорт милли ҡиммәттәренә ҡағылышлы булырға тейеш һәм был осраҡта ҡыҙҙарҙың йырлай белеүе, әйтеш тотоуы, мәҡәл белеүе, һ.б. барыһы ла ярыш мәлендә билдәләнә торған ҡиммәттәр.

Һуңғы ваҡытта ниндәй генә ярыш үткәрһәк тә, үҙебеҙҙе ете диңгеҙ аръяғында ҡабул ителгән ҡанундарға көсләп-көсләп индерергә тырышабыҙ. Ирекһеҙҙән, күңелдә ошондай һорау тыуа: кәрәге бармы уларҙың? Шуға күрә лә бәйгелә этнографик, хатта музей рәүешендәге тарихи милли костюмдар булмауы һәм тап шуларҙы күрһәтә белмәүебеҙ ҡыҙғаныс, әлбиттә. Оҙон сәс, һомғол буй, атлап йөрөү, һөйләү - былар барыһы ла башҡорт ҡыҙының һылыулығын күҙалларға ярҙам иткән төшөнсәләр. Улар, үкенескә күрә, ситтән килгән күлдәктәргә һыйҙырыла башланы. Ә ярым-шәрә күлдәк кейеп кенә матурлыҡты күрһәтеп булмай. Артабан ошо кәмселектәрҙән ҡотолорға ине. Һин матур икәнһең, ул матурлыҡты эшкә ҡуша ла белергә тейешһең. Йөҙгә һылыу булмаған ҡыҙ ҙа аҡылы, килбәте, үҙен-үҙе тота белеүе менән һылыуҡай исеменә лайыҡлы була ала.

**Зәһир ИҪӘНСУРИН, тамашасы:** Элек-электән һылыу ҡыҙ ил, ырыу, төбәк байлығы һаналған. Быйыл ҡала һәм район хакимиәттәре үҙ һылыуҡайҙары өсөн махсус бүләктәр әҙерләүе матурлыҡтың бөгөн дә ил эсендә үҙ ҡиммәтен юғалтмауының күрһәткесе, тип иҫәпләйем. Дөйөм алғанда, ҡыҙыҡлы ғына проект булырға оҡшай, әммә әле уны камиллаштырырға, уйлап еткерергә кәрәктер. Башҡорт егете булараҡ, шуны ла әйткем килә: башҡорт ҡыҙының һылыулығын уның тышҡы матурлығы ғына билдәләй алмайҙыр, сөнки тышҡы матурлыҡ эсендә бушлыҡ булыуы ла ихтимал бит.

**Рөстәм АЗАМАТОВ, тамашасы:** Һис шикһеҙ, телевидениеның техник мөмкинлектәре бәйгене ҡыҙыҡлыраҡ итергә ярҙам итте, мәҫәлән, кемдең теләге һәм ваҡыты бар, улар һәр кис һайын һылыуҡайҙарҙы зәңгәр экрандар аша күҙәтә алды. Һайлап алыу турҙарын уңышлы үткән ҡыҙҙар "Йоматау" шифаханаһында йәшәп, һаулығын нығытты, уларға "Һылыуҡай" студияһы белгестәре матурлыҡ серҙәрен төшөндөрҙө. Былар барыһы ла профессиональ яҡтан бәйгене лә, унда ҡатнашыусы ҡыҙҙарҙы ла бер башҡа үҫтерерҙе һәм... "Һылыуҡай"ҙы Бөтә Рәсәй гүзәллек конкурстарынан айырып алмаҫлыҡ итте лә ҡуйҙы. Шуға ла матур һәм сая башҡорт ҡыҙҙары ярышын ҡарарға өмөтләнеп килгән халыҡ бары буйһындары "юғары мода" үлсәмдәренә тап килгән моделдәрҙең төрлө кейемдәр кейеп, подиумдан матур итеп атлап күрһәтеүенә генә хушһынырға мәжбүр булды. Матур, сағыу, күркәм, төрлө биҙәүестәре күп булған был сарала ярыш компоненты ла бик самалы булды.

**Венера ҠОРМАНОВА, тамашасы:** Быйылғы бәйге еңеүселәрҙе лә, бигерәк тә Гран-при яулаусыны бик лайыҡлы, ғәҙел билдәләне, тип иҫәпләйем. Шулай ҙа бәйгеселәрҙең бигерәк йәш булыуы, мине, әсә кешене, хәүефкә һалды әле. Ҡыҙ бала һәр саҡ матурға, йылтыраған әйбергә ҡыҙығыусан була. Киләсәктә модель һөнәрен үҙләштереп, донъя яулайым, тип, сит илдәргә китә башлаған ҡыҙҙарҙы аяуһыҙ модель бизнесынан нисек ҡурсаларбыҙ икән һуң? Матурлыҡ - милләт байлығы ла, тимәк, матур ҡыҙҙарыбыҙ ҙа милләте өсөн хеҙмәт итергә, уға балалар үҫтерергә тейеш. Был юлы "Һылыуҡай" конкурсы тәүге йүнәлешенән ситләшеп, ҡыҙҙарыбыҙҙы донъя моделе подиумдары өсөн әҙерләгән һымаҡ тойолдо әле.

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Һәр башланғыс - яҡшымы ул, насармы - йәшәргә, артабан камиллашырға хоҡуҡлы. Өр яңыса үткән "Һылыуҡай" Республика телевизион гүзәллек бәйгеһе лә әле тәүге аҙымдарын яһай һәм ул моделдәр тәрбиәләүсе проект булараҡ күҙаллана. Ә бына "Һылыуҡай" конкурсының элекке вариантын, бәлки, үҙаллы проект сифатында дауам итергә кәрәктер?**

**Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## БӘЛӘКӘЙ БӘЛӘГӘ ҠАПҠА АСМА,

## артынан ҙурыраҡтары инеүе мөмкин

Яман менән юлдаш булһаң - ярға йығылырһың, яҡшы менән юлдаш булһаң - малға юлығырһың.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Кеше яҡты булғанда - ҡараңғылыҡ, бәхетле булғанда - бәхетһеҙлек, ҡәнәғәт булғанда - ғазаптар тураһында уйламай, киреһенсә булғанда, йәғни ҡараңғыла саҡта - яҡтылыҡ, бәләгә тарығанда - бәхет, фәҡирлектә байлыҡ тураһында уйлай.

**(И.Кант).**

Изге булыу өсөн фәрештә булыу мотлаҡ түгел.

**(Альберт Швейцер).**

Бәләкәй бәләләргә ҡапҡа асма, уның артынан ҙурыраҡтары инеүе мөмкин.

**(Б. Грасиан).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Кисен батша бер вәзире менән баҡсала йөрөп ята икән. Батша вәзиренә шундай һорау биргән:" Әйт әле, һинеңсә, донъяла иң мөһим кеше - ул кем?" Вәзире хужаһының ни әйтергә теләгәнен шунда уҡ һиҙгән: "Власть боҙа башлаған минең батшамды ла, - тип уйлаған ул. - Моғайын, ул үҙен иң мөһим кеше тип уйлайҙыр. Булмай тор әле..." Шунан ул былай тигән: "Минеңсә, батшам, донъяла иң мөһим кеше - ул сабый бала. Сабыйҙы бер кем дә, хатта һин, батша ла, тотоп тыя алмаясаҡһың". "Нисек инде аҡылһыҙ бер бала барыһынан да мөһимерәк була ала! - тип аптыраған батша. - Иҫбат итеп ҡара әле". "Ярай, иҫбат итермен. Тик уның өсөн ваҡыт кәрәк. Мин һынау үткәрергә тейешмен", - тигән вәзир. Шулай килешкәндәр.**

**Бер нисә көндән вәзир батша һарайына бер шуҡ малайҙы күтәреп килеп ингән. Малай батшаға шунда уҡ оҡшаған. Ул уны алдына ултыртып алып яратҡан, шунан бергәләп уйнай башлағандар. Ә малай шаяра торғас батшаның һаҡалына йәбешкән һәм уны ебәрмәй, бар көсөнә тарта башлаған. Батша баланың ҡулдарынан көскә ысҡынып, вәзиренә асыуланып әйтә икән: "Һин ниңә был тәртипһеҙ малайҙы алып килдең? Уны тыйып тотоп булмай ҙа баһа!" Вәзиргә ошо һүҙҙәр кәрәк була ла инде: "Бына, күрҙеңме инде батшам, һиңә башҡа бер кем дә тырнаҡ менән дә ҡағыла алмай, ә был бала һинең һаҡалыңа йәбешеп, бер нисә бөртөгөн өҙөп тә алды хатта. Тимәк, донъяла иң мөһим кеше ул булып сыға инде..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 6423
Заказ 942